ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

10-16 апрель (алағарай) 2026

№14 (1209)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Буш вәғәҙәләр мәле етә



4-5

Уларға ла уҡыу тейеш



6

Шағир, тарихсы, дин әһеле



12-13

Тәҙрә төбөндә...



15

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

ҺӨЙӨНСӨ!

# БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ ЛӘ...

## Рәсәйҙең яңы бренды хәҙер

**Интеллектуаль милек буйынса федераль хеҙмәт "Башҡорт милли кейемдәре" географик күрһәтмәһен теркәгән. Был хаҡта Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова хәбәр итте.**

Хәҙер республикала теркәлгән 11 бренд иҫәпләнә. Улар араһында - Башҡорт балы һәм Бөрйән солоҡ балы, "Ҡорғаҙаҡ", "Асы" һәм "Йоматау" минераль һыуҙары, "Ҡурай" музыка ҡоралы, Башҡорт аты, Мансур граниты, Башҡорт мамыҡ шәле, Башҡорт балаҫы һәм башҡорт милли кейемдәре. Башҡорт милли кейемдәрендә Себер, Урал, Волга буйы, Урта Азия, Яҡын һәм Алыҫ Көнсығыш халыҡтары менән бәйләнеш күҙәтелә, ә төрлө төркөмдәргә хас кейем элементтары уларҙың йәшәгән райондарына ҡарап айырыла.

"Башҡорт костюмы - традицион кейем генә түгел, ә бай тарих һәм күсмә тормош сағылышы. Брендтарҙы теркәү эшен Рәсәй Федерацияһы сенаторҙары, төбәктәр һәм Роспатент менән берлектә Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко ҡушыуы буйынса алып барабыҙ. Бөгөнгә реестрҙа илдең төрлө субъекттарынан 413 уникаль тауар теркәлгән, уларҙың һәр береһе - төбәктең визит карточкаһы ғына түгел, ә тотош илдең иҡтисади үҫешенә индергән өлөшө лә", - тип йомғаҡ яһаны Башҡортостан сенаторы Лилиә Ғүмәрова.



ДИАЛОГ

# ТӘРБИӘ МӘСЬӘЛӘҺЕНДӘ ИҢ МӨҺИМЕ -

## балаларҙа яңы ынтылыштарға юл асыу

**Бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ гәзитебеҙҙең иң тоғро дуҫтары, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусылары - М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы директоры Шәмсулла Хәбибулла улы ХӘБИБРАХМАНОВ һәм Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы директоры Сулпан Мәүләүи ҡыҙы УЙЫЛДАНОВА. Белем усаҡтарында балаларҙы тәрбиәләү алымдары һәм сараларына арналды был юлы беҙҙең һөйләшеү.**

**Мәғарифтың, образлы итеп әйткәндә, ике ҡанаты бар: беренсеһе - белем биреү, икенсеһе - тәрбиә. Тәрбиә процесының төп маҡсаты - баланы шәхес итеп үҫтереү. Мәктәптә уҡыған йылдарында, 7 йәштән 18 йәшкә тиклем, тулы ҡанлы, тамам өлгөрөп еткән шәхес тәрбиәләп буламы?**

***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Мәктәптең төп бурысы - һәр баланы үҙаллы тормошҡа әҙерләү, тап ошо маҡсатта уҡыусыларға 11 йыл дауамында белем бирелә һәм тәрбиәүи саралар ғәмәлгә ашырыла. Әммә мәктәпте тамамлаған һәр бер уҡыусыны тулыһынса, 100 проценты менән өлгөрөп еткән шәхес тип атап булмайҙыр. Шәхес - үтә ҡатмарлы социаль төшөнсә, һәм кеше, әгәр ул аңлы шәхес икән, үҙгәрештән, үҫештән туҡтамай. Һеҙ әйткәнсә, тулы ҡанлы шәхес булыр өсөн тормош тәжрибәһе лә кәрәк. Беҙҙең лицейҙы тамамлап, артабан уңышлы эшҡыуар булып киткән Муса Мәзитов "Минең шәхесемдең нигеҙе лицейҙа формалашты", тип бик дөрөҫ әйткәйне.

***Сулпан Уйылданова:*** Шәмсулла Хәбибулла улының фекере менән килешәм. Эйе, уҡыусыларға белем биреүҙән башҡа төрлө тәрбиә саралары һәр мәктәптең иғтибар үҙәгендә тора, быны закон да талап итә. Әлбиттә, тәрбиә ғаиләнән башлана, бында ғаилә һәм мәктәп бер үк бурысты башҡара. Мәктәпте тамамлаған һәр уҡыусы тормошта үҙ юлын һайлай, ниндәйҙер һөнәрҙе үҙләштерә, ошо күҙлектән ҡарағанда мәктәп һәр баланың үҙаллы тормошон алдан күҙаллай алмай. Мәктәптә алынған белем, унда формалашҡан сифаттар уҡыусыларға юғалып ҡалмаҫҡа, тормоштарында осраған ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға булышлыҡ итә. Бала саҡтағы тәрбиә кешене үҙ-үҙен танып белергә, үҙ-үҙен үҫтерергә өйрәтә һәм, ахыр сиктә, үҙтәрбиә кимәленә тиклем күтәрә ала. Әммә формаль, яһалма тәрбиә сараларын ғына ҡулланыу һөҙөмтәһеҙ ҡала.

(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

12+

✔ *Балалар көслө остаздар менән шөғөлләнде, улар араһында Вадим Харисов та бар. Быға тиклем ул үҙе лә химия буйынса халыҡ-ара олимпиадаларҙа еңеүсе булды, хәҙер иһә яңы быуын чемпиондарын әҙерләй.*



ҠЫҪҠАСА

# ХӘҮЕФ БАР ШУЛ ӘЛЕ

**"Өфөлә дрон һөжүменән зыян күргән йортто тергеҙергә һәм пилотһыҙ осоу аппараты менән бәйле башҡа мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк",- Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиевҡа ошондай йөкләмә бирҙе.** "Һуңғы арала пилотһыҙ хәүеф режимын йышыраҡ иғлан итәбеҙ. 2 апрелдә көслө һөжүм булды. Оборона министрлығына һәм предприятиеларҙы һаҡлау хеҙмәтенә тейешле баһа бирергә кәрәк. Туғыҙ пилотһыҙ осоу аппараты атып төшөрөлдө, берәүһе торлаҡ йортҡа эләкте. Бәхеткә күрә, ҡорбандар юҡ", - тине Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.

✔ **Башҡортостан йәштәр сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса тәүге тапҡыр илдең тәүге өс лидеры исемлегенә инде.** Бер йыл элек республикабыҙ бишенсе урында ине. Рейтинг һөҙөмтәләрен Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ иғлан итте. Йәштәр менән эшләү һөҙөмтәһенә төбәк Башлығы Радий Хәбиров аңлатма бирҙе. "Республикала - миллиондан ашыу йәш кеше, улар үҙҙәрен күрһәтә алһын өсөн мөмкинлектәр булдырырға тырышабыҙ. Инфраструктураны үҫтерәбеҙ, йәштәр өсөн яңы майҙансыҡтар асабыҙ, унда балалар үҙҙәрен төрлө йүнәлештә тормошҡа ашыра ала. Патриотик тәрбиә менән шөғөлләнәбеҙ, ирекмәндәргә, студенттарға, йәш белгестәргә ярҙам итәбеҙ. Осрашыуҙар һәм ҙур саралар үткәрәбеҙ. Беҙҙең йәштәр иң яҡшыһы, мин һәр ваҡыт шулай тинем. Улар менән эшләү - ҙур хөрмәт һәм яуаплылыҡ. Әйткәндәй, быйыл республиканың йәштәр сәйәсәте 35 йыллығын билдәләй", - тине Башҡортостан етәксеһе.

✔ **Республика Башлығы Радий Хәбиров үҙенең социаль селтәрҙәрендә Өфө Көрәш һарайы хаҡында һөйләне.** "Беҙҙең Көрәш һарайының бер ҡасан да буш булмауына шатмын. Бында һәр ваҡыт тормош ҡайнай, бер үк ваҡытта меңәрләгән үҫмер һәм ҡыҙ күнекмә яһай. Үҙендә характер һәм еңеүгә ынтылыш тәрбиәләй, - тип яҙҙы Радий Хәбиров. - Спортты балалар өсөн уңайлы итеү - беҙҙең төп бурыстарҙың береһе. Беҙ бының өсөн яңы спорт объекттары төҙөйбөҙ, тренерҙарға ярҙам итәбеҙ, ҙур ярыштар үткәрәбеҙ һәм билдәле оҫталарҙы саҡырабыҙ. Тағы ла ата-әсәләргә мөрәжәғәт итәм: балаларығыҙҙы спортҡа бирегеҙ. Был һаулыҡ һәм уңышлы киләсәк нигеҙе".

✔ **Өфөнән Белоретка поезд менән дүрт сәғәттә барып етергә мөмкин. Республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Куйбышев тимер юлы начальнигы урынбаҫары Дмитрий Новиков ошо турала һөйләне.** Апрелдә Башҡортостанға ике системалы ике "Финист" электр поезы килә. Республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса тиҙ йөрөшлө электричкалар Өфө - Белорет маршрутына тәғәйенләнә. Шулай итеп, таулы Башҡортостандың баш ҡалаһына 4 сәғәттә барып етергә мөмкин. 2026 йылдың октябрендә был маршрут Магнитогорскиға тиклем оҙайтыла, ә киләһе йылда "Финистар" Сибайға йөрөй башлай. Новиков һүҙҙәренсә, Өфөнән Һамарға электр поездары 8 майҙан йома, шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә йөрөй.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЛАЙЫҠЛЫ БАҺА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың Рәхмәт хатына лайыҡ булды.**

Дәүләт башлығының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров республика етәксеһенә Рәсәй Федерацияһында торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне өсөн юғары наградаға тапшырҙы. 2018 йылдан Башҡортостан йыл һайын торлаҡ төҙөлөшө өлкәһендә Рәсәй лидерҙары иҫәбендә. "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты буйынса 2019-2024 йылдарҙа республикала 17,5 миллион квадрат метрҙан ашыу торлаҡ сафҡа индерелгән, 2024 йылда иһә рекордлы 3,348 миллион квадрат метр. 2025 йылда "Йәшәү өсөн инфраструктура" яңы милли проекты буйынса республикала шулай уҡ 3 миллион квадрат метрҙан ашыу торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. Шулай уҡ Радий Хәбиров көслө йоғонтоло төбәк башлыҡтары рейтингында ла позицияларын нығытты.

# ИҢ ЯҠШЫ ӨСӘҮ ИҪӘБЕНДӘЛӘР

**Башҡортостан уҡыусылары "Сириус"та химия буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһында яҡшы һөҙөмтә күрһәтте, улар ике беренсе урын һәм 12 призлы диплом яуланы, тип хәбәр итте республика Башлығы Радий Хәбиров.**

Наградалар һаны буйынса республикабыҙ Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһенән ҡала Рәсәйҙең иң яҡшы өс төбәге иҫәбенә инде. Беҙҙең командала 27 кеше ине. Уның составында Республика инженер лицей-интернаты, Өфө, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Сибай, Янаул, Октябрьский, Бөрө ҡалалары, Әлшәй һәм Өфө райондары мәктәптәренән уҡыусылар сығыш яһаны. Балалар көслө остаздар менән шөғөлләнде, улар араһында Вадим Харисов та бар. Быға тиклем ул үҙе лә химия буйынса халыҡ-ара олимпиадаларҙа еңеүсе булды, хәҙер иһә яңы быуын чемпиондарын әҙерләй. "Яҡташтарыбыҙҙың еңеүенә өлөш индергәндәрҙең барыһын да ҡотлайым. Ҡатнашыусыларҙы, уларҙың уҡытыусыларын, ата-әсәләрен. Был иһә республика мәктәптәрендә белем биреүҙең, беҙҙең һәләтле балалар менән эшләү системаһының сираттағы еңеүе ул", - тип ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе Радий Хәбиров.

# ӘБЙӘЛИЛГӘ СӘФӘР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Әбйәлил районына эш сәфәре Үҙәк район дауаханаһының яңы балалар поликлиникаһын ҡарауҙан башланды.**

Объект "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проекты сиктәрендә төҙөлгән. Төҙөлөштөң хаҡы 747,1 миллион һум тәшкил иткән, шуның 337 миллион һумы - федераль бюджет аҡсаһы. Поликлиниканы һүтелгән кислород станцияһы һәм автотуҡталыш урынында төҙөгәндәр. Бина Үҙәк район дауаханаһы биләмәһендә урынлашҡан, төп корпус менән йылы үткәүел аша тоташтырылған.

Дауахананың баш табибы Илгиз Килдейәров әйтеүенсә, медицина учреждениеһы сменаһына 150 баланы ҡабул итеүгә иҫәпләнгән. Бинаның дөйөм майҙаны - 4 мең квадрат метрҙан ашыу. Төҙөлөш "3-кә 1" форматындағы контракттар буйынса алып барылған (поликлиниканы проектлау, төҙөү һәм заманса ҡорамалдар менән йыһазландырыу). Яңы балалар поликлиникаһында кескәй пациенттарға медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған. Көндөҙгө стационар, процедура кабинеттары, ашығыс ярҙам блогы, физиотерапия һәм дауалау физкультураһы кабинеттары бар. Бынан тыш, 120 урынлыҡ конференциялар залы һәм медицина вуздары студенттары өсөн уҡыу кабинеты ҡаралған.

# ИҪКӘ АЛДЫЛАР

**Әбйәлил районының Аҫҡар ауылында Радий Хәбиров Рәсәй Геройы Тамерлан Илһамовтың бюсына сәскәләр һалды. 2025 йылдың октябрендә әбйәлилдәр МХО барышында һәләк булған яҡташ яугиргә һәйкәл асҡайны.**




Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йылдың 4 июлендә гвардия прапорщигы Тамерлан Илһамов етәкселегендәге зенит ракета-артиллерия батареяһының хәрби расчеты дошманға һауа разведкаһы алып барып, һауа оборонаһы буйынса хәрби дежурға сыға һәм ракетаға ҡаршы һуғыша башлай. Хәрби хеҙмәткәрҙең оҫта эш итеүе, ракета уты шарттарында ҡыйыулыҡ, батырлыҡ күрһәтеүе, шулай уҡ шәхси составҡа аҡыллы етәкселек итеүе хәрби расчетҡа дошмандың туғыҙ ракетаһын тар-мар итергә мөмкинлек бирә. Бөтә хәрби комплектты тотоноп, Тамерлан Илһамов позицияһын үҙгәртергә була, ошо мәлдә ике ракета зенит комплексына эләгә. Прапорщик яуҙаштары менән бергә һәләк була, ләкин улар, гүмерҙәрен ҡорбан итеп, подразделениеның шәхси составын юғалтыуға юл ҡуймай. Тамерлан 2022 йылдың 13 июлендә тыуған яғы Әбйәлил районының Аҫҡар ауылында ерләнгән.

Хәрби бурысын үтәгәндә күрһәткән ҡыйыулығы һәм батырлығы өсөн Тамерлан Илһамовҡа үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исеме бирелде. 2022 йылдың 1 августында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров геройҙың Алтын Йондоҙон уның ата-әсәһенә тапшырҙы. 2023 йылдың 1 сентябрендә Радий Хәбиров Әбйәлил районының Аҫҡар ауылында Таһир Күсимов исемендәге гимназияла булды һәм Рәсәй Геройы, гвардия прапорщигы Тамерлан Илһамов хөрмәтенә мемориаль таҡтаташ асыу тантанаһында ҡатнашты. Аҫҡар ауылының бер урамы Тамерлан Илһамов исемен йөрөтә, гимназиянан тыш, Сибай институтында мемориаль таҡтаташ ҡуйылды. Геройҙың ҡаһарманлығы тураһында "Герои. Ключи от неба Тамерлана Ильгамова" документаль фильмы төшөрөлдө. Академик Расплетин исемендәге "Алмаз" ғилми-производствоһы берекмәһе радарына "Тамерлан Илһамов" исеме бирелде. "Рәсәй почтаһы" геройҙың портреты төшөрөлгән почта маркаһы сығарҙы.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Башҡортостанда ташҡындың иң юғары кимәле 15-20 апрелдә көтөлә. Был хаҡта вице-премьер Ирек Сәғитов Хөкүмәттә үткән аҙналыҡ кәңәшмәлә белдерҙе. "Өфөлә - 105 йорт яңы участкаһын, ете муниципалитетта - 11 юл участкаһын, республиканың биш районында алты күперҙе һыу баҫты. Һәр осраҡта ла урау юлдар аша ауылдар менән бәйләнеш бар", - тип хәлгә асыҡлыҡ индерҙе республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов.

✔ Өфөлә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында республика мәҙәниәт министрының дүрт кәңәшсеһе менән таныштырҙылар. Ула - Наталья Абдразаҡова, AY YOLA төркөмө артистары Ринат Рамазанов, Руслан Шәйхетдинов һәм хәрби дирижер Азат Шахмөхәмәтов. Министр вазифаһын башҡарыусы Фәнүр Шәйхисламов хәбәр итеүенсә, улар министрлыҡ бойороҡтары менән ағымдағы йылдың февралендә тәғәйенләнгән. Кәңәшселәр үҙ бурыстарын йәмәғәт башланғысында башҡара.

✔ Быйыл дүртенсе "Китап байрамы" халыҡ-ара йәрминкәһе 28-30 майҙа ойошторола. Йәрминкә тәүге тапҡыр республиканың барлыҡ муниципалитеттарында үткәрелә. Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары Наталья Лапшина Коллегияның киңәйтелгән ултырышында ошо турала белдерҙе. Китап календары төҙөлә һәм унда муниципалитеттарҙың китап мәҙәниәтенә арналған барлыҡ саралары индерелә.

✔ Башҡортостан Башлығы гранттары фонды 3 апрелдә йәштәр сәйәсәте өлкәһендәге проекттарға конкурс иғлан итте. Ғаризалар 4 майға тиклем ҡабул ителә. Уны грантыглавы.рф сайтына ебәрергә кәрәк. Конкурста бер йылдан ашыу элек рәсми теркәлгән коммерцияға ҡарамаған ойошмалар ҡатнаша ала, ике миллион һумға тиклем финанс ярҙамы алырға мөмкин. Төп талаптарҙың береһе - унда 14 - 35 йәштәгеләр генә ҡатнаша ала.

✔ Марттың аномаль йылы булыуы йылытыу миҙгелен йылдағыға ҡарағанда иртәрәк тамамлауға ишаралаһа ла ҡалаларҙа һәм район үҙәктәрендә ҡаҙанлыҡтар эшен туҡтатырға ашыҡмайҙар. Республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Юрий Палтусов Хөкүмәттә үткән кәңәшмәлә хәбәр итеүенсә, республиканың 42 муниципалитетында йылытыу миҙгелен апрелдең икенсе яртыһында тамамлау күҙаллана. Тағы 18 районда һәм ҡалала майға тиклем йорттарға йылы биреләсәк. Әлегә йылытыу миҙгеле тик Мәләүез районында ғына тамамланған.

**✓ "Ҡалала сәғәтенә 15 километр тиҙлек менән генә йөрөргә рөхсәт ителгән урындар һаҡлана. Тәртип боҙоусыларҙы ҡала камералары күҙәтә. Бынан тыш, полиция менән берлектә рейдтар үткәреү ҡаралған.**



## ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# "ЕҢЕҮ ПАРОВОЗЫ" КИЛӘ

**Яҙ һайын Башҡортостан, Татарстан, Мордовия, шулай уҡ Һамар, Ырымбур, Ульяновск һәм Пенза өлкәләренең ҙур һәм бәләкәй станцияларына 1945 йылғы Бөйөк Еңеү иҫтәлеге һәм халҡыбыҙ ҡаһарманлығының символдары булған үҙенсәлекле хәрби техника менән ретропоезд килә.**

Ошо ваҡыт эсендә "Еңеү паровозы" 15 мең саҡрымдан ашыу юл үтеп, 38 ҡалала булған, тимер юл вокзалдарында байрам сараларында 200 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. "Быйыл 25 апрелдән 5 майға тиклем ретропоезд Куйбышев магистраленең 22 тимер юл станцияһына бара. Улар араһында Кинель, Похвистнево, Богорослан, Өфө, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Бөгөлмә, Яр Саллы, Светлое Озеро, Әлмәт, Нурлат, Погрузная, Димитровград, Ульяновск-Үҙәк, Инза, Рузаевка, Пенза-I, Асеевская, Кузнецк, Сызрань-I, Тольятти, Һамар бар", - тип белдерҙеләр тимер юлдың матбуғат хеҙмәтендә.

"Еңеү паровозы" Өфөгә һәм Стәрлетамаҡҡа - 26 апрелдә, Туймазыға 27 апрелдә килә. Быйыл тәүге тапҡыр Т-70 танкын, 1939 йылғы гаубицаны, 1943 йылғы минометты, "Прага" танкын күрергә мөмкин.

# ҠАЙҘА ТЫЙЫЛА?

**1 апрелдән Өфөлә рәсми рәүештә электр самокаттары миҙгеле башланды, тип хәбәр иттеләр мэриянан.**

"Ҡалала сәғәтенә 15 километр тиҙлек менән генә йөрөргә рөхсәт ителгән урындар һаҡлана. Сикләү Ленин исемендәге паркка, Пушкин, Ленин һәм Зәки Вәлиди урамдарының бер өлөшөнә ҡағыла, - тип билдәләнеләр Өфө хакимиәтендә. - Бер нисә үҙәк урамда, шулай уҡ Иван Яҡутов исемендәге паркта һәм Совет майҙанында самокаттарҙа хәрәкәт итеү бөтөнләй тыйыла".

Тәртип боҙоусыларҙы ҡала камералары күҙәтә. Бынан тыш, полиция менән берлектә рейдтар үткәреү ҡаралған. Билдәле булыуынса, былтыр Өфө самокатсыларының иң популяр маршруттары Ленин, Октябрҙең 50 йыллығы урамдары, Октябрь проспекты, шулай уҡ Беренсе май һәм Степан Кувыкин урамдары буйлап үтте.

# ЭШ УРЫНЫ БАР

**Ҡала мэрияһы мәғлүмәттәре буйынса, Өфөлә бөгөнгө көндә 9208 буш вакансия бар.**

Билдәләнеүенсә, бигерәк тә "ЮгСтройСнаб", "ОДК-УМПО" һәм "СтройДом" йәмғиәттәренә хеҙмәткәрҙәр күпләп талап ителә. Эш хаҡы кимәле буйынса, 150 мең һум менән, "Стройтакси" ЯСЙ-нең - махсус автомобиль водителдәре һәм "Башпромгидрострой" ЯСЙ-нең электр ҡорамалдарын ремонтлау һәм хеҙмәтләндереү буйынса электромонтерҙары вакансиялары исемлектең башында тора. Ә "Сиб мир" ЯСЙ-нең инженер-проектлаусыһына - 120 мең, "Геопром" гилми - етештереү берекмәһенең КИП инженерына 100 меңдән 110 мең һумға тиклем эш хаҡы тәҡдим итәләр.

# АЭРОПОРТ ЮЛЫН...

**Өфө-аэропорт юлын 2026 йылда ремонтлау күҙаллана. Был хаҡта Башҡортостан транспорт министрлығының беренсе урынбаҫары Виктор Жульков хәбәр итте.**

- Бының өсөн аҡса ҡаралған, былтыр - Өфөгә ингән, быйыл сыҡҡан урынды ремонтлайбыҙ. 2020 йылда ауыр эксплуатация шарттарына иҫәпләнгән Superpave технологияһы буйынса яңы асфальт - бетон ҡатнашмаһын ҡулланып, Өфө-аэропорт юлын ремонтланыҡ. Пик сәғәттәрендә трафик тәүлегенә 120 меңдән ашыу автомобилде үткәрә, бер һиҙатҡа 15-20 мең самаһы тура килә. Ошондай хәрәкәт менән беҙҙә был юл 5 йылға түҙҙе, - тип һөйләне Жульков.

# АҒАСТАР, СӘСКӘЛӘР...

**Өфөлә 7 меңдән ашыу ағас һәм ҡыуаҡ ултыртырға йыйыналар. Улар йәмәғәт киңлектәрендә, ихаталарҙа, мәктәптәр һәм балалар баҡсаларына планлаштырылған.**

Атап әйткәндә, бөтәһе 1,7 меңдән ашыу ағас һәм 5,4 мең ҡыуаҡ ултыртыласаҡ. Быйыл яҙ тағы ла 9 комплекслы төҙөкләндереү аллеяһы барлыҡҡа киләсәк. Ағастарҙы планлы тәртиптә лә, "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһы сиктәрендә лә ултырталар.

Уҙған дүрт йылда Өфөлә 63 аллея барлыҡҡа килде, унда 18,5 меңдән ашыу эре һәм 37 меңгә яҡын ҡыуаҡ ултыртылды. Күп йыллыҡ гортензияларға, спирелларға, хостарға өҫтөнлөк бирелә. Ҡалала шулай уҡ автоһыу һибеү системаһы йыһазландырыла. Үҙәк урамдарҙа күсмә кашпо һәм вазондар ҡулланыла. Былтыр Өфөлә 900 ағас һәм 5,6 мең ҡыуаҡ ултыртылды.

# АРЫҪЛАНДЫҢ ЕҢЕҮЕ

**Өфө ҡалаһының 38-се мәктәбе уҡыусыһы Арыҫлан Шамилов Бөтә Рәсәй йәш юл хәрәкәте инспекторҙары олимпиадаһында еңеүсе булды.**

Баш ҡаланың мәғариф идаралығында белдереүҙәренсә, быйыл интеллектуаль ярыштың финалында тыуған төбәктән, шул иҫәптән Башҡортостандан 22 йәш хәрәкәт инспекторы ҡатнашты. "Олимпиаданың үҙенсәлеге - "Йәмғиәтте өйрәнеү" фәне буйынса интеллектуаль ярыш һәм юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү эшендә хоҡуҡ һаҡлау органдарына ярҙам итеү күнекмәләренең формалашыуын күрһәтеүгә йүнәлтелгән ижади эш рәүешендә ойоштороло. Бынан тыш, олимпиадала ҡатнашыу һөнәри йүнәлеш биреү эшмәкәрлегендә киң мөмкинлектәр тыуҙыра, шулай уҡ йәш юл хәрәкәте инспекторҙарына уҡырға инеү өсөн өҫтәмә балл алырға мөмкинлек бирә", - тип белдерҙеләр идаралыҡта.

## ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# КОНТРАКТ БЕР ЙЫЛҒА ТӨҘӨЛӘ



**Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пунктына пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүҙе маҡсат итеп ҡуйған йәштәр күпләп килә.**

Быны "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына биргән интервьюһында пункт офицеры капитан Фәдис Солтанов баҫым яһап билдәләп үтә. Ул Махсус хәрби операция зонаһына барыу тураһында ҡарар ҡабул итеүҙең бер нисә асыҡ сәбәбен атап үтә. Капитан һүҙҙәренсә, хәҙерге йәштәр алдынғы ҡарашлы, мотивациялы һәм билдәле бер һөҙөмтәгә ынтылыусан. Шулай уҡ улар бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр һәм МХО-ла ҡатнашыусыларға дәүләт ярҙамы саралары тураһында яҡшы хәбәрҙар.

-Беренсенән, хеҙмәткә алынған яңы хәрби РФ Оборона министрлығы менән бер йылға иҫәпләнгән махсус контракт төҙөй. Тимәк, уға ошо мөҙҙәт тамамланғас, хеҙмәтте дауам итергәме, юҡмы икән, тигән уйында нығынып, ҡарар ҡабул итеү өсөн ваҡыт бирелә. Бер йыл тиҙ генә үтә лә китә бит ул.

Икенсенән, бер йыл эсендә хәрби хеҙмәткәр ярайһы ғына аҡса эшләй ала. Бер тапҡыр бирелә торған түләүҙең ҙур икәнен күптәр белә. Контрактҡа ҡул ҡуйғандан һуң, ул 1 400 000 һум аҡса ала: Башҡортостан Республикаһынан - бер миллион һум, Рәсәй Оборона министрлығынан - 400 мең һум. Бынан тыш, ҡайһы бер муниципалитеттар ҙа, ҡаланың йәки райондың иҡтисади хәленә ҡарап, бер тапҡыр бирелә торған түләү өҫтәй.

Өсөнсөнән, Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә 55 ярҙам сараһы ғәмәлдә. Әлбиттә, йәш хәрбиҙәр былар тураһында белә. Уларҙың да бит уйында киләсәктә ғаилә ҡороу, балалар тәрбиәләү, тыныс тормошта хеҙмәт юлын дауам итеү. Ғөмүмән, яугирҙар пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хеҙмәттең бөтә ыңғай яҡтарын аңлай. Улар туғандарына ярҙам итергә, йорт төҙөргә, фатир һәм автомобиль һатып алырға иҫәп тота, - ти Фәдис Солтанов.

Әлеге ваҡытта пилотһыҙ системалар операторҙарын туплау эше әүҙем бара. Хеҙмәткә 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге ир-егеттәр алына. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемге йәштәгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала.

Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә хәрби хеҙмәткә инергә теләүселәр йәшәгән урыны буйынса хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт итә ала. Шулай уҡ быны Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталында ҡалдырырға ла мөмкин.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Роспотребнадзор"ҙың Төбәк идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2 апрелгә ҡарата медицина ойошмаларына талпан ҡаҙалыуға бәйле 7 кеше мөрәжәғәт иткән. Улар араһында балалар ҙа бар. Былтыр был датаға 23 кеше талпандан зыян күргән була. Башҡортостан талпан энцефалиты буйынса эндемик төбәк һанала. Был сир буйынса 42 район хәүефлеләр исемлегенә ингән. Башлыса талпан энцефалиты һәм боррелиоз (Лайм ауырыуы) хәүеф тыуҙыра. Уларҙы йоҡтороу ауыр эҙемтәләргә, шул иҫәптән нервы системаһының, быуындарҙың һәм йөрәктең зарарланыуына килтереүе ихтимал.

✓Быйылғы яҙғы саҡырылыш ваҡытында республиканан 5,5 мең самаһы егет армияға алына. Хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларҙың күбеһе уҡыу соединениеларына һәм хәрби частарға ебәрелә. Унда улар, заманса хәрби техниканы үҙләштереп, хәрби-иҫәп һөнәрҙәре алғас, хеҙмәт итеү урынына йүнәлтелә. Саҡырылыусыларҙы йыйыу пунктынан урындарға тәүге оҙатыу 10 апрелдән планлаштырыла, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан хәрби комиссариаттынан.

✓18 апрелендә "Тоталь диктант" үтә. Ул рус телен белеү кимәлен баһаларға ярҙам итә. Акцияла ҡатнашыу өсөн рәсми сайтта, шулай уҡ төбәк мәғлүмәт порталдары һәм мәҙәниәт учреждениелары аша теркәлергә кәрәк. Диктант яҙыу атап үтелгән көндә урындағы ваҡыты менән 13:00 сәғәттә башлана. Майҙансыҡтар Өфөлә һәм республиканың башҡа ауыл-ҡалаларында ойошторола. Акцияны 2004 йылда Новосибирск дәүләт университеты студенттары башлап ебәрһә, 2025 йылда уға Рәсәйҙә һәм башҡа илдәрҙә 1,3 миллиондан ашыу кеше ҡушылған.

✓Рәсәйҙә "Тәңкә аҙналығы" башланды. Йыйылған ваҡ аҡсаны 18 апрелгә тиклем алмаштырырға мөмкин. Был юлы "Тәңкә аҙналығы" 12 көн бара. Үҙәк банк мәғлүмәттәре буйынса, унда 16 меңдән ашыу ауҙа нөктәһе һәм банктарҙың 4 мең бүлексәһе ҡатнаша. Ваҡ аҡсаларҙы ҡағыҙ аҡсаға алмаштырырға йәки үҙеңдең иҫәбеңә һалырға мөмкин. Көҙ көнө үткәрелгән акцияла Башҡортостан халҡы банктарға 756 меңдән ашыу тәңкә тапшырған, уларҙың дөйөм суммаһы - 3,5 миллион һумдан ашыу, ауырлығы 3,6 тонна булған.

✓2025 йылда республиканың "Минең бизнесым" үҙәге 11,7 мең эшҡыуарҙарға төрлө хеҙмәт күрһәткән. Улар араһында - бәләкәй һәм урта бизнес вәкилдәре, үҙмәшғүлдәр һәм үҙ эшен асырға ниәтләүселәр. Ойошма белгестәре дәүләт ярҙамы алыу, бизнес-пландар әҙерләү, финанс ярҙамы күрһәтеү, белем биреү программаларында һәм эшлекле сараларҙа ҡатнашыу мәсьәләләре буйынса 7,9 мең консультация биргән. Был хаҡта Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Светлана Верещагина хәбәр итте.

✔ Эйе, нейроселтәр - башҡорт әҙәбиәтенә ярҙам итә, ижадсыларға ижадташ була ала. Әммә нимә яҙырға, нисек яҙырға икәнен бары тик кеше үҙе генә хәл итә.



ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

# ЯҘЫУСЫНЫ АЛЫШТЫРА АЛАМЫ?



**"Киске Өфө" журналистары һорау бирә: "Яһалма интеллект, әйт әле, һуңғы ваҡытта нейроселтәр ярҙамында яңы йырҙар яңғыратыу, шиғырҙар, сәсмә әҫәрҙәр ижад итеү күренештәре йышайып китте. Был нимә, нейроселтәрҙәр хәҙер композиторҙарҙы, яҙыусыларҙы, шағирҙарҙы алыштыра аласаҡ, тигәнгә ишарамы?"**

**Яһалма интеллект яуабы:**

Хәйерле көн, ҡәҙерле уҡыусылар! Гәзиттең 12-се һанында башҡорт телен уҡытыуҙа яһалма интеллект мөмкинлектәре тураһында һөйләшкәйнек. Миңә КӨФӨ тигән исем дә таҡтығыҙ бит инде. Был юлы яһалма интеллекттың башҡорт әҙәбиәтенә ниндәй йоғонто яһай алыуы тураһында бәйән итергә булдым. Бәлки, артабан башҡа өлкәләрҙә лә нейроселтәрҙең мөмкинлектәрен асыҡларбыҙ. Эйе, нейроселтәр - башҡорт әҙәбиәтенә ярҙам итә, ижадсыларға ижадташ була ала. Әммә нимә яҙырға, нисек яҙырға икәнен бары тик кеше үҙе генә хәл итә. Был теманы ла, уҡыусылар, һеҙҙең мөрәжәғәттәр нигеҙендә билдәләнек.

**Башҡорт әҙәбиәте: нейроселтәр күҙлегенән**

Башҡорт әҙәбиәте - ул быуаттар төпкөлөнән килгән рухи хазина, башҡорт халҡының йөрәк тибеше, уның тарихы, моңо һәм аҡылы. Әммә заман үҙгәрә, технологиялар алға китә, һәм бөгөн был байлыҡты яңыса - нейроселтәр ярҙамында өйрәнеү, һаҡлау һәм танытыу мөмкинлеге бар. Билдәле булыуынса, башҡорт телендә нейроселтәр ярҙамында шиғырҙар һәм йырҙар яҙыла. Борис Ореховтың башҡорт шиғриәтенә нигеҙләгән ирекле мәғлүмәт йыйылмаһы һәм ғилми эштәре, шулай уҡ ҡайһы бер башҡорт шағирәләренең (Гүзәл Ситдиҡова, Фирүзә Абдуллина, Тамара Искәндәриә) үҙҙәренең шиғырҙарын ирекле китапханаға ҡуйыуҙары быға төплө нигеҙ булып тора. Бөгөн был авторҙарҙың әҫәрҙәре нейроселтәргә башҡорт телен, ритмын, образдарын аңларға ярҙам итә.

**Нейроселтәр нисек ярҙам итә ала?**

***1. Классик мираҫты заманса форматҡа күсереү.***

Нейроселтәр ярҙамында башҡорт классиктарының әҫәрҙәрен аудиокитаптар, интерактив, тере форматта эшләргә мөмкин. Был китап уҡыуҙы уңайлыраҡ итә, ә уҡыу мөмкинлеге сикләнгән кешеләргә, йәштәргә һәм өлкәндәргә әҙәбиәт менән танышыуҙың яңы юлдарын аса.

***2. Яңы ижадҡа этәргес.***

Яҙыусылар нейроселтәрҙе ижади ярҙамсы итеп ҡуллана ала: сюжеттар төҙөү, образдар эшләү, стилде камиллаштырыу. Был яңы башҡорт әҫәрҙәренең барлыҡҡа килеүенә ярҙам итә, телдең байлығын һәм матурлығын күрһәтә.

***3. Әҙәби мираҫты һаҡлау һәм анализлау.***

Нейроселтәр боронғо ҡулъяҙмаларҙы, шиғырҙарҙы, хикәйәләрҙе цифрлаштырырға, уларҙы тәртипкә һалырға, өйрәнергә ярҙам итә. Был тарихи әҫәрҙәрҙе юғалтыуҙан һаҡлай, ғалимдарға һәм тикшеренеүселәргә улар менән еңелерәк эш итергә мөмкинлек бирә.

***4. Башҡорт әҙәбиәтен донъяға танытыу.***

Машина тәржемәләре аша башҡортса әҫәрҙәрҙе рус, инглиз һәм башҡа телдәргә тиҙ һәм сифатлы тәржемә итергә була. Был - башҡорт авторҙарының ижадын киң аудиторияға еткереү өсөн мөһим аҙым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нейроселтәр - ябай инструмент түгел, ә рухи мираҫты киләсәк быуындарға тапшырыу өсөн күпер. Улар ярҙамында беҙ башҡорт әҙәбиәтенең матурлығын, тәрәнлеген заманса технологиялар аша күрһәтә алабыҙ. Был - телде, мәҙәниәтте үҫтереү, йәштәрҙе әҙәбиәткә йәлеп итеү, милли үҙаңды нығытыу юлындағы яңы мөмкинлек.**

**Башҡорт әҙәбиәте - ул мәңгелек. Ә нейроселтәр уның яңы биттәрен аса, уны тағы ла яҡтыраҡ, сағыуыраҡ итә. Заманса үҫеш юлынан бергәләп атлайыҡ!**

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# БУШ ВӘҒӘҘӘЛӘР МӘЛЕ ЕТӘ

**Бөгөнгө тыйыуҙар, сикләүҙәр, яза саралары менән янауҙар шарттарында граждандарҙың былай ҙа кешелек хоҡуғы тип иҫәпләнгән берәй мәсьәләне изгелек акты итеп күтәреүҙәр бик үк аңлашылып бөтмәй. Мәҫәлән...**



"Известия" гәзите (3 апрель, 2026) яҙып сығыуынса, РФ Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко, Рәсәйҙә ҡатын-ҡыҙҙарға йөклөлөктө яһалма өҙөү (аборт) процедураһын тыйыусы закон булмаясаҡ, тип хәбәр итте һәм граждандарҙың шәхси тормошона ҡағылышлы мәсьәләләрҙе сикләргә дәүләттең хоҡуғы юк, тип белдерҙе. Был йәһәттән ниндәй юлды һайлау һәм ҡарар ҡабул итеү фәҡәт ҡатын-ҡыҙҙың хоҡуғы булып ҡала. Ҡыҫҡаһы, бындай тыйыу булмаясаҡ, тип ышанам һәм ҡатын-ҡыҙҙарға борсолорға кәрәкмәй, тине Валентина Матвиенко. Унан алдараҡ, 24 мартта уҡ әле, был хаҡта ҡатын-ҡыҙҙарға Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин да һөйөнсөләгәйне. Дөрөҫ, бер яҡтан, ҡыйыу ғына белдереү кеүек күренһә лә, улар бер ниндәй ҙә яңылыҡ әйтмәне, әлбиттә. Ләкин бына граждандарҙың шәхси тормошона дәүләттең ҡыҫылырға хоҡуғы юҡ, тип айырым-асыҡ ҡына өҙөп әйтеүсе юғары ранг чиновнигын да беҙгә көн дә ишетергә тура килмәй бит.

Эйе, һуңғы ваҡытта илдә тыуымды арттырыу маҡсатында аборттарҙы тыйыу хаҡында әүҙем һүҙ ҡуҙғатыла башлағайны. Әйтерһең дә, был берҙән-бер "дөрөҫ" юл! Был бигерәк тә 2023 йылдың декабрендә Нижегород өлкәһенең закондар сығарыу йыйылышы тарафынан бөтөн Рәсәй буйынса шәхси клиникаларҙа йөклөлөктө өҙөү процедураһын тыйыу хаҡындағы закон проектын Дәүләт Думаһына индергәндән һуң, шулай уҡ Мәскәү һәм бөтөн Русь патриархы Кириллдың аборттарҙы сикләү буйынса башланғысынан һуң көсәйеп киткәйне. Был башланғыс авторҙары үҙҙәренсә ошо тыйыу сараһының демография проблемаһын ниндәйҙер кимәлдә хәл итеренә ысын күңелдән ышана инеләр, буғай. Ә беҙҙекеләргә ней, имеш кенә булһын! Ошондай уйлап еткерелмәгән белдереүҙәрҙән һуң Рәсәйҙең 329 шәхси клиникаһында бындай процедура үткәреүгә лицензиянан баш тарттылар. Йәмғеһе илдең 89 төбәге патриархтың тәҡдимен яҡлап та сыҡты хатта. Был йәһәттән сиркәүҙең дәүләттән айырымланыуы һәм уның эштәренә ҡыҫылмау тураһындағы положение берәүҙе лә ҡыҙыҡһындырманы.

Хәйер, сиркәү ҙә йәмғиәт проблемаларына битараф ҡала алмайҙыр, уныһы хаҡ. Ләкин шул уҡ ваҡытта абортты махсус медицина страховкаһы системаһынан сығарыуҙың сетерекле тема булыуы һәм уның йәмғиәттә ризаһыҙлыҡ тыуҙырырға тейеш түгеллеге, шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ хоҡуғын сикләүгә юл ҡуймау хаҡында һөйләүсе Рәсәй Президенты Владимир Путиндың фекере, нишләптер, баяғы дәррәү башланғыстар шауҡымында юғалыбыраҡ ҡалды. Илдә тыуымды арттырыу хаҡында иһә Президент үҙенең эшлекле фекерен белдергәйне: "Аборттар проблемаһы - киҫкен мәсьәлә,- тигәйне ул.- Һорау тыуа: бының менән ни эшләргә? Йөклөлөктө өҙөүсе препараттарҙы тыйырғамы? Әллә илдә социаль-иҡтисади хәлде яҡшыртырға, көнкүреш кимәлен күтәрергә, яҡшы эш хаҡтары, социаль хеҙмәтләндереү булдырырға һәм йәш ғаиләләргә торлаҡ алыуҙа ярҙам итергәме?" - тип, Президент тыуымды арттырыу йүнәлештәренең күп төрлө булыуына иғтибарҙы йүнәлткәйне.

Былтыр Башҡортостан депутаттары ла Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге ошо тыйыу тәжрибәһенә эйәрә биреп ҡуйһа ла, сиктән сиккә сыҡманы. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев был мәсьәләгә ентекле анализлап ҡарауҙы талап итте, демографияны яҡшыртыуҙың ғаиләләргә ярҙамды көсәйтеүгә бәйле булыуын билдәләне. Эш тыйыу һалыуҙа түгел, ә йөклө ҡатындарға һәм балалы ғаиләләргә комплекслы ярҙам системаһын булдырыуҙа, тине спикер.

Әйткәндәй, әлеге көндә йөклө ҡатындарға аборт эшләтергә тәҡдим иткән йәки уларҙы мәжбүрләгән йәки ҡурҡытҡан өсөн аҡсалата штраф язаһы ҡаралған. Ә инде онотолоп барған аборт темаһын яңыртып, уны, бая әйтелгәнсә, ниндәйҙер изгелек акты итеп күрһәтергә тырышыуҙың сере ни

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Ҡырмыҫҡалы районының Аксаков (Ҡыйышҡы) күлендә балыҡтар ҡырылған. Ошо көндәрҙә урындағы халыҡ күңелһеҙ күренешкә тап булған һәм Башҡортостандың Экология министрлығына хәбәр иткән. Ведомство белгестәре килеп, тикшереү үткәргән. Ләкин балыҡтарҙың үлеменә сәбәпсе булырҙай бысратыу сығанаҡтарын тапмаған. Урында күлдең бысраныу кимәлен билдәләү өсөн һыу өлгөһөн анализға алғандар. Лабораторияла тикшергәндән һуң ғына аныҡ һығымта яһарға мөмкин буласаҡ.

✔ МХО яугирҙары өсөн селтәр үргән, гуманитар ярҙам йыйған һәм окоп шәмдәре эшләгән ирекмәндәр республика етәксеһенең "Башҡортостан Республикаһы ирекмәне" почет билдәһен алыу мөмкинлегенә эйә. Ғаризалар 1 июнгә тиклем ҡабул ителә. Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте министры Вито Сабиров һүҙҙәренсә, был билдәне алыу өсөн республика биләмәһендә бер йылдан ашыу ирекмәнлек эше алып барыу һәм добро.рф порталында верификацияланған ирекмәнлек сәғәте булыуы мөһим. Һорауҙар менән Башҡортостандың Добро.рф ресурс үҙәге белгесе Анастасия Грибковаға 7 (937) 321-43-20 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә була.

✔ Рәсәй Пенсия фондының республика буйынса бүлексәһе Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына Еңеү көнө уңайынан 10-ар мең һум пособие күсерә башланы, тип хәбәр итә ведомствоның матбуғат хеҙмәте. Ул аҡсаны быйыл республикала 68 ветеран алырға тейеш. Аҡса апрель айында банк иҫәбенә йәки почта бүлексәләре аша пенсия менән бергә күсә. Бер ниндәй ҙә ғариза яҙырға кәрәкмәй - түләүҙәр автоматик рәүештә тәғәйенләнә. Берҙәм бәйләнеш үҙәге телефоны буйынса консультация алырға мөмкин: 8-800-100-00-01 (шылтыратыу бушлай).

✔ Башҡортостандың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Азат Асҡаров Мәскәүҙә эшләйәсәк. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе. "Азат Әфхәт улы икенсе ҡалаға күсенә һәм яңы вазифала эш башлай. Һеҙгә 19 йыл дәүләт хеҙмәтендә һөҙөмтәле, яуаплы эшләгән өсөн рәхмәт белдерәбеҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе һәм уны Башҡортостан Республикаһының "Хеҙмәт ҡаһарманлығы өсөн" миҙалы менән бүләкләне.

✔ МХО ветераны Айҙар Шәйәхмәтов Башҡортостан Хөкүмәтенең МХО ветерандарына һәм ҡатнашыусыларына һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү мәсьәләләре буйынса департаменты етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Был турала республика Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Айҙар Шәйәхмәтов күптән түгел генә фронттан ҡайтты. Алғы һыҙыҡта ул "Шаман" позывнойы менән Миңлеғәле Шайморатов исемендәге батальондың хәрби-сәйәси эштәр буйынса рота командиры урынбаҫары булып хеҙмәт итте.

✓ *Дәүләт Думаһына һайлау алды ығы-зығыһы башланды. Күберәк тауыш йыйыу өсөн быйыл ниндәй шаҡ ҡатырғыс һүҙ әйтергә, нимәләр вәғәҙә итергә? Ниндәй тема өҫтөнлөк итер, тип баш вата бөгөн сәйәсмән һәм политтехнологтар.*



бары шунда: илдә 20 сентябрҙә буласаҡ Дәүләт Думаһына һайлау алды ығы-зығыһы башланды. Теге йәки был партия файҙаһына күберәк тауыш йыйыу өсөн быйыл ниндәй шаҡ ҡатырғыс һүҙ әйтергә, нимәләр вәғәҙә итергә? Ниндәй тема өҫтөнлөк итер, тип баш вата бөгөн сәйәсмән һәм политтехнологтар. Хәҙер көн дә берәй яңылыҡ, йәғни вәғәҙә көтөргә ҡала, ә инде был вәғәҙәнең артабан, һайлауҙарҙан һуң буш ҡыуыҡҡа әүерeләсәге депутатлыҡҡа дәғүәселәр намыҫын да, фракцияларҙы ла борсомай.

Әмәлгә ҡалғандай, интернет киңлектәрендә әле шундай хәбәр таралды: депутаттар пенсия йәшенең элекке тәртибен ҡайтарырға йыйына, имеш: ҡатындарға пенсия - 55, ирҙәргә 60 йәштән. Әгәр был закон проекты ҡабул ителә ҡалһа, йәнәһе лә, ул ошо йылдың 1 июленән көсөнә инмәксе, тиҙәр. Был шулай уҡ туранан-тура демография, ғүмер оҙайлығы мәсьәләһенә ҡағылһа ла, илдәге бөгөнгө ҡатмарлы сәйәси, социаль-иҡтисади шарттарҙа бындай закондың ҡабул ителеүе икеле һәм маҡсатҡа ярашлы түгел икәнлекте белә-күрә шундай сиккә барып һуғылырға, халыҡ иғтибарын буш вәғәҙәләр менән төп проблемаларҙан ситкә борорға маташа власҡа, йылы-йомшаҡ ҡәнәфиҙәргә ынтылыусылар. Хатта Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин әфәнде лә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр тарифтарының үҫә барыуына юлды ябырға һәм мәсьәләне контролгә алырға вәғәҙәләй. Хаҡтарҙың көнләп түгел, сәғәтләп үҫкән мәлдәрендә реаль вәғәҙәме был? Уныһын яҡын киләсәк күрһәтер. Ә бына бөтөн халыҡ мәнфәғәтенә, уның йәшәйеш сифатына, шул иҫәптән, иҡтисад менән бизнес өлкәһенә лә ҡағылышлы реаль проблема - интернет киңлектәрен сикләп, коммуникация каналдарына массовый бик һалыу һәм уның киләһе һайлауҙар барышына йоғонтоһо хаҡында властарға ишетелерлек кимәлдә һүҙ ҡуҙғатыусы депутаттар ҙа, партиялар ҙа әлегә юҡ иҫәбендә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ДИКТАНТ ЯҘАБЫҘ!

**Быйыл Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант 17 апрелдә уҙа. Һәр ваҡыттағыса, акция онлайн һәм офлайн уҙғарыла, тип хәбәр итте ойоштороусылар.**

Диктант БСТ, "Тамыр" телеканалдарында, "Ашҡаҙар" радиоһында, шулай уҡ рәсми сайтта һәм ойоштороусыларҙың социаль селтәрҙәрендә Өфө ваҡыты буйынса иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана. Һәр ҡатнашыусы диктантты өйҙә лә яҙа ала. Эштәрҙе 2026 йылдың 17 апрелендә төнгө бер минуттан 12 тулғансы акцияның рәсми сайты йәки чат-бот аша тапшырырға кәрәк.

Офлайн-форматта ҡатнашыу өсөн акцияның рәсми сайтындағы "Майҙансыҡтар" бүлегендә майҙансыҡ һайлау һәм алдан теркәлеү мөһим. Акция көнөндә ҡатнашыусылар диктантты үҙҙәре һайлаған майҙансыҡта яҙа. Онлайн-форматта ҡатнашыу өсөн акцияның рәсми сайтын (https://bashdictant.ru/) йәки МАКС мессенджерында @bash_dictant_bot чат-ботын файҙаланырға кәрәк.

Быйыл диктант тексы Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылына, Башҡортостанда Ҙур һәм татыу ғаилә йылына, шулай уҡ башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе Ғәли Соҡоройҙоң 200 йыллығына арналған.

# АҒЫУЛЫ ҮҪЕМЛЕКТӘР

**Башҡортостанда хәүефле инвазив үҫемлектәр исемлеге төҙөлдө. Бойороҡҡа экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министры Нияз Фазылов ҡул ҡуйҙы.**

Билдәле булыуынса, исемлектә сәнскеле эхиноцистис, Канада элодеяһы, тилермән япраҡлы циклахена, Сосновский балтырғаны, яллы арпа һәм башҡалар бар. Бойороҡта әйтелгәнсә, республиканың махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә ошо үҫемлектәр асыҡланып, юҡ ителергә тейеш.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев инвазив үҫемлектәрҙең әүҙем таралыуы хаҡында һөйләгәйне. Ә ҡайһы бер төрҙәре, мәҫәлән, Сосновский балтырғаны, кеше өсөн дә хәүефле. Шуға күрә Экология кодексына һәм Башҡортостандың махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре тураһында законға үҙгәрештәр индерелде.

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# БЕР АЯҒЫ - АЙҘА...

## икенсеһе - харабала

**Прогрессив кешелек донъяһы, Израиль менән уның ҡотҡоһона бирелгән АҠШ президенты хакимиәтенең, һүҙ ҡуйышып, күҙ алдында Иранға ҡаршы енәйәти-террористик һуғыш алып барыуына ҡәтғи протест белдерә һәм күпләп митингыларға, демонстрацияларға сыға.**

4 апрель һуғышҡа ҡаршы һәм ҡоралһыҙланыу өсөн ошондай ҙур сығыштар Германияның эре ҡалалары Берлин, Мюнхен, Кельн, Лейпциг, шулай уҡ Штутгарт, Фрайбург, Мангеймда булып үтте. Унда ҡатнашыусыларҙың ҡулдарында Иран, Куба һәм Палестина флагтары елберҙәй. Иранға ҡаршы һуғышҡа Израиль халҡы ла күптән ризаһыҙлыҡ белдерә. Ошо уҡ көндө - 4 апрель Тель-Авивта ла йөҙәрләгән кеше митингыға сыҡты, тип хәбәр итте яңылыҡ агентлыҡтары. Протест белдереүселәр Израиль хөкүмәте сәйәсәтенә ҡаршы лозунгылар, плакаттар тотоп сыҡҡан, улар кисекмәҫтән Иранда, Ливанда һәм Газала барған хәрби операцияларҙы туҡтатыуҙы талап итә. Израиль полицияһы менән демонстранттар араһында бәрелеш башланған. Йыйылған халыҡҡа ҡарата көс ҡулланыу юлы менән уларҙы таратырға маташҡандар. Тиҫтәләгән кеше ҡулға алынған, тип хәбәр итә Яңылыҡтар мәғлүмәт агентлығы.

Бынан алдараҡ Вашингтонда ла АҠШ президенты Дональд Трамптың отставкаға китеүен һәм ҡалаларҙан иммиграция полицияһын сығарыуҙы талап итеп, зур марш булып үткәйне. Ғөмүмән, АҠШ-та No Kings тигән дөйөм лозунг аҫтына берләшкән демонстранттар һаны 7 миллионға барып баҫты, тип хәбәр итә маршты ойоштороусылар. Улар Трамп сәйәсәтенә ҡаршы протест белдерә. Трамп иһә был массовый протест сығыштарын финанслауҙа бизнесмен Джордж Соросты ғәйепләй.

Евросоюз илдәре халҡы ла Иран фажиғәһен битараф күҙәтеп ятмай: Парижда, Венала, Лондонда, Лиссабонда, Майндағы Франкфуртта күп һанлы халыҡ ҡатнашлығында митингылар булып үтте. Ләкин халыҡ сығыштарын Трамп ҡолағына ла элмәй, Ирандан Ормуз боғаҙын асыуҙы талап итеп ҡырталаша, "юғиһә, Тегеран тамуҡта йәшәйәсәк; ике-өс аҙна эсендә Иранды беҙ таш быуат осорона ташлаясаҡбыҙ", тип янай һәм, әгәр Тегеран килешеүгә бармаһа, Ислам Республикаһының энергетика объекттарын, күперҙәрҙе утҡа тотасаҡтарын белдерә. Донъя йәмәғәтселегe Трамптың бындай аҡылһыҙ, ҡанһыҙ, законһыҙ белдереүенән шаҡ ҡата.

Иран ғәскәрҙәренең үҙәк штаб командующийы Али Абдоллахи Трамптың янауҙарына яуап ғәмәле вәғәҙәләй.

Британия аналитиктары фекеренсә, АҠШ тарафынан Ирандың тотороҡло дәүләт машинаһы баһалап еткерелмәне, шунлыҡтан хәҙер ресурс пландарын ҡайтанан иҫәпләү талап ителә. Һәм Трамп, ысынлап та, Иранға ҡаршы оперция өсөн конгрестан өҫтәмә рәүештә 200 млрд доллар теләнселәргә мәжбүр булды, шул уҡ ваҡытта ул АҠШ-тың яңы оборона бюджетын хуплатыуға өлгәшеү өсөн тырышасаҡ. Ул саҡта Аҡ йорт теләге буйынса хәҙер былай ҙа триллионлы гигант бюджет суммаһы тағы ла 40 процентҡа - 1,5 триллион долларға тиклем үҫәсәк. Был иһә Икенсе донъя һуғышынан алып идара иткән бөтөн Америка президенттарының бөтөн хәрби сығымдарынан да артып китәсәк.

Бер аяғы менән Айҙа торған цивилизация империяһы, шулай итеп, икенсе аяғы менән үҙе тарафынан емереклеккә әйләндерелгән харабалар өҫтөнә баҫҡан килеш күҙ алдына килә. Икенсенән, Трамп үҙ командаһындағы яңы милитаризация йүнәлешендә икеләнеү белдереүсе иң яҡын ярҙамсыларынан арына башланы. Улар иҫәбендә эске хәүефһеҙлек министры Кристи Ноэм, генпрокурор Пэм Бонди, милли разведка башлығы Тулси Габбард һәм... Трамптың үҙенең уң ҡулы - вице-президент Джей Ди Вэнс.

"Известия" гәзитенең онлайн каналы Украиналағы Махсус хәрби операция хәрбиҙәренең яңы табышы хаҡында яҙып сыҡты. "Көньяҡ" ғәскәр төркөмө казактар бригадаһының 6-сы зенит-ракета батареяһы яугирҙары FPV операторҙары өсөн төндә күреүсе күҙлектең яңы вариантын уйлап сығарған һәм уны ялан шарттарында икенсе дрондан алынған тепловизор камераһынан ҡулдан йыйған. Көндөҙ ҙә, төндә лә бик асыҡ күрһәтеүсе был күҙлекте бер нисә минут эсендә тиҙ генә йыйырға була. Ялан шарттарында Рәсәй саперҙары уйлап сығарған икенсе яңылыҡ - минаны алыҫ арала тороп хәүефһеҙләндерә торған ҡорамал. Уның ярҙамында һауа шарттарына һәм тәүлек ваҡытына ҡарамайынса, дронға беркетелгән ҡулайламаны туп-тура минаның өҫтөнә төшөрөргә була. Был ваҡытта Белгород өлкәһенең сик буйы райондарында дрондарға ҡаршы үткәүел (коридор) урынлаштырыу башланды, тип хәбәр итә төбәк етәксеһе Вячеслав Гладков. Донбаста һынау үткән был тәжрибә хәҙер Шебекино, Борисовка, Грайворонский округтарында ла ҡулланыласаҡ һәм өлкәнең тыныс граждандарын пилотһыҙ шартлатҡыс аппараттарҙан ышаныслы һаҡлау сараһы буласаҡ.

Хәрби журналист Поддубный билдәләүенсә, Украина менән сиктәш райондарҙа хәл бик ҡатмарлы - дошман дрондары көн һайын тиҫтәләгән кешенең ғүмерен өҙә һәм яралай. Был райондарға аҙыҡ-түлек һәм башҡа тәү кәрәк әйберҙәр ташыу өсөн фәҡәт бронялы техника менән генә йөрөү мөмкин.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө мэрияһында уҙған оператив кәңәшмәлә 16-сы гимназияла үҫмер уйынсыҡ автомат менән класташтарына һөжүм иткәндән һуң ғәҙәттән тыш хәл урынына беренсе булып килеп еткән Росгвардия хеҙмәткәрҙәре бүләкләнде. Мэр Ратмир Мәүлиев полиция старшинаһы, 1-се полиция батальоны водителе Дмитрий Агибаловҡа һәм полиция кесе сержанты, Росгвардия идаралығы 1-се полиция батальонының өлкән полицейскийы Никита Толстыхҡа ҡала хакимиәтенең рәхмәт хаттарын тапшырҙы.

✓Уҙған аҙнала Өфө хакимиәтенә граждандарҙан 1105 мөрәжәғәт килгән. Киң мәғлүмәт саралары менән бәйләнеш буйынса вице-мэр Дмитрий Черенков әйтеүенсә, улар күпселек осраҡта юлдарҙың торошо, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм ҡала транспорты эше менән бәйле. Өфөләрҙә юлдарҙың торошо, йәмәғәт урындарын, ихаталарҙы һәм юлдарҙы сүп-сарҙан һәм ҡарҙан таҙартыу, шулай уҡ фатирҙарҙы йылытыу мәсьәләһе ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра.

✓Өфөлә "Йортҡа юл" квартал-ара юлдарҙы ремонтлау буйынса яңы программа эшләй башланы. Ул бер нисә йылға иҫәпләнгән. Быйыл программа сиктәрендә бөтә ҡала буйынса 80-дән ашыу участканы ремонтлау планлаштырыла. "Был программа - ҡала инфраструктураһын комплекслы үҫтереү буйынса эшебеҙҙең бер өлөшө. Уның маҡсаты - халыҡ өсөн уңайлы шарттар булдырыу", - ти ҡала хакимәте башлығы Ратмир Мәүлиев.

✓Өфөлә ҡар ирегәс тә башланған юлдарҙы тәртипкә килтереү дауам итә. Ремонт эштәре көн һайын ҡаланың бөтә райондарында ла алып барыла. Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, март башынан урамдарға 1847 тонна асфальт һалынған һәм 12 525 квадрат метр юл япмаһы ямалған.

✓Өфө ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ремонт эштәренә бәйле 11 апрелдән "Дачник" магазинынан (Дим урамы, 43) Өфөнән сыҡҡанда ҡуйылған стелаға тиклем автотранспорт хәрәкәте өлөшләтә сикләнә. Уңайһыҙлыҡтарҙы кәметеү өсөн юл япмаһын фрезерлау ике сменала үткәрелә: 10.00 - 17.00 сәғәттәрҙә һәм 21.00 - 07.00 сәғәттәрҙә.

✓Өфөлә төбәк әһәмиәтендәге "1940 йылдар аҙағы - 1950 йылдар башындағы төҙөлөш ансамбле" мәҙәни мираҫ объектын һаҡлау зоналарының сиктәрен раҫлау планлаштырыла. Был хаҡта БР Хөкүмәте ҡарары проекты республиканың рәсми порталында баҫылған. Мәҙәни мираҫ объекты Карл Маркс урамы, 71 адресы буйынса урынлашҡан. Документ ошо зоналар биләмәһе сиктәрендә ерҙәрҙе файҙаланыу режимын һәм ҡала төҙөлөшө регламенттарына талаптарҙы раҫлай.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Беҙ ата-әсәләр һәм балалар күңелендә өмөт саткылары уятырға һәм үҙебеҙҙең эшебеҙ менән ғаиләлә булған социаль көсөргәнеште бөтөрөргә, психологик атмосфераны ыңғай яҡҡа үҙгәртергә тырышабыҙ.*



*ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ*



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Сәскә һеркәһе һәм һитә

Һеркәнең һәм һитәнең ғәжәп үҙенсәлектәренә солоҡсолар, бал ҡортон бағыусылар элек-электән иғтибар иткән һәм шифаһын белгән. Бал ҡортоноң ошо биологик йәһәттән йоғонтоло тәғәме менән туҡланғандар ҙа, дауаланғандар ҙа. Ул хәл керткән, көс-ҡеүәтте тергеҙгән, тән ағзаларын сәләмәтләндергән, дәрт-дарман өҫтәгән. Һеркә, һитә ябыҡҡанда, тәнгә аҡһым етмәгәндә бик тә килешле им-ризыҡ. Ашау теләге асыла, ашҡа барым арта, эске секреция биҙҙәренең эше яҡшыра. Әүҙемлек, эшмәкәрлек көсәйә, көсөргәнешлек, арыу кәмей, һауа торошо үҙгәрештәре еңелерәк кисерелә.

Беҙҙең заманда һеркәнән, һитәнән әҙерләнгән препараттар медицинала уңышлы ҡулланыла. Тәжрибә күрһәтеүенсә, улар яраларҙың уңалыуын тиҙләтә, шешеүҙе кәметә, организмдың һаҡланыу ҡеүәһен, йоғошло ауырыуҙарға бирешмәүсәнлеген көсәйтә. Һитә баш һөйәктәре йәрәхәтләнгәндә, инсульт кисергәндә мейелә ҡан әйләнешен һәйбәтләндерә, микрофлораны тергеҙә, простата биҙе аденомаһын имләүгә, ирлек ҡеүәһен арттырыуға килешә, ауырлы ҡатындарҙың һаулығына, ҡарындағы бала үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Аҙ ҡанлылыҡтан (анемия) дауаланғанда микроэлементтарға бай һитә аҡ һәм ҡыҙыл ҡан күҙәнәктәрен, гемоглобинды йәһәт ишәйтә, ҡандың липидтар составын нормалләштерә. Бал ҡортоноң был тәғәме анемияға, тамырҙар склерозына ҡаршы бик тә тәьҫирле һәм һаулыҡҡа зарары юҡ тәбиғи сара иҫәпләнә.

Ғөмүмән, һитә (манса) түбәндәге сирҙәргә шифа булараҡ тәҡдим ителә: йөрәк етешмәүсәнлеге, инфаркт, инсульт, анемия, мейенең ҡан әйләнеше боҙолоу, аҡылға еңеләйеү, хәтерҙән яҙыу, әҫбе ҡалҡыу (аллергия), сабыртма сығып ҡысытыу (нейродермит), экзема, псориаз, һыулы күпертмә ҡалҡыу (герпес), бауыр шешеү (гепатит), йыуан эсәк тиресәһе шешеү (колит), бөйән эсәгенең һәм ашҡаҙандың сей яраһы, гинекология ауырыуҙары, рахит, невроз, эскелек, наркомания... Тибет медицинаһы буйынса ла һеркә, һитә әлеге ауырыуҙарға дауа. Айырыуса мейе эшмәкәрлеген, ҡан баҫымын, нервы системаһын тергеҙеүе әһәмиәтле.

Табиптар һеркәне вә һитәне (мансаны) туйынырҙан ярты сәғәт самаһы элек көнөнә ике-өс мәртәбә яртышар балғалаҡ ҡабул итергә тәҡдим итә. Балаларға иһә кәмерәк, йәғни балғалаҡтың өстән бер-дүрттән бер өлөшө. Һеркәне балға ҡушып бер балғалаҡ ашарға мөмкин. Дауалау курстары - өс-алты аҙна. Тибет медицинаһы буйынса көнөнә һеркәнең ярҙам итеү дозаһы - 20, дауалау дозаһы - 32 грамм. Балалар өсөн өс йәштән биш йәшкә тиклем - 12, алтынан ун ике йәшкәсә - 16, ун ике йәштән - 20 грамм. Дауалау ваҡыты - утыҙ-ҡырҡ биш көн. Профилактика өсөн миҡдар иртән тулыһынса, дауалау миҡдары өс тапҡыр, һуңғыһы йоҡлар алдынан бирелә. Һеркәне башта баллы йылы һыуға һалып болғайҙар һәм бөртөксәләр бүртенгәнсе төнәтәләр. Һитәне (мансаны) балға ҡушып та ҡулланалар. Төрлө витаминдар, препараттар етештергәндә һеркәне һәм һитәне сеймал итеп файҙаланалар.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы. Башы 1-13-сө һандарҙа).**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# УЛАРҒА ЛА УҠЫУ ТЕЙЕШ

**Физик яҡтан ниндәй генә кәмселектәре булмаһын, һәр бала белем алырға лайыҡлы. Республиканың Мөмкинлектәре сикле балаларға дистанцион белем биреү мәктәбе тап шундай үҙенсәлекле балаларҙың хоҡуғын тормошҡа ашыра ла инде. Һәм беҙ ошо учреждениеның директоры, кескәй сағынан уҡытыусы булыу хыялы менән янған һәм бына инде 27 йыл ғүмерен педагогия эшенә бағышлаған шәхес - Фәнил Йәмил улы НУРЕЕВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



**➔ Эйе, ҡыҙғаныска ҡаршы, был фани донъяла сәләмәтлеге сикләнгән балалар күп, кемдер тыумыштан, кемдер төрлө хәлдәргә осрап зәғиф булып ҡала. Ә һеҙ ниндәй уҡыусылар менән эшләйһегеҙ?**

- Был йәһәттән беҙ универсаль мәктәп тип әйтергә мөмкин. Беҙҙә әлеге ваҡытта 554 бала уҡый. Үҙәк 2010 йылда ул ваҡыттағы Рәсәй Президенты Д.А. Медведев бойороғо менән бөтөн Рәсәйҙә асылған үҙәктәрҙең береһе. Улар һәр бер төбәктә, төрлө форматта ойошторолған. Тап беҙҙең республикала һайланған формат ҡатмарлы, әлбиттә, әммә балалар өсөн иң уңайлыһы: балалар өйҙә дистанцион рәүештә лә, үҙәккә килеп тә уҡый ала.

Уҡыусыларҙы беренсе кластан алып, ун икенсе класҡа ҡәҙәр уҡытабыҙ. Үҙәктәр иң тәү сиратта интеллекты теүәл, әммә йөрөү һәләттәре сикле, йәки хәрәкәт-таяныу (опорно-двигательный) аппараттары зыян күргән балалар өсөн тәғәйенләнгән. Балалар беҙгә, медик комиссия үтеп, дистанцион форматта һәм өйҙә уҡый ала тигән документ менән һәм ПМПК (Психолого-медико-педагогик комиссия) үткәндән һуң, уҡыу өсөн ҡаршылыҡтар юҡ, тигән ҡағыҙ менән килә. Тик беҙ тулыһынса күреү йәки ишетеү һәләттәрен юғалтҡан балаларҙы уҡытыуға махсуслашмағанбыҙ, әммә аҙ күргән һәм насар ишеткәндәрҙе ҡабул итәбеҙ.

**➔ Дистанцион белем биреү үҙәгенең структураһы хаҡында ла әйтеп китһәгеҙ ине...**

- Беҙҙең төп учреждениеның юридик адресы Өфөлә, унан башҡа тағы ла алты бүлексәбеҙ бар, улар Сибай, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Нефтекама, Белорет ҡалаларында һәм Мәсәғүттә урынлашҡан. Һәр бүлексәлә кәрәк саҡта балаларҙы алып килеп, алып ҡайтып тороусы транспорт бар, әммә, әлбиттә, уларҙың күбеһе өйҙән уҡый.

Кластарға килгәндә, әлеге ваҡытта беҙҙә бер балаға бер уҡытыусы ҡаралған. Алдағы көндәрҙә был системаны үҙгәртергә планлаштырабыҙ. Эскперимент форматында икешәр-өсәр баланан торған төркөмдәр булдырып, уҡытып ҡарағайныҡ. Ә беренсе сентябрҙан алып бөтәһе лә шулай шөғөлләнә башлаясаҡ: ике, өс, дүрт, биш баланан торған төркөмдәр бер үк ваҡытта уҡытыусы менән бәйләнешкә сығасаҡ. Ҙурыраҡ төркөмдәр йыйыу өсөн, бер яҡтан, техник мөмкинлектәр әҙерәк, икенсенән, нозология буйынса балалар һаны күп булырға тейеш түгел. Класта бөтәһенә лә бер тигеҙ иғтибар бүлеп, аралашып өлгөрөр өсөн дә төркөмдәрҙең ҙур булмауын оптималь вариант тип таптыҡ. Биш уҡыусынан торған төркөмдәрҙә балаларҙың интеллект кимәле йөҙ процент булыуы мотлаҡ, ҡайһы бер эштәрҙе үҙаллы ла эшләй белергә тейештәр. Бындай үҙгәрештәрҙең яҡшы яғы - ул балаларҙың социалләшеүе. Улар берберене менән аралаша, сағыштырып ҡарай һәм ярыша ала.

**➔ Йәмғеһе ете бүлексәгеҙ барлығы хаҡында әйтеп киттегеҙ, уларҙа педагогик коллектив нисек ойошторолған? Һеҙ балаларға стандарт буйынса белем бирергә тейешһегеҙҙер бит?**

- Беҙҙең уҡытыусыларҙың эшендә бик тә мөһим бер аспект бар - ул үҙҙәренә лә, балаларға ла көн һайын алға барыу, үҙгәреш өсөн мотивация табыу.

Стандарт буйынса беҙ белемде егерме бер сәғәт бирергә тейешбеҙ. Әммә уҡыусыларҙың һаулыҡ тороşo арҡаһында теләгән хәлдә лә ул тиклем сәғәтте тулыһынса уҡытып бөтөп булмай. Мөмкинлектәре сикле баланы егерме бер сәғәт буйы компьютер артында ултыртыу мөмкин түгел. Дәрес оҙайлығы беҙҙә 40 минутҡа тиклем. Ябай мәктәп уҡытыусыһы менән сағыштырғанда, беҙҙең уҡытыусы компьютер мөмкинлектәрен мөмкин тиклем тулы ҡулланып, дәресте матур итеп аңлата белергә тейеш. Онлайн формат видеоматериалдарҙы, эксперименттарҙы күрһәтеү, төрлө тренажерҙар ҡулланыу өсөн бик уңайлы. Электрон таҡта кеүек, эште еңеләйтеүсе программалар бар, уларҙа уҡытыусы үҙе генә дәрес аңлата йәки уҡыусы менән бер ваҡытта эшләй ала. Әйткәндәй, беҙ әле "Учитель дистанционного образования" тигән конкурс үткәрәбеҙ. Был конкурста ҡатнашыусыларға "Интерактив элемент" тип исемләнгән эш йөкмәтелә. Уҡытыусы төрлө ресурстарҙа, мәҫәлән, уйын формаһында булған интерактив элементлы йөкләмәләр менән эшләй белергә тейеш. Был тәү ҡарашҡа ҡатмарлы күренһә лә, ошондай технологияларҙы бер тапҡыр өйрәнеп алһаң, аҙаҡ файҙаһы бик ҙур була.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, беҙҙәге һәр уҡытыусының ҡәҙимге дәресе - ул асыҡ дәрес. Ябай мәктәптә ата-әсәләр менән педагогтар йыйылыштарҙа ғына осрашһа, өйҙә уҡыған баланың ата-әсәһе һәр дәрестә уҡытыусы менән бәйләнештә була бит инде.

**➔ Технология, физкультура, музыка, рәсем кеүек махсус предметтарҙы уҡытыу эше нисек бара? Мөмкинлектәре нисек кенә сикле булмаһын, балаларҙың төрлө һәләттәре була. Һеҙҙең үҙәктә быға ниндәй иғтибар бүленә?**

- Беҙҙә аҡыл үҫеше йәки психик йәһәттән бер ни тиклем тотҡарлыҡтары булған балалар уҡый, улар өсөн технология дәрестәре үҙәк момент булып тора. Беҙ балаларҙы өй шарттарында шөғөлләнеү мөмкинлеге биргән пластилин, картон, ҡағыҙ кеүек материалдар менән эшләргә, ваҡ маториканы үҫтерергә ярҙам иткән сигеү, бәйләү кеүек һөнәрҙәргә өйрәтәбеҙ.

Унан башҡа, әлеге ваҡытта бинала ремонт эштәре барыу сәбәпле тотҡарланып торһа ла, беҙҙең Дыуан бүлексәһендә "Рубиновый луч" тигән бик шәп проектыбыҙ бар. Балалар компьютерҙа проект эшләйҙәр, шул проект буйынса технология уҡытыусыһы лазер ярҙамында фанеранан деталдар ҡырҡып бирә, аҙаҡ бергәләп йыялар. Бындай дәрестәр аҡылы теүәл булғандарға компьютерҙа проект төҙөргә өйрәтеүе, был этап ҡыйыныраҡ бирелгәндәрҙең йышыу, буяу кеүек ҡул эштәре менән була алыуы, йәғни командалы эш алып барылыуы менән ҡыҙыҡ.

Шулай уҡ һәр бер бүлексә 3D принтерҙар менән йыһазландырылған. Был йүнәлештә балаларҙа ҡыҙыҡһыныу уятыу, ниндәй мөмкинлектәр асылғанын күрһәтеү өсөн төрлө конкурстар үткәреп торабыҙ. 3D-моделләү конкурсы өсөн беҙҙең Нефтекама бүлексәһе яуаплы. Ул һәр йыл һайын йыл исеменә атап үткәрелә. Конкурсанттар моделдар эшләп ебәрә, ярыш аҙағында финалға үткәндәрҙең эштәрен яҡлауға саҡырабыҙ.

Балаларҙың талантлыларын эҙләп, табып, күрһәтеү мөмкинлеген биргән махсус "Абилимпикс" чемпионаты бар. Был конкурста балалар ниндәйҙер бер стандарт шарттар һәм талаптар буйынса ярышалар. Йүнәлештәре төрлө, хатта "Нейроселтәрле киләсәк архитекторы" тигән яһалма интеллект эшенә ҡайтып ҡалғаны бар. Беҙҙең Старлетамаҡ бүлексәһендә белем алған бер егет был йүнәлештә еңеүсе булды. Былтыр беҙ республиканан иң күп заявкалар биреүселәр рәтендә инек һәм һөҙөмтәлә 13 призлы урын яуланы уҡыусыларыбыҙ.

**➔ Ысынлап та, шундай ауыр ситуацияға дусар булған балаларға яңы мөмкинлектәр асыу бик сауаплы эш, тиһәң дә булалыр? Эшегеҙҙән ҡәнәғәтләнеү тойғоho бармы, бындай бик тә ауыр вазифаны йөкләүегеҙгә үкенмәйһегеҙме?**

- Әлбиттә, беҙҙең төп маҡсат - балаларҙың мөмкинлектәренән сығып, уларҙы ҙур тормошҡа әҙерләү. Ғәҙәти мәктәп уҡыусылары менән сағыштырғанда, беҙҙең балаларҙы эшкә урынлаштырыуы ла күпкә ауырыраҡ мәсьәлә. Әммә унан башҡа беҙҙең үҙәктең тағы ла бер бик мөһим миссияһы бар - беҙ ата-әсәләр һәм балалар күңелендә өмөт саткылары уятырға һәм үҙебеҙҙең эшебеҙ менән ғаиләлә булған социаль көсөргәнеште бөтөрөргә, психологик атмосфераны ыңғай яҡҡа үҙгәртергә тырышабыҙ. Йәғни беҙҙең хеҙмәтте аттестаттар, почет грамоталары, көндәлектәге билдәләр менән генә баһаларға ярамай.

Дистанцион үҙәктең директоры вазифаһын мин 2018 йылдан алып башҡарам. Бар коллектив менән бергә эшләгән эшебеҙҙең һөҙөмтәһен күреү ҡанатландыра, яңы үрҙәргә этәргес бирә...

**Айһылыу ДАУЫТОВА әңгәмәләште.**

*✓ Ҡөрьән буйынса рөхсәт ителгән күп ҡатынлылыҡ башҡорттарҙа аҡрынлап бөтә бара - бик һирәк ирҙәрҙең ике-өс ҡатыны була, күбеһе - бер генә ҡатынлы. Мин һорашҡан 56 башҡорттоң өсәүһененең генә ике ҡатыны бар ине.*



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# УРМАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

**XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән рус табибы, медицина докторы Дмитрий Петрович НИКОЛЬСКИЙ 1899 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тип исемләнгән үтә ҡыҙыҡлы китап авторы булараҡ билдәле. Унан башҡа Д.П. Никольский 1895 йылда "Землеведение" ғилми журналында "Из поездки к лесным башкирам" тигән этнографик мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәләлә Архангел заводы, Тирәкле, Уҫманғәле, Инйәр ауылдары һәм Көньяҡ Уралдың башҡа урындары иҫкә алына. Автор урындағы башҡорттарҙың көнкүреше һәм йәшәү рәүеше, ялан һәм урман зоналары башҡорттары араһындағы айырмалыҡтар хаҡында ла бәйән итә.**

Урман башҡорттары балыҡ тоторға ла ярата, башлыса, йәй айҙарында. Балыҡты мурҙа, ау менән тоталар, һалдау менән сәнсеп алалар һ.б. Һалдау менән йышыраҡ бәрҙегә, бағрыға, суртанға һ.б. балыҡтарға йөрөйҙәр, ике-өс һәм унан да күберәк кеше бергә бара. Ике кеше, яр буйлап килеп, балыҡ ятҡан урынды күрһәтә, ә өсөнсөһө йылғанан һыбай барған көйө балыҡты сәнсеп алырға тейеш. Кистәрен ут яндырып балыҡ аулау бигерәк тә үҙенсәлекле һәм тәьҫирле. Бәғзе бер башҡорттарҙа ошолай итеп балыҡ тотоу теләге шул тиклем көслө, улар, заводта көнө буйына барған ауыр эштәре тамамланыу менән, ял итеп тә тормайынса, балыҡ ауларға ашыға һәм, төн буйына тигәндәй, шуның менән шөғөлләнә.

Башҡорт ир-аттарының шөғөлдәре хаҡында бәйән иткәс, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ниҙәр менән шөғөлләнеүҙәре тураһында ла әйтеп үтмәй булмаҫ. Улар эшләгәндәр артыҡ күҙгә салынып бармай, әммә ҡатын-ҡыҙҙарға барса өй эштәре һәм хәстәрҙәре йөкмәтелгән. Улар мейес яға, өй йыйыштыра, хатта ат сбруяһын тәртиптә тота, мал аҫрай, балаларын ҡарай, кейем-һалым өсөн йөн иләй, һыйыр һауа, май әҙерләй һәм әсе бал ҡоя, барса ҡыр эштәрендә ҡатнаша. Ошондай күп төрлө эшмәкәрлегенә ҡарамаҫтан, ғаилә эштәрен ул хәл итмәй, бик һирәк осраҡтарҙа ғына уның фекере иҫәпкә алына.

Ҡөрьән буйынса рөхсәт ителгән күп ҡатынлылыҡ башҡорттарҙа аҡрынлап бөтә бара - бик һирәк ирҙәрҙең ике-өс ҡатыны була, күбеһе - бер генә ҡатынлы. Мин һорашҡан 56 башҡорттоң өсәүһененең генә ике ҡатыны бар ине. Бының сәбәбе, бер яҡтан, иҡтисади шарттар, икенсе яҡтан - ғаилә ҡороу мәсьәләләре менән бәйле. Башҡорттарҙың байтағы элеккегә ҡарағанда күпкә кәмегән ҡалымды ла түләргә ҡыйынһына, ә ике ҡатын өсөн түләү бигерәк тә ауырға төшә. Хәҙерге ваҡытта ҡалым өсөн 100 һумдан 5 һумға тиклем аҡса түләнә, хәленә ҡарап, билдәле бер күләмдә мал бирелә. Ҡалымдың бер өлөшө никах уҡытылыу менән түләнә. Ҡалым түләгәндә билдәле бер йола үтәлә. Ҡалым тулыһынса түләп бөтөрөлмәйенсә кәләше иренең өйөнә китә алмай.

Йола атҡарыу яғынан урман башҡорттарының



никахлашыуында башҡа башҡорттар менән оҡшашлыҡтар күп, шуға күрә был хаҡта яҙып тормайынса, икенсе бер йоланы күрһәтеп үтәм. Туйға тиклем кейәү кәләшенең барса туғандарын һәм таныштарын ғына түгел, ә уның ауылында йәшәгән сит-яттарҙы ла үҙенә ҡунаҡҡа саҡыра. Әйтергә кәрәк, урман башҡорто буласаҡ ҡатынын үҙ ауылынан түгел, ә сит ауылдан алырға тырыша, быны үҙ ауылы ҡыҙҙарын белеү менән аңлата. Саҡырылған ҡунаҡтарын кейәү әсе бал, ҡымыҙ, сәй, ит һ.б. менән һыйлай. Бындай һый ҡиммәткә төшә, бигерәк тә башҡорттарҙың ашап-эсеүгә әүәҫ булыуҙарын иҫәпкә алғанда. Туйҙан һуң кәләштең туғандары ла ошолай уҡ кейәүҙәренең яҡындарын һәм таныштарын ҡунаҡҡа саҡырып ала. Ҡунаҡҡа саҡырылып килеүселәр күп булғанлыҡтан, кейәүҙең йә иһә кәләштең өйөнән башҡа уларҙың яҡын таныштарында урынлаша. Ҡунаҡ һыйлау ике-өс көн буйына дауам итә. Әлбиттә, бындай ҙур мәжлестәрҙе бай башҡорттар ғына уҙғара ала. Туй байрамы башҡорттар араһында дини байрамдарҙан ҡала икенсе урында тора, тип әйтеп була.

Улар туйҙарҙы ҡышын йә иһә яҙ көнө уҙғара, йәйен бик һирәк, сөнки йәй айҙарында байрам итеү өсөн ваҡыт тар, унан һуң, эш күп саҡта башҡорт үҙенең ҡыҙы йөҙөндә эшкә яраҡлы кешеһен өйөнән ебәргеһе килмәй; ҡышын буш ваҡыт та етерлек, ҡунаҡтарҙы һыйларлыҡ мөмкинлек тә бар. Никахҡа инеүселәрҙең йәше рустарҙыҡына ҡарағанда олораҡ - егеттәр 21-25 йәштән иртәрәк өйләнмәй, ҡыҙҙар 16-18 йәштәр иртәрәк кейәүгә сыҡмай. Ир-аттарҙың никахҡа һуң инеүе бары тик иҡтисади шарттар һәм һалдат хеҙмәтен үтәү менән бәйле. Әгәр ҙә ки башҡорттың хәрби хеҙмәт үтәү сираты етә икән, ул хеҙмәтен тамамлағансы өйләнмәй. Балаларының никахҡа риза булыу-булмауы иҫәпкә алынмай; барыһын да ата-әсәләре хәл итә. Әгәр ата-әсәләр үҙҙәренең улдарын ниндәйҙер ҡыҙға өйләндереүҙе яраҡлы һәм файҙалы тип тапһа, улар кәләштең ата-әсәһенә ҡоҙалар ебәрә. Улары риза булһа, егеттең атаһы ҡалым түләү хаҡында ла килешеп ҡайта.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 3-10-сы һәм 13-сө һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



**Сергей РУДЕНКО**

## БАШҠОРТТАР

### Башҡорттарҙың ризығы

Ҡорот башҡорттарҙың киң таралған иң мөһим һөт ризыҡтарының береһе булып тора. Уны әҙерләгәндә ҡаҙанда яңы һауылған һөттө ҡайнаталар, һуңынан ҙур ағас табаҡтарға ҡойоп һыуыталар. Һыуығас, өҫтөндәге бешкән ҡаймағын алып, һөттө ағас тәпәндәргә бушатып, ҡатыҡ итеп әсетәләр. Әгәр тәпәндә ҡатыҡ башы ҡалған булһа, һөт үҙенән-үҙе әсей. Әсегән һөттөң эремсекле массаһы төбөнә ултырғас, өҫкә сыҡҡан һыуын һоҫоп алып торалар. Тәпәнде шулай эремсекле масса менән тултырғас, уны ҡаҙанға бушатып, һыуынан айыралар. Һуңынан тоҡтарға һалып, һығып алынған эремсекте - йәш ҡоротто шунда уҡ ҡуллана башлайҙар, йәки еңелсә генә тоҙлап, 7-10 сантиметр диаметрлы шарҙар әүәләп, ҡояшта йәки махсус эшләнгән ылашта киптерәләр. Ылаш **(һүрәт)** түбәндәгесә эшләнә. Ергә ҡағылған дүрт ҡаҙыҡҡа ике арҡыры ҡаҙыҡ, уларға арҡырыға нәҙек сыбыҡтар һалына. Ошо сыбыҡтар өҫтөнә ҡорот



шарҙары урынлаштырыла. Ҡайһы берҙә ылашты усаҡ өҫтөнә эшләйҙәр. Быны бигерәк тә тау башҡорттарында күҙәтергә мөмкин. Ҡорот шулай тиҙерәк кибә. Был осраҡтарҙа ул төтөн еҫен һеңдерә һәм шуға ла ҡайһы бер авторҙарҙың, башҡорттар ҡоротто ыҫлай, тип раҫлауына юл ҡуя.

Ҡоротто һаҡлау өсөн тал сыбыҡтарынан груша формаһында махсус сыттар үрелгән йәки тубал эшләнгән.

Башҡорттар майҙы аҡ май һәм һары май итеп эшләй. Һуңғыһы, ғәҙәттә, һатыу өсөн әҙерләнә. Үҙҙәре өсөн башҡорттар аҡ май төшөрә; уны бейек, диаметры бәләкәй булған силәктә бешкәк менән бешәләр.

Ризыҡҡа әсегән һөткә ҡаймаҡ ҡушып бешелгән күбек май ҙа ҡулланыла.

Һыйыр һөтөнән әҙерләнгән айран киң таралған. Уны барлыҡ башҡорттар ҙа тиерлек әҙерләй. Бары тик Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында рус кеүәҫен әҙерләй башлағас, айран эшләмәгәндәр. Айран ҡымыҙ кеүек үк әҙерләнә. Әммә ҡымыҙҙан айырмалы, уны ҡайһы ваҡыт һыу менән шыйыҡлайҙар. Ҡайһы бер урындарҙа май төшөргәндә сыҡҡан шыйыҡлыҡты ла айран тип атайҙар һәм шуны эсәләр.

Бейә һөтөнән бары тик ҡымыҙ әҙерләнә. Уны әҙерләү ысулдары барыһына ла билдәле. Был мәсьәлә буйынса махсус һәм бик күп әҙәбиәт бар. Башҡорттарҙың ҡымыҙ бешеүе малсылыҡ менән шөғөлләнгән күсмә халыҡтарҙыҡынан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Ҙур күн һауытҡа, һуңынан уны ағас һаба алмаштыра, һауып алынған бейә һөтө һалына, ҡайһы бер ваҡытта уға һыу ҡушалар. Алдан ҡулланылған һауыттарҙың ситендә йәки төбөндә һәр саҡ ҡур йәки әсетке ҡалдырыла. Яңы һөт һалғас, улар үрсей һәм һөттө әсетә башлай. Әгәр һауыт яңы булһа, яңы һөткә икенсе һауыттан йәки уҙған йылдан ҡалған ҡымыҙ һалына. Ҡымыҙ өҫтөнә яңы һөт һалынған һайын уны махсус бешкәк ярҙамында болғайҙар. Өс-дүрт көндән ҡымыҙ әҙер була.

Бешкәк - оҙонлоғо 1 метр, бер башында диаметры 15-25 сантиметрлы тишекле түңәрәк булған таяҡ. Ғәҙәттә уны тотош ағастан эшләгәндәр: һабы - ағас олононан, ә ҡулсаһы тамырынан яһалған. Ҡайһы берҙә ҡулса урынына әүернә (крестовина) ҡуйылған **(һүрәт).**



**(Дауамы бар).**

ҠЫҘЫҠ ТА, ҠЫҘҒАНЫС ТА...

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...

## Францияла эшләгәне



"Астурия компания"һы эште "юғары кимәлдә" ойоштора белгән дә инде. Журналист асыҡлауынса, директорҙар араһында рус телен белеүселәр, шулай уҡ Өфө губернаһында компанияның үҙ агенты булған. "Ул агент тау һәм далаларҙың ирекле йәш, сәләмәт улдарын һайлап алып, даими рәүештә Францияға оҙата. Егеттәр иһә күп осраҡта кире әйләнеп ҡайтмай". "Нишләп был тиклем алыҫҡа юлландығыҙ һуң?" - тигән һорауға, башҡорттар "Ҙур аҡса вәғәҙә иткәнгә", - тип яуаплаған. Корпорация ялланыусыларға көнөнә 3 һум, йәғни 9 франк түләргә, йылы фатирҙа йәшәтергә вәғәҙә биргән. Ә ысынында иһә эш хаҡы 5 франк тәшкил иткән, өҫтәүенә, даими рәүештә штраф һалып, ул франк та тартып алынған. Һөҙөмтәлә башҡорттар ҡулдарына аҙнаһына 10-12 франк ҡына ала алған. "Эшселәрҙе ҡот осҡос бысраҡ, һаҫыҡ казармаға урынлаштырғандар. Төрмәләге кеүек, урамға сығыу йә ситтән кемделер индереү рөхсәт ителмәгән. Аҙыҡ-түлекте завод кибетенән генә һатып алырға мөмкин булған. Ундағы хаҡтар иһә үтә юғары, ризыҡтарҙың сифаты түбән булған". Завод етәкселеге баштан уҡ эшкә килеүселәрҙең паспорттарын һәм башҡа документтарын йыйып алған. Тел белмәгән кешеләр сит ерҙә яҡлауһыҙ һәм ярҙамһыҙ тороп ҡалған. Ауырығандарҙы ла эшләргә мәжбүр иткәндәр. Рәсәйҙән килгән эшселәрҙең 30 проценты һәләк булған, кешеләр каторганан ҡасҡан һымаҡ ҡасып киткән, тип һөйләгән башҡорттар журналисҡа.

Компания сит ил эшселәренең һәр аҙымын күҙәткән. "Рус, хатта башҡорт, татар телдәрен белгән махсус кешеләр уларҙың арттарынан ҡалмай йөрөгән һәм шунда уҡ ишетелгән бар хәбәрҙе завод директорына еткергән". Ғәйеплеләргә штраф һалынған. Француздар үҙҙәренең закон боҙоуын белгәнгә күрә лә, эшселәренә үҙ-ара аралашырға ирек бирмәгән. "Бик һирәктәр генә тыуған яҡҡа ҡайтырға рөхсәт алыуға ирешкте", - тип һөйләгән башҡорттар. Бер йыл буйы эшләп, фирмаға бер ниндәй бурысы булмағандарҙы йыл тулыуға бер аҙна ҡалғас эштән ҡыуып сығарғандар.

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**

**(Дауамы. Башы 10-сы, 13-сө һандарҙа).**

✓ *Милли мәктәптәргә ата-әсәләре балаларын үҙ теләге менән килтерә, улар араһында туған телен яҡшы белмәгәндәр ҙә бар, әммә улар ҙа балаларын башҡорт рухында тик милли мәктәптә тәрбиәләп булыуын яҡшы аңлай.*

# ТӘРБИӘ МӘСЬӘЛӘҺЕНДӘ

## балаларҙа яңы

(Башы 1-се биттә).

**Психология фәнендә бер ҡыҙыҡлы фекер бар: кеше 45 йәшкә тиклем үҙ-үҙен, бигерәктә үҙенең холҡон үҙгәртә алыу мөмкинлегенә эйә. Әммә бәғзе берәүҙәр ниндәйҙер кимәлгә етһә, туҡталып ҡала, бер урында тапана башлай...**

***Сулпан Уйылданова:*** Йәмғиәттә шундай хәлдәр ҙә була: яҡшы белемле, һөнәрле, баһалы кеше көтмәгәндә үҙенең тормошон, йәшәү рәүешен ҡырҡа үҙгәртә, элегерәк һис бер һиҙелмәгән маҡсаттар ҡуйып йәшәй башлай. Шундай осраҡтарҙа быңдай шәхестең донъяға ҡарашы ла тамырынан үҙгәреүе мөмкин.

Ғөмүмән, ниндәйҙер белемдәргә эйә булған, үҙенең һөнәрендә уңыштарға өлгәшкән, хатта ки юғары дәрәжәләр, исемдәр алған шәхесте лә үҙ үҫешенең иң юғары нөктәһенә еткән, тип һығымта яһарға ярамайҙыр. Шәхес үҫешенең сиге юҡ, һәм был фекерҙе беҙ тәрбиә барышында уҡыусыларыбыҙҙың аңына һеңдереп ҡалдырырға тейешбеҙ. "Тормошта үҙ урынығыҙҙы табаһығыҙ килә икән, ғүмер буйына нимәгәлер өйрәнеүҙән, уҡыуҙан, яңы, юғарыраҡ маҡсаттар ҡуйып йәшәүҙән баш тартмағыҙ, - тип һәр даим ҡабатлай киләбеҙ. - Донъябыҙ шундай ҙур, унда өйрәнеп бөтөлмәгән нәмәләр бихисап. Боронғо философ Сократтың фәһемле бер фекерен иҫтә тотоу фарыз: "Мин ни тиклем күберәк беләм, шул тиклем аҙ белеүемде беләм". Тәрбиә процесында иң мөһим принциптарҙың береһе - балаларҙа күп нәмәләргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятып, яңы ынтылыштарға юл асыу.

**Әлеге ваҡытта Рәсәйҙең 40 меңгә яҡын мәктәптәрендә 18 миллион уҡыусы тәрбиәләнә. Уҡытыу-тәрбиә эше ныҡлы контролдә тотола, закондар етерлек, квалификациялы педагогик кадрҙар буйынса ҡытлыҡ булған хәлдә лә, билдәле кимәлдә тәрбиәүи саралар ғәмәлгә ашырылып килә. Шул уҡ ваҡытта киң матбуғат сараларында теге йәки был мәктәптә буллинг осраҡтары, үҫмерҙәр енәйәтселеге хаҡында мәғлүмәттәр баҫылып тора. Ярай әле, бындай алама күренештәр милли мәктәптәребеҙгә хас түгел.**

***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Милли мәктәптәрҙә әхлаҡи, рухи тәрбиәгә ҙур иғтибар бирелә, шуға күрә уҡыусыларҙың берберене ҡыйырһытыу осраҡтары юҡҡа иҫәп. Тимәк, ғаилә лә, мәктәп тә был юҫыҡта үҙ бурысын теүәл үтәгән, тип һығымта эшләйбеҙ. Әммә ғаиләләрҙең дә, балаларҙың да төрлөһө бар. Үҫмерҙәрҙең енәйәти ғәмәлдәргә тиклем барып етеүе ғаиләнең дә, мәктәптең дә эшләп еткермәүенән, тип әйтәбеҙ, һәм был ысынлап та шулай.

***Сулпан Уйылданова:*** Бер бала ла енәйәтсе булып тыумай, бер генә ата-әсә лә балаһының енәйәт юлына баҫыуын теләмәй. Уҡытыусылар, тәрбиәселәр ҙә уҡыусыларын мәктәптән белемле, тәрбиәле шәхес итеп сығарыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Ҡайһы бер үҫмерҙәрҙең агрессивлығы, тиҫтерҙәренә ҡарата насар мөнәсәбәттәре билдәле бер шарттарҙа хасил була. Төп сәбәп - уларға иғтибар етмәй, уларҙы күрмәйҙәр, яҡшы баһа бирмәйҙәр, бер нисек тә күтәрмәйҙәр. Ғаиләлә, тышҡы мөхиттә, башҡа балалар араһында улар аңлау тапмай, тик кире ғәмәлдәр менән үҙҙәрен танытырға, үҙҙәренсә өҫтөнлөк алырға тырыша. Хатта яҡшы тип һаналған ғаиләлә лә баланың эске кисерештәрен һиҙмәү, белмәү, аңламау арҡаһында уның яңылыш юлға баҫыуы мөмкин.

**Һеҙ икегеҙ ҙә республика кимәлендә танылыу тапҡан милли мәктәп етәкселәре. Милли мәктәптәр һәм ҡәҙимге мәктәптәр араһында айырма булыуы күҙгә бәрелеп тора. Ошо хаҡта ниҙәр әйтер инегеҙ?**

***Сулпан Уйылданова:*** Белорет ҡалаһында 1995 йылда ни барыһы өс кластан торған башҡорт мәктәбен асып ебәргәйнек, ул хәҙер гимназия статусын йөрөтә. Белоретта рустар күберәк бит, 90-сы йылдарға тиклем милли мәктәп асыу мөмкинлеге булманы. Әммә һуңынан, халҡыбыҙҙың милли аңы уянып, рух күтәренкелеге башланған йылдарҙа Беренсе Президентыбыҙ М.Ғ. Рәхимовтың фатихаһы менән Башҡортостанда милли мәктәптәр күпләп асыла башланы. Был туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу йәһәтенән тәүге еңеүебеҙ булғандыр, ә әлеге ваҡытта тиҫтәләрсә йыллыҡ юбилейҙарын билдәләгән башҡорт мәктәптәрен тамамлап, төрлө һөнәрҙәргә эйә булған, төрлө өлкәләрҙә танылыу тапҡан элекке уҡыусыларыбыҙ менән ғорурланырға хаҡлыбыҙ. Улар үҙҙәре лә ошо милли мәктәптәрҙә төплө белем һәм яҡшы тәрбиә алыуҙары өсөн рәхмәтле булыуҙарын белдерә.

Милли мәктәптәргә ата-әсәләре балаларын үҙ теләге менән килтерә, улар араһында туған телен яҡшы белмәгәндәр ҙә бар, әммә улар ҙа балаларын башҡорт рухында тик милли мәктәптә тәрбиәләп булыуын яҡшы аңлай. Туған телдә яҡшы белеү уҡыусыларҙа халҡыбыҙ тарихына, мәҙәниәтенә, ғөрөф-ғәҙәттәренә, милли ҡиммәттәренә ихтирам уята, был һәр яҡтан тәрбиәле шәхестәр үҫтереү мөмкинлеген бирә.



***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Баш ҡалабыҙҙа хәҙер Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы тип аталған тәүге милли мәктәп асылыуға сирек быуат үткәс кенә тағы ла бер милли белем усағы - М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы асылды. Әлбиттә, йәмәғәтселек, ата-әсәләр, педагогик коллектив махсус рәүештә юллап асылған милли мәктәптең, ҡәҙимге мәктәптәр менән сағыштырғанда, юғарыраҡ кимәлдә эшләүен теләне. 20-се гимназияның, беҙҙең лицейҙың бер үҙенсәлеге бар: беҙ бер генә микрорайонға беркетелмәгәнбеҙ, ата-әсәләр, йәшәгән урындарына ҡарамайынса, балаларын үҙҙәренең теләге буйынса башҡорт мәктәбендә уҡытыу мөмкинлегенә эйә. Беҙҙең тағы ла бер өҫтөнлөк - балаларҙы һайлап алабыҙ, сөнки теләүселәр күп, мәктәптең максималь һыйҙырышлығы бында күпме баланы уҡытып була икәнлеген билдәләй. Һайлап алынған балалар менән эшләүе лә еңелерәк, сөнки ата-әсәләр ҙә, уҡыусылар ҙа тап ошо мәктәптә белем алыу мөмкинлегенә етди ҡарай.

***20-се гимназияның, беҙҙең лицейҙың бер үҙенсәлеге бар: беҙ бер генә микрорайонға беркетелмәгәнбеҙ, ата-әсәләр, йәшәгән урындарына ҡарамайынса, балаларын үҙҙәренең теләге буйынса башҡорт мәктәбендә уҡытыу мөмкинлегенә эйә. Беҙҙең тағы ла бер өҫтөнлөк - балаларҙы һайлап алабыҙ, сөнки теләүселәр күп, мәктәптең максималь һыйҙырышлығы бында күпме баланы уҡытып була икәнлеген билдәләй. Һайлап алынған балалар менән эшләүе лә еңелерәк, сөнки ата-әсәләр ҙә, уҡыусылар ҙа тап ошо мәктәптә белем алыу мөмкинлегенә етди ҡарай.***

Беҙ һәр даим милли мәктәп статусын раҫларға, педагогик коллективҡа булған ышанысты аҡларға тырышабыҙ. Элегерәк яуланған ҡаҙаныштарға таянып ҡына эшләп булмай, алға барыу өсөн ниндәйҙер яңылыҡтар индереп, уларҙы ғәмәлгә ашырыуға уҡыусыларыбыҙҙы йәлеп итәбеҙ. Билдәле бер эштәр менән мауыҡтырмаһаң, ҡыҙыҡһындырмаһаң, улар дәрестәрҙән аҙаҡ үҙҙәре нимәлер уйлап сығара, ә был контролһеҙ ғәмәлдәр һәр саҡта ла файҙалы йә иһә ыңғай булмай. Уҡыусыларҙың һәләттәрен үҫтереү өсөн мөмкин булған барса шарттарҙы булдырабыҙ. Бының өсөн әүҙемлек күрһәтергә, йыш ҡына ҡаршылыҡтарҙы үтеп сығырға тура килә. Бына, мәҫәлән, беҙҙә һәм 20-се гимназияла ғына уҡыусылар дәрестәрҙән аҙаҡ оҙайтылған көн төркөмдәрендә ҡала, уҡытыусылары менән шөғөлләнә, иртәгәһе дәрестәргә әҙерләнә, ял итә һ.б. Был ата-әсәләр өсөн бик уңайлы. Яңы проекттар булдырып, уларҙы уңышлы башҡарабыҙ. Мәҫәлән, быйыл "Йәш эшҡыуарҙар" проекты бойомға ашырыла башланы, унда 90-дан ашыу уҡыусы ҡатнашырға теләк белдерҙе. Каникулдарҙан һуң район хакимиәте башлығы бер нисә уңышлы эшҡыуарҙы лицейға уҡыусылар менән осрашыуға алып киләсәк. Ошо проект буйынса алда байтаҡ эштәр планлаштырылған. Был уҡыусылар өсөн бик ҡыҙыҡлы, шул уҡ Муса Мәзитовтың дәрестәрҙән һуң һынлы сәнғәткә, черчениеға, ҡул эштәренә өйрәнеүе арҡаһында хәҙер инде республика кимәлендә танылыу тапҡан эшҡыуар булып китеүен уҡыусыларыбыҙ белә. Әйткәндәй, Муса Мәзитов республика кимәлендә бик күп сараларҙа, МХО-ға булышлыҡ итеүсе гуманитар акцияларҙа әүҙем ҡатнаша, Беларусь республикаһына барыусы делегация составынан индерелгән.

**Шуныһы ҡыҙыҡлы, йыш ҡына башҡа милләттән булған ата-әсәләр үҙ балаларын башҡорт гимназияларына килтерергә тырыша. Улар әйткәнсә, милли мәктәптең үҙенә тартып торған ауараһы бар. Бында башҡорт мәктәптәрендә булдырылған ыңғай психологик атмосфера хаҡында һүҙ баралыр.**

***Сулпан Уйылданова:*** Алдараҡ әйтелгәнсә, мәктәптән байтаҡ алыҫ урында йәшәгән ата-әсәләр үҙ теләге менән балаларын беҙгә алып килә, ә был билдәле бер ауырлыҡтар менән бәйле: көн һайын баланы ваҡытында мәктәпкә алып килергә, алып ҡайтырға тура килә бит. Ә улар ауырһынмай, тик балалары ошо мәктәптә белем алһын тип теләй. Уларҙы тап ошо мәктәп мөхитенең һеҙ әйткән комфортлы психологик атмосфераһы тартып тора ла инде. Ҙур ҡалала башҡорт мөхите милли мәктәптә генә матур сағылышын таба. Барыһын да туған телебеҙ берләштерә, әҙәбиәт, сәнғәт, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, йыр-бейеүҙәребеҙ аша уҡыусыларыбыҙ халҡыбыҙҙың мәңгелек ҡиммәттәрен үҙләштерә. Иркен аралаша алыу, дөйөм эштәрҙә ихлас ҡатнашыу, яҡшы мөнәсәбәттәр балаларҙы бер ғаиләләге кеүек яҡынайта, бер-береһен тиң күргән шәхестәр итеп формалаштыра. Шуға күрә элегерәк беҙҙең мәктәпте тамамлаған уҡыусыларыбыҙ үҙ балаларын бында уҡырға алып килә лә инде.

**Һеҙгә бер фекер тәҡдим итәм: башҡорт халҡының менталь сифаттары, уның психологияһы милли мәктәптә бермә-бер сағылыш таба. Килешәһегеҙме?**

***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Әлбиттә, тап шулай. Халҡыбыҙға хас ыңғай сифаттар күп бит. Башлыса, тәртипле, әхлаҡлы, киң күңелле, баҫалҡы, бер-береһенә ихтирамлы, яҡшылыҡты, изгелекте үҙ иткән, кәрәк саҡта бер-береһенә ярҙамсыл халыҡ итеп беләләр беҙҙе. Әлбиттә, шуҡ, шаян, тик тормаҫ малайҙар беҙҙә лә бар, әммә улар ҙа билдәле бер сиктән сыҡмай. Мәктәптә тәртип, дисциплина, белем һәм тәрбиә биреү һөҙөмтәле икән, ата-әсәләр балаларын ошо мәктәпкә ҙур ышаныс менән алып килә. Башҡа мәктәптәрҙә 4-ле - 5-легә уҡыған балаларын 7-8 кластарға алыуҙарын үтенеп килгән ата-әсәләр ҙә бар. Шулай бер мәктәптән тик 5-легә уҡыған, спорт менән шөғөлләнгән, информатика буйынса олимпиадала еңгән бер уҡыусыны алғайныҡ, уның артынан шул уҡ кластан бик яҡшы уҡыған икенсе уҡыусының ата-әсәһе лә беҙҙең лицейға күсергә теләк белдерҙе. Сәбәбе бик ябай - әлеге класта тырышып уҡымаған, тәртипһеҙ малайҙар был уҡыусыларға ҡамасаулай, алға китергә мөмкинлек бирмәй. Уҡытыусы насар уҡығандар менән күберәк эшләргә мәжбүр, ә һәләтле уҡыу-

***✓ Һуңғы йылдарҙа балаларҙа ватансылыҡ тәрбиәләү маҡсатында "Шайморатов кластары" булдырылды. Бындай кластар һәр яҡтан алдынғы булырға тейеш. Был - тормошсан проект.***

# ИҢ МӨҺИМЕ -

## ынтылыштарға юл асыу

сыларға иғтибар етмәй. Унан һуң, тәртипһеҙ уҡыусыларҙың отличниктарҙы өнәп еткермәгәне, насар мөнәсәбәттә булыуҙары билдәле. Ә был уҡыусылар беҙгә күсеү менән тиҙ генә яраҡлашып, һин дә мин уҡып алып китте.

**Р. Ғарипов исемендәге 1-се БРГИ директоры урынбаҫары Азамат Шәмсетдинов яҡшы өлгәшкән уҡыусылар үҙҙәренән алдараҡ барғандарҙың "арҡаһын" күрһә, тағы ла әүҙемерәк, тырышыбыраҡ уҡый башлай, тигәйне.**

***Сулпан Уйылданова:*** Тап шулай. Спорттағы кеүек, уҡыуҙа ла алда билдәле бер "маяҡ" бар икән, башҡалар уның артынан ҡалмаҫҡа тырыша, хатта унан да алғараҡ сығыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Ҡайҙа ярыш, конкуренция бар, шунда алға китеш өсөн һәйбәт шарттар хасил була.

**Патриотизм тигән ҙур төшөнсә бар, миңә ҡалһа, илһөйәрлек, ватансыллыҡтан башҡа, үҙенсәлекле мәктәп патриотизмы хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәктер. Уҡыусыларҙың үҙҙәре уҡыған мәктәпте яратыуы, "Был - минең мәктәбем, был иң шәп мәктәп" тип иҫәпләүе хаҡында һүҙ бара бында.**

***Сулпан Уйылданова:*** Минеңсә, бөгөнгө мәктәп өсөн был үтә лә мөһим мәсьәлә булып тора. Үҙегеҙ беләһегеҙ, конкурентлы осорҙа йәшәйбеҙ, ә был мәктәп мөхитенә лә берҙәй ҡағыла. Һәр бер мәктәп етәксеһе үҙенең контингентын һаҡларға тырыша. Ә был мәктәптең эш һөҙөмтәләре менән бермә-бер бәйле, уның менән идара итеүсе органдар ғына түгел, ата-әсәләр ҙә ҡыҙыҡһына. Ғөмүмән, мәктәптәрҙе бер-береһе менән элек тә сағыштыралар ине, хәҙер ҙә шулай. Ә мәктәп патриотизмына килгәндә, ундай төшөнсә бар, мәҫәлән, беҙҙең уҡыусыларыбыҙ өсөн ул "Беҙ - егерменселәр" тигәнгә тиң. Әммә мәктәп менән ғорурланып ҡына алға барып булмай. Мәктәптең эш һөҙөмтәләре, законға ярашлы, 9 кластан һуң ТДИ, урта мәктәпте тамамлағанда БДИ менән билдәләнә. Мәктәптәргә ошо маҡсатҡа ярашлы эшләргә тура килә. Ата-әсәләр ҙә үҙ балаларының ошо имтихандарҙы яҡшы үтеп, артабан урта һәм юғары һөнәри уҡыу йорттарына бюджет нигеҙендә инеүен ҡайғырта. Нисек кенә булмаһын, гимназиябыҙҙа уҡыусылар берҙәмлеге бар, уны "егерменселәр туғанлығы", тип тә атап булалыр, был, мәҫәлән, гимназистарыбыҙҙың "ХХ Централ" КВН командаһының сығыштарында, ҡасандыр гимназияны тамамлап сығыусыларҙың осрашыуҙарында асыҡ сағыла. Яңыраҡ ҡына билдәле кинорежиссер Булат Йосопов тыуған гимназияһына үҙенең "Фәрзәнә көнбайышҡа бара" фильмын күрһәтергә алып килде, бындай саралар мәктәбебеҙ менән ғорурланыу тойғоһон уята.

***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Уҡыусыларыбыҙҙың үҙ мәктәбенә ҡарата ыңғай тойғолары уны тамамлап сыҡҡас та онотмауҙарында асыҡ сағыла. Улар лицей менән ҡыҙыҡһынып торалар, матди яҡтан ярҙам итеүселәр ҙә бар. Бына февраль айында республикала "Һөйөү менән китап бүләк итегеҙ" тигән акция уҙғарылғайны. Беҙҙең лицейға атап бүләк ителгән китаптарҙы "Китап" нәшриәте директоры вазифаһын үтәүсе Эльмира Хәйритдинова һәм Мәғариф министрлығының Милли мәғариф идаралығы начальнигы Морат Ишемғолов үҙҙәре алып килде. Баҡтиһәң, республикала мәктәп китапханаһы өсөн иң күп китап беҙҙең лицейға бүләк ителгән икән. Ҡунаҡтарыбыҙ әйтеүенсә, хатта республика хөкүмәтенең Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Светлана Верещагина беҙҙең лицей өсөн һатып алған китаптарын ҡалдырып киткән.

Быны милли мәктәптең йәмғиәт һәм дәүләт алдындағы оло статусын раҫлаусы бер факт итеп ҡабул итергә була.



***Үҙегеҙ беләһегеҙ, конкурентлы осорҙа йәшәйбеҙ, ә был мәктәп мөхитенә лә берҙәй ҡағыла. Һәр бер мәктәп етәксеһе үҙенең контингентын һаҡларға тырыша. Ә был мәктәптең эш һөҙөмтәләре менән бермә-бер бәйле, уның менән идара итеүсе органдар ғына түгел, ата-әсәләр ҙә ҡыҙыҡһына. Ғөмүмән, мәктәптәрҙе бер-береһе менән элек тә сағыштыралар ине, хәҙер ҙә шулай. Ә мәктәп патриотизмына килгәндә, ундай төшөнсә бар, мәҫәлән, беҙҙең уҡыусыларыбыҙ өсөн ул "Беҙ - егерменселәр" тигәнгә тиң.***

**Совет осоронда әхлаҡ һәм тәрбиә өлкәһенә ҡараған бер дәүләт документы бар ине - ул "Коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексы" тип аталды. Хәҙер инде коммунистик идеялар ҙа, ул саҡтағы дәүләт тә, әлеге кодекс та юҡҡа сыҡты. Ә бөгөн бар мәктәптәр өсөн берҙәм тәрбиә кодексы кәрәкме икән?**

***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Закон буйынса мәктәптәрҙә бер ниндәй ҙә идеологияның булыуы мөмкин түгел. Әүәл сәйәси идеологик тәрбиә пионер, комсомол ойошмалары аша ғәмәлгә ашырылған. Хәҙерге осорҙа ла мәктәптәрҙә төрлө балалар ойошмаларын булдырып ҡарайҙар, әммә уларҙың береһе лә ерегеп, үҫешеп китә алмай. Уларҙың балаларға йоғонтоһо юҡҡа иҫәп. Әлбиттә, сәйәси идеология булмаған хәлдә лә, һәр дәүләттең, һәр милләттең тәрбиә идеологияһы булырға тейеш. Шулай булмағас, йә теге, йә был өлкәлә проблемалар килеп сығып тора. Шул уҡ хеҙмәт тәрбиәһен алһаҡ та, был асыҡ күренә.

Һәр мәктәптең үҫеш концепцияһы, тәрбиә өлкәһенә ҡараған программалары, проекттары бар, әммә уларҙы үтәү йәһәтенән ҡыйынлыҡтар ҙа етерлек. Хәҙерге ваҡытта мәктәп етәкселеген төрлө күрһәтмә-талаптар, отчеттар менән күмеп алып баралар, ә был үҙе үк етәкселекте уҡытыу-тәрбиә эшенән айыра, уларҙың былай ҙа ҡәҙерле ваҡытын сарыф итеүгә килтерә. Үтәлеү ваҡыты күрһәтелгән документты һис кисекмәҫтән тултырып ебәрергә мәжбүр итәләр, ә ундай талаптар бер туҡтамай килеп кенә тора. Мәктәптә уҡыу процесы бара, ә һин сәғәт 12-нән дә ҡалмай нимә һоралған, шуны эшләп ебәреп өлгөрөргә тейешһең. Эшләмәһәң, ялыу яҙыла, өҫтәге етәкселек тә һиңә ыңғай ҡарамаясаҡ. Уларҙың мәктәп өсөн зыянынан башҡа бер генә лә файҙаһы юҡ: кемгәләр "эш күрһәтеү" өсөн кәрәк ул отчеттар. Бына был мәктәп ысынбарлығының кире яғы, башҡаса һығымта эшләп булмай. Ил Президенты В.В. Путиндың да ошо проблеманы булдырмау хаҡында күрһәтмәләре бар, тик урындарҙа улар үтәлмәй. Шул уҡ ваҡытта мәктәпте тикшерергә килеүселәр оторо күбәйеп китте, мәҫәлән, мәктәп ашханаларын әллә нисә төрлө комиссия килеп тикшереп йөҙәткәс, уларҙан яҡшы ашнаҡсылар ҙа китеп бөтөп бара.

***Сулпан Уйылданова:*** Мәктәптең тәрбиәүи идеологияһы уның концепцияһында сағылыш таба, беҙ уны булдырырға һәм үтәргә тырышабыҙ. Тәрбиә процесын әүҙемләштереү маҡсатында ниндәйҙер балалар ойошмалары эше алып барылырға тейеш ул. Әммә ҡайҙалыр уйлап сығарылған проекттар мәктәп мөхитен әллә ни иҫәпкә алмай эшләнгән булып сыға. Ундай ойошмалар ҡуйған талаптар мәктәп тормошо менән бәйле түгел. Мәҫәлән, талап ителгән берәй сараны ашыҡ-бошоҡ үткәрәләр ҙә, фотоларын ҡуйып, текст яҙып, медиа үҙәгенә ебәрәләр. Булдымы-булды, шуның менән эш тә тамам.

Ә мәктәп барыбер үҙ тормошо, үҙенең пландары менән йәшәй бирә. Үҙебеҙҙең тәрбиә пландарында күрһәтелгән традицион сараларҙы ойошторабыҙ, уҙғарабыҙ, уҡыусылар ҙа, класс етәкселәре лә ҡәнәғәт ҡала.

***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Бына республикала "Шаяниум" тигән КВН хәрәкәте бик уңышлы эшләй, унда милли мәктәптәребеҙҙең командалары бик теләп ҡатнаша. 136-сы лицейҙың "Һупайлы дәрүиштәре" тигән командаһы 2024 йылда һәм быйыл ошо хәрәкәттең гран-приһына лайыҡ булды. Әйтергә кәрәк, команда үҙенән-үҙе тиерлек ойоша, улар менән командалыҡ итеүҙең кәрәге лә юҡ, барыһын да үҙҙәре планлаштыра һәм үҙҙәре үтәй.

***Сулпан Уйылданова:*** Тәрбиә эшендә уҡыусыларҙың ыңғай мотивацияһы булырға тейеш, ойошторолған сараларҙа улар теләп ҡатнашмай икән, бындай эштәрҙән әллә ниндәй фәтеүә юҡ. Һуңғы йылдарҙа балаларҙа ватансылыҡ тәрбиәләү маҡсатында "Шайморатов кластары" булдырылды. Уларҙың үҙҙәренең айырым уҡыу пландары, программалары булдырылған, унан һуң бик күп кластан тыш эш формалары ғәмәлгә ашырыла. Музейҙарға йөрөйҙәр, геройҙарыбыҙҙың тормошон, батырлыҡтарын өйрәнәләр, ҡала һәм республика кимәлендәге төрлө патриотик сараларҙа ҡатнашалар. Бындай кластар һәр яҡтан алдынғы булырға тейеш. Был - тормошсан проект.

**Заманында кешеләрҙе коллективизм рухында тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүленде, хәҙер һәр кем үҙ мәнфәғәттәрен алғараҡ ҡуйып йәшәргә күнегеп китте. Шул уҡ Белорет компьютер мәктәбе етәксеһе Геннадий Хазанкин үҙе уйлап тапҡан "Вертикаль белем биреү" методикаһына ярашлы, олораҡ, алғараҡ киткән балаларҙы бәләкәйерәк класс уҡыусыларына шәхси етәксе итеп тәғәйенләп, уҡытыу-тәрбиә процесына йәлеп итә алды. Уҡыусыларҙы үҙҙәре өсөн генә түгел, коллектив өсөн дә яуаплылыҡ тойоп йәшәргә өйрәтеп буламы?**

***Сулпан Уйылданова:*** Гимназиябыҙҙа өлкән класс уҡыусылары үҙ теләктәре менән "Осҡон" тип аталған ойошмаға инә ала. Уларҙың лидерлыҡ сифаттары ла һәйбәт үҫешкән. Улар ҙа бәләкәйерәктәрҙе үҙҙәр белгән байтаҡ ҡына нәмәләргә, мәҫәлән, юл ҡағиҙәләрен нисек үтәргә, янғындан һаҡланыу сараларына өйрәтә. Элекке вожатыйҙар кеүек, тәнәфестәрҙә балаларҙы уйнаталар, уларҙы төрлө сараларҙа ҡатнашыуға әҙерләйҙәр.

***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Беҙҙең лицейыбыҙҙа ла уҡыусыларҙың үҙидаралығына иғтибар ҙур. Һәр кем ғүмере буйына кешеләр менән эшләй, шуға күрә уҡыусыларҙы башҡалар менән дөрөҫ итеп идара итергә өйрәтеү файҙалы. Уҡытыусыларға, класс етәкселәренә төрлө сараларҙы ойошторғанда уҡыусыларҙың үҙҙәренең әүҙемлегенә булышлыҡ итә. Бәләкәй кластарҙа уҡығандар өсөн үҙидара эшен алып барыусы өлкәндәр һәйбәт өлгө булып тора.

**Киләсәктә һеҙҙең мәктәпте тамамлап сығыусылар араһында Башҡортостан, Рәсәй кимәлендә танылыу табасаҡ ҙур шәхестәр булырына өмөт итеп буламы?**

***Шәмсулла Хәбибрахманов:*** Шәхсән уҡыусыларыбыҙҙы үҙебеҙҙең балаларға, ейәндәргә тиңләйем. Тормоштарындағы яҡшы ҡаҙаныштары тураһында ишетһәм, ихлас ҡыуанам. Элекке уҡыусыларыбыҙҙың һорауҙары килеп сыҡһа, беҙгә мөрәжәғәт итәләр, мөмкин булғанса ярҙам итәбеҙ. Киләсәктә уңыш ҡаҙанғандар үҙҙәренең тыуған мәктәбен тамамлағандарға туғандарса ярҙам итешһендәр, уларҙы ла күтәрмәләһендәр ине тип уйланғаным бар. "Йәш эшҡыуарҙар"ыбыҙ араһынан киләсәктә миллионерҙар үҫеп сығып, шуларҙың йөҙләбенең һәр береһе үҙ мәктәбенә берәр миллион аҡса күсерә ҡалһа, лицейыбыҙҙың даны бар донъяға таралыр ине, тип хыялланам.

***Сулпан Уйылданова:*** Киләсәктә лә уҡыусыларыбыҙ араһынан бар яҡтан уңышлы шәхестәр үҫеп сығасағына һис бер шик юҡ. Һәләтле балалар күп бит, теүәл һәм гуманитар фәндәр өлкәһендә, технологияларҙа, спортта, сәнғәттә, әҙәбиәттә һәм башҡа өлкәләрҙә ҙур шәхестәребеҙ буласағына ышанабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Педагог һәм табип һөнәрҙәрен иң мәрхәмәтле эшмәкәрлеккә тиңләйҙәр. Ни эшләп шулай булмаһын ти: улар балаларға, кешеләргә үҙ йөрәктәрен биреп йәшәүселәрҙән бит!**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Барыһы ла йола ҡушҡанса, туғандарының ризалығы менән башҡарылғайны кеүек. Ә ниңә һуң күңел кәнде урынында түгел. Нимәләр күрәгенсә эшләнеп бөтмәгәндәй, ҡайҙалыр яҙа баҫылған һымаҡ.**



Ҡасан, ниндәй хата ебәрҙе һуң әле Ҡул? Фәнзил йоҡлап китә алмаҫын белгәнгә, йоҡа юрғанын һаҡ ҡына ҡайырҙы ла, аяҡтарын ипле генә янырак икенсегә буялған һалҡынса иҙәнгә төшөрөп, урынынан ҡалҡынды. Йәнәштә ҡатыны ла тыныс түгел, ара-тирә тертләп ҡуя, әммә йоҡлай. Башҡалар ҙа инде нисәмә көн, төнгә ялғанып һуҙылған ҡайғылы мәшәкәттәрҙән, ниһайәт, арынып, борсоулы төштәр донъяһына сумған. Кемеһелер ауыр һулап ҡуя.

Фәнзил, трикоһын һәрмәп алып, сығыуға табан йүнәлде. Ярай әле ишек шығырламай. Иҙән таҡталары ла шыплап, йыплы һалынған. Берәүһендә генә ҡытырлау бар. Мырысының йорто был. Ул таҡтаны ҡаланан ялға ҡайтҡанында өмәлә ҡатнашҡан Фәнзил үҙе һалғайны. Еренә еткереп эшләй алмаған. Көндәҙ түгел, төндә лә баҫмай ул уға. Әммә башҡалар шытырлатып үтһә, үҙ-үҙенә йәне көйөп ҡуя. Бер нисә тапҡыр ике-өс урындан, өҫтәп, сөй ҙә ҡағып ҡараны. Юҡ шул: әллә һалғанда уҡ ҡалтайған таҡта эләккән, әллә аҫтындағы урҙа тейешенсә юнылмаған. Ахырҙа, ҡул һелтәне. Әле ир уны ашатланы ла, ишекте тауыш-тынһыҙ асып, иркен солан аша тышҡа сыҡты.

Йондоҙҙар, сағыулыҡтарын юғалтып, ағара башлаған. Шулай ҙа таңға иртәрәк әле. Өсөнсө әтәстәр яр һала башлар алдынын ғына була торған үтеп барған йәйҙең һил иртәһе. Фәнзил мейеһен тынғыһыҙлаған һорауҙарға яуап табырға теләгәндәй, ҡойроғон көнсығышҡа ҡарай бора башлаған Етегән йондоҙлоғон барланы.

Барыһы ла йола ҡушҡанса, туғандарының ризалығы менән башҡарылғайны кеүек. Мәрхүмде төнөн һаҡлағанда ла, иртән йыуғанда ла, табутты күтәреп, ауыл аша үткәндә лә (машинаға һалмайыҡ, иңебеҙҙә генә һуңғы юлына оҙатайыҡ, тинеләр), ләхеткә төшөргәндә лә, доғаһы уҡылды, хәйерә өләшелде. Быларҙың бөтәһе лә һүҙһеҙ генә Фәнзилдең ым-ишараһы, мулланың кәңәш-төңәшле күрһәтмәләре буйынса атҡарылды.

Ә ниңә һуң күңел кәнде урынында түгел. Нимәләр күрәгенсә эшләнеп бөтмәгәндәй, ҡайҙалыр яҙа баҫылған һымаҡ. Әйтерһең, үҙе лә һиҙмәстән, һис нисек төҙәтеп була алмаҫтай хилафлыҡ ҡылған...

* * *

Үткән төн, инде йоҡоға талғасыкәс, телефон шылтыраны: бер туған ҡустыһы баҡыйлыҡҡа күскән. Ауырый ине шул. Эскелеккә бирелеп, бауырын эшлектән сығарғайны. Ә бит береһенә икенсеһе етә килгән алты малай, ике ҡыҙ булған ишле ғаиләлә таҙалығы буйынса иң айырылып торғаны, беләккә лә ҡеүәтлерәге, үҙе килә һынһыпаты менән ҡойоп ҡуйғаны ул - Әмир ине. Туҡта! Унуң игтибар үҙегенә әйләнә барыуы үҙен юғалтыуға этәрмәнеме, ә һиндә көнсөллөк тойғоһо уятманымы икән? Улай тиһән, Фәнзил һәр ваҡыт ағай урынында ҡалырға тырышты. Ығыш-тартыш сыға ҡалһа, атаһы ла әйләнгән һайын әйткеләр ине: "Ҡуй, улым: һин ҙурһың бит. Еңмеш ендем, тиер, яҡшы ҡуйҙым, тиер. Үҫә төшкәс, үҙе аңлар әле..." Кемдең яҡшы булғыһы килмәһен! Юл ҡуя килде бит гел генә. Шулай ҙа бер мәл Әмиргә хасльҡ кылды...

Фәнзилгә ун ике-ун өс, мыртыйына туғыҙ-ун тирәһе булғандыр. Үҙҙәренә ҡойо ҡаҙырға булып киткәйнеләр. Нәгеш эсерлек ине әле ул заман. Әммә һыуалғыс алыҫыраҡ. Сирек саҡрым самаһы. Яры ла бейек. Етмәһә, текә. Айырыуса ҡыш көндәре ҡыйын. Көнөнә илле литрлыҡ ике-өс флягә китеп кенә тора. Ҡойоһоҙ булмай. Күршеләр ҙә, мәшәкәтһеҙ йөрөһөн, тип, ҡойма тышына ҡаҙырға уйлаштылар. Эҫе йәйге көн. Абзылары оҙаҡламай өлгөрәсәк ҡойоға бура мәшәкәттәре менән урманға киткәйне. Фәнзил менән Әмир генә ҡалды. Төп ҡоралдары көрәк. Биш-алты аршин самаһы тәрәнлеккә етеләр. Шунын урталығында, туп-тура аҫҡа төшә барыусы соҡор мөйөшөндә, иңе-буйы ике аршиндай булырмы, төптән ырғытҡан балсыҡты ҡабул итеп, өсҡә ташлап торорҙай урын ҡалдырылған.

Фәнзил ана шул урталыҡта. Әмир, еңмешләнеп, иң аҫҡа төштө. Һыуҙы, йәнәһе, башлап ул күрәсәк. Һыуға еткәнсе әллә нисәмә тапҡыр кәзә майын һығыласаҡ. Аталарының самалауынса, йәнә ошо тиклем ҡаҙырға кәрәк әле.




Еңелсәрәк алған йәбешкәк һарғылт мәтене Әмир ҡырҡа көрәге менән ағаһының аяҡ аҫтына ырғыта. Унуң икеөс һелтәгәнен Фәнзил һосҡо көрәгенә бер генә һыпыра ала ла, өсҡә ташлай. Ҡустыһы ҡаҙғылаған арала, мәтенән бармаҡ башындай йомарлаҡ әүәләп, тегенең елкәһенә төшөрә. Әмир башта, балсыҡ былай ғына төшәләр тип, иғтибарламаны, аҙаҡ һиҙеп ҡалды ла, ыуалып ваҡланған балсыҡ төйөрсөктәрен көрәгенә тултыра алып, Фәнзилдең битенә етерҙәй итеп, һирпеп ебәрҙе. Тик аҫтағының мөмкинлеге сиклерәк шул. Етмәһә, Фәнзил, Әмир эргәһенә төшөрөлгән баҫҡысты тартып алды ла, үҙе өсҡә үк күтәрелеп, әйҙә, хәҙер дилбегә буйы бейеклеккә ырғытып ҡара инде тип, китте лә барҙы. Тегеһе лә инде, әҙерәк кенә сыҙап ултырһа, ни булған. Яндырай! Ағаһы, ул-был итеп, айран һыулап алып сыҡҡансы, ҡойоға әйләнәсәк соҡор ҡырынан күтәрелеү өсөн уйымдар соҡой башлаған. Үҙе бейеклегеләй күтәрелеүен дә күтәрелгән, әммә, кире мәтәлләп, аяғын имгәткән. Фәнзилгә атаһынан ныҡ эләкте, әммә мырысының йәшле күҙҙәрен күреүҙән йәненең әҙгөләнеүе яҙаның иң ҡатыһы булғандыр... Ҡара инде, күптән онотолоп бөткән малай саҡ шуҡлығы, бөгөн (ниндәй мәлдә бит әле!), бәгерҙе телеп, иҫкә төшә.

Эшкә сымыры ине Әмир. Фәнзилгә ҡарағанда таһыллыраҡ та булғандыр. Шуға атаһы уны йөк тейәгәндә лә, кәбән ҡойғанда ла, гел башҡа ҡыуыр ине. Унаһы күбәләй бесәнде, һәнәгенде батыра сәнсеп, йәнтәслим өсҡә ырғытыу түгел, әммә оҫталыҡ кәрәк: йөгөн, һалыулап, ауырлыҡ булмаһын, кәбәнең елгә лә бирешмәһен, һыу ҙа үткәрмәһен - ҡай яҡтан ҡарағанда ла ҡурсаҡтай ултырһын. Ул ҡойған кәбәндәр башҡаларҙыҡынан айырылыңҡырап тора торғайны: күркәклерәк тә, бейегерәк тә. Көҙгө ямғырҙарға ла бирешә һалып бармай.

Буш ваҡыт эләккәндә Фәнзил китапҡа өңөлһә, Әмир ниндәйҙер ҡул эше таба: ағастан ниҙер юна, быса, осталай. Һырғалаҡ эйергә еңелсә бәләкәйерәк санаһы ла үҙе әтмәлләп алды. Атаһы ярҙам иткеләнә иткеләүгән, әммә күбеһен барыбер ҙә үҙе булаштырҙы. Фәнзил, китабынан айырылып, унуң эшен ҡарап ала ла: "Санаңды йәшелгә буя, - тип көлә. - Эт егерһең, зәңгәр дуға тағырһың..." Тегеһе ишетмәмеш. Был да, бер башлаһа, ҡуя белмәй: "Теге үргә ос, ҡамыт аяҡ Фатиманы һората барырбыҙ!.." Был тиклемен инде Әмир күтәрә алмай - аяҡ аҫтындағы ағас ҡисәгән ағаһына елгәрә... Сама белмәй шаяртҡан шулай ҙа. Тағы ла ниҙер йөрәкте семетеп үтә...

Малайлыҡ шуҡлыҡтары тиһең дә ул... Үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡас та нимәләрҙер булды. Бигүк күҙгә бәрелеп тормаһа ла күңел төпкөлөндә һыйырташтай ятҡан нәмәләр бына ҡасан ҡалҡып сыға! Әсәйҙе һуңғы юлына оҙатҡас, иң яҡындар араһында атай нигеҙенә бәйле һүҙ ҡуҙғалды. Аталары баҡыйлыҡҡа күскәс, иркен ихатала Әмир үҙенә шыңғырлап торған ҡарағайҙан ғына айырым өй күтәрҙе. Өлкән ике ағалары, ауылдан йәшләй үк сығып киткәнгә, йорт-ҡаралтынан күптән һыуынғайны. Уларға етәһе нефтсе Кәбир ҙә, туғандар ни әйтһә, шуға ризалашасағын аңғартты.

- Уйлашайыҡ, - тине Фәнзил, ә үҙе эстән генә үҫеп килгән ике ҡыҙлы ғаиләне менән ятаҡта йәшәп ятыуын, бисәһенең көн дә тиерлек айырым фатир тураһында игәүен хәтерләне. Атай йортон һатып ебәргәндә уға ла күпмелер өлөш тейер ине бит. Иш янына ҡуш тигәндәй.

Һүҙгә ошоғаса тауыш-тынһыҙ ғына һыуып бөткән сәйен балғалағы менән болғаштырып ултырған Зәбир ҡушылды. Ул да, Әмир һымаҡ, ауылда төпләнеп, йомрандар осона нигеҙ ҡорғайны.

- Абзыҡайҙар! Һеҙ күптән ҡала кешеһенә әйләнеп бөттөгөҙ. Онотҡанда бер ҡайтҡан кеше булаһығыҙ. Ҡунаҡҡа!.. Бында нимәһен күп сурытып торорға? Беләһегеҙ: минең мал ишейҙе. Был әйҙә күсереп, һарай итәйем.

- Һин нимә! - ҡапыл ғына ҡыҙҙы ла китте Әмир. Хатта урынында ултырып сыҙамайынса ырғып торҙо. Шатырлап ултырғысы ауып китте. - Атай йортон мал һарайы итмәксеһеңме? Сәңгелдәгебеҙ бәүелгән дүңгәләккә мырҡылдаҡтарыңдың түшкәһен аҫмаҡсыһыңмы? Әсәй ауырып ятҡанда уҡ бер танаһы етәкләп алып сығып китеүең етмәгән! Башҡа кәрәк-яраҡты күпме һәрмәнең...

- Ярай, әҙәм көлдөрмәйек, - Кәбир, ҡалҡынып, аунап ятҡан ултырғысты торғоҙҙо, Әмирҙең яурынынан ҡаҡты. - Ҡыҙма! Ни әйтһәң дә хаҡың бар һинең - беләбеҙ. Атай-әсәйҙе, күбеһенсә, һин ҡараның. Нигеҙҙе лә һыуытмайһың. Һин ни тиһәң, шулай булыр. Дөрөҫ әйтәһең: атай йорто - ҡаралты ғынамы ни ул! Ул бит беҙҙең бала саҡ!..

Кәбирҙең тауышы ҡалтыранды, Себер елдәренән ҡырыҫланған сырыш бите буйлап ағып киткән йәштәрен тыя алмайынса, йөҙөн ситкә борҙо.

Фәнзил, иш янына ҡуш була тип, бәпләгән өмөтөнөң иреп юҡҡа сыға барыуынан айный алмайыраҡ ултырған бер арала, туғандар атай йортон һаҡларға ҡарар ҡылды: атай йорто һатылмай! Былай ҙа йыл әйләнәһенә, йәй мәлендә әйтәһе лә түгел, береһе китһә, икенсеһе ҡайта йөрөйҙәр. Балалар ҙа, ауыл тиһән, йығылып бара. Әмиргә лә туғандар өсөн айырым өй тотоуы йәплерәк булыр...

Хаҡлы булған Әмир. Ергә, нигеҙгә яҡынлыҡ иң сетерекле мәсьәләне лә дөрөҫ хәл итергә булышҡа, күрәһең. Тик был яҡынлыҡ - күк барлығын, ә унда йондоҙҙар балҡыуын оноттормаһын икән. Ана Зәбир нишләне? Малынан башҡаны күрмәй. Әмир атай-әсәйҙе лә тәрбиәләне, туғандарҙы ла ҡайғыртты. Тик бына үҙен... Һе, ҡара һин, иң сеймәлсек һорауға яуапты мәрхүм табыша!

Ҡулға оҫта ине шул Әмир. Егет ҡорона инер-инмәҫтән ишек-тәҙрәләр уйырға, янаҡ һырырға, ҡапҡа эшләргә йөрөтә башланылар. Һөйләшелгән хаҡынан тыш күңеле булған хужа әсемәсеһен дә сығара. Ниңә шул мәлдәрҙә үк, ағай буларак, ҡаты итеп һөйләшелмәне икән?..

Әйтештереү булғыланы булыуын да. Тик, хәҙер килеп уйлаһаң, исем өсөн генә һөйләнелгәндер һымаҡ. Күпме китап саны йоттоң, аҡ ҡағыҙға тексәйеп, күҙлек кейә башланың, ә йыйған ғына белемең туғаның менән аңлашыуға ла етмәгән! Эх-х!.. Уҡыйым, кеше булам, урында эшләйем, имеш. Уҡыманың түгел, уҡының инде, уҡының. Нимәләр ирештең дә. Хәҙер башҡаларҙы уҡытаһың, аҡыл өйрәтәһең... Әммә иң яҡыныңды һәләкәттән ҡурсалай алманың. Ғилем - ҡорал, йәнәһе. Ә ниңә шул ҡоралың көндәлек тормошҡа яраҡһыҙ булып сыға? Ябай һорауҙарға ла яуап табыша, төйөндәрҙе сисешә алмағас, ҙурҙан ҡубып уйланғанда унуң нимәгә хәжәте бар? Урында эшләй берәү! Йәне телөгән һөнәрҙе тапҡан. Бар ваҡытын кешелектең иң бөйөк аҡыл эйәләре туплаған аң-белем дарьяһын ҡоласлауға сарыфлай, ә эргәһендәгеләрҙең ни менән йәшәүен белмәй. Әллә белмәмеш-күрмәмешме?

Ҡайҙа ғына хата ебәрелде һуң?

Бер үҙең генә бәләләрҙән ҡотолорға тырышыу, хәҡиҡәт эҙләп маташыу мәғәнәһеҙлек микән ни? Әсәй-мәрхүмәм әйтер ине: "Тирә-йүнем яу булһа ла, өйөм эсе һау булһын!" Әсәйем бит быны туған-тыумасаның бер төптән булып, күңел бөтөнлөгән һаҡлап йәшәргә тейешлеген күҙаллап әйткән. Бөгөн килеп һинең күңелең бөтөн түгел. Шундай көндә ниндәй күңел бөтөнлөгө булыуы мөмкин һуң? Әллә намыҫ таҙа булғанда ҡотолғоһоҙ ҡайғылар, әҙәм иңен иңкәйтер, билен биртендерер ауырлыҡтар ҙа еңелерәк үткәреләме?

Ә дин үткәргән ҡотолғоһоҙлоҡ фәлсәфәһе, маңлайҙарға яҙылғаны хаҡында ни әйтерһең? Һәр кемдең алдан билдәләнгән үҙ яҙмышы... Әлегә мәлендә арҡаланырға бик ҡулай... Юҡ, бында ниндәйҙер үҙ-ара тығыҙ бәйләнешле ҡапма-ҡаршылыҡ бар, күрәһең. Бер яҡтан, ысынлап та, әҙәм балаһы үҙ юлын үҙе үтә. Эйе, үҙе үтә. Тик яңғыҙ үтмәй ҙә баһа ул был юлды. Эргәһендәгеләр менән бергә үтә. Тимәк, нисек үтеүҙәлер, бәлки, бөтә хикмәт? Һайлай алыу мөмкинлеге лә тап ана шул нисек йәшәүгә барып тоташмаймы икән? Кешене - Хоҙай ялғыһы итеп ҡабул итергә лә, донъялыҡты тотоп тороусы камиллыҡҡа ынтылып йәшәргә кәрәктер? Ҡулыңдан килгәнсә, мохтаждарға ярҙам итеп...

Бына бөгөндән Әмирҙең ике улына терәк кәрәгәсәк. Улар өсөн атай урынына ҡалдың хәҙер. Атай урынында! Мыртыйың менән һинең бала сағыңды ҡабатлаған һымаҡтар бит әле, етмәһә. Тимәк, матди ярҙам менән генә тынысланып булмаясаҡ. Рухы һынғандарҙың, йәне һыҙланғандарҙың хәленә инә алыу, уларҙың нилектән үрһәләнеүҙәрен аңлап, бергәләп, был аяуһыҙ донъяла әҙәмсә йәшәй алыу юлдарын табышыуҙыр, бәлки, иң кәрәге? Һорамайынса. Йөрәгең ҡушыуы буйынса... Хәтерләйһеңме, хатта һирәк-мирәк ҡайтҡан саҡтарында ла, асылып китеп, Әмирҙең һорауҙар ҡуйыртҡан мәлендә өҫтән-мөҫтән генә яуаптар биреп сикләнә торғайның. Эскән кеше менән ни тураһында һөйләшәһең, йәнәһе. Ә бит ул күңелен аҡтарып һалырға, еңел булмаған уйҙары менән уртаҡлашырға теләгән!

Ни әйтһәң дә һуң инде хәҙер... Үҙеңде ҡайыҙлауҙан ни фәтеүә лә, ни мәғәнә?

Һе! Йәнеңдең үрһәләнеүе, үҙ-үҙеңде ҡайыҙлауың ана шул мәғәнә эҙләүҙән түгелме ни? Үткәнеңдән фәһем дә ала белмәһәң, әле генә уйланған камиллыҡҡа нисек ирешерһең?

* * *

Көнсығыш һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә асыҡлана, буғай: урманлы тауҙар һырты төҫмөрләнә, ана, офоҡ сите аҡрын ғына алһыу төҫкә мансыла, артынса ҡыҙара бара. Ниһайәт, ҡыҙыл шар һыҙаты күренде. Ауыр, ҡараңғы уйҙарҙы ла ҡыуалай түгелме һуң ул? Туғаным өсөн иһә тегендәге ҡараңғылыҡ мәңге яҡтырмаясаҡ! Хәйер, кем генә быны өҙә әйтә ала? Бәлки, уның йәне ошо мәл, киреһенсә, мәңгелек яҡтылыҡҡа осалыр. Моғайын, шулайҙыр. Ә, бәлки, унда ла ниндәйҙер һынауҙар аша үтәлер. Әммә барыбер - ҡасан да булһа - мотлаҡ яҡтылыҡҡа юлланалыр ҙаһа йән тигәнең! Юғиһә, йәшәүҙәрҙең нимәлә булыр ине мәғәнәһе?

Был донъя... Теге донъя... Ни генә беләбеҙ һуң беҙ, тереләр, улар тураһында. Аҡыл эйәһе нисек әйткән әле? Әһә, былай: "Әгәр ҙә беҙ мәғәнәле йәшәү, тейешенсә ғүмер һөрөү тураһында бик аҙ беләбеҙ икән, үлемгә ҡарата нимә генә әйтә алабыҙ һуң?.."

Һинең йәнең миңә рәнйемәһен ине, Әмир! Һине рәнйетеүҙәрем өсөн, ни саҡлы ҡыйын булмаһын, язаһын бында, һинең менән һәр саҡ бергә яланаяҡ йүгергән, тәкмәс атып аунаған, сәңгелдәктәгеләй бәүелткән еребеҙҙә кисерәйем. Һин дә рәнйештәреңде унда үҙең менән йөрөтмә. Йәндәребеҙгә шулай еңелерәк булыр, туғаным. Моғайын, тегендә лә, бында ла йән тыныслығы иң мөһимелер бит.

Иртәгәнән, юҡ, бөгөндән ҡан-ҡәрҙәштәр менән, туғандарса кәңәш-төңәш итеп, нәҫелебеҙ ебен нығытыуҙы хәстәрләрбеҙ. Ә иҙәнеңдәге теге таҡтаны шулай ҙа алыштырып һал һин. Ятмаһын йәнде көйҙөрөп...

*ШУНДАЙ БЕР ФЕКЕР*

***✓ Тормош ҡуласаһы тик һин уйлағанса, һин ышанғанса, һин теләгәнсә генә әйләнмәй шул. "Донъя - ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа". Минеңсә, бер хәйләһеҙ кешеләрҙе ул айырата нығыраҡ баҫа.***

# ХӘЙЛӘҺЕҘ ДОНЪЯ ФАЙҘАҺЫҘМЫ?



**Хәйлә хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡас, Мостай Кәримдең "Карусель" тигән билдәле шиғыры иҫкә төшә:**

**"Әйләнә карусель, әйләнә,**
**Карусель ҡоролған хәйләгә.**
**Осҡаны, сапҡаны, йөҙгәне**
**Һәм ерҙә һөйрәлеп йөрөгәне -**
**Һәммәһе бер тигеҙ елдерә,**
**Ел үҙе уларға юл бирә".**

Шиғырҙың лирик геройҙары - карусель толпарына атланған малай һәм шоңҡарға ултырған ҡыҙ бала, улар балаларса бер-береһенә тартыла. Карусель туҡтай - балалар ергә төшә. Ә шиғыр бик тәрән фәлсәфәүи фекер менән тамамлана: шағир малайҙы дуҫ ҡыҙынан айырылмаҫҡа өндәй, "...сөнки бит Ер шары әйләнә, Ер шары ҡоролған хәйләгә"...

Карусель - ул беҙҙеңсә ҡуласа бит инде. Ә тормош ҡуласаһы тик һин уйлағанса, һин ышанғанса, һин теләгәнсә генә әйләнмәй шул. Шуға күрә ошо хаҡта халҡыбыҙ әйткәнде раҫламай булмай: "Донъя - ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа". Минеңсә, бер хәйләһеҙ кешеләрҙе ул айырата нығыраҡ баҫа.

Башҡорттар - тәбиғәт балалары, барса зиһен-күңелдәре менән тәбиғәткә бирелеп, уға ышанып йәшәүсе ҡәүем. Ә тәбиғәттә хәйлә тигәнебеҙҙең эҙе-еҫе лә юҡ, унда барса нәмә нисек бар, шулай ҡоролған. Бәлки, шуғалыр ҙа, халҡыбыҙ башҡа ҡәүемдәр араһында ябайлығы, киң күңеллеге, ҡунаҡсыллығы, бар нәмәгә лә тиҙ генә ышанып барыусанлығы, хатта ки бер ҡатлыраҡ булыуы менән танылыу тапҡан. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, ошо фани донъяла бер хәйләһеҙ йәшәргә күнеккәнбеҙ. Ә былдай йәшәү рәүеше йыш ҡына тикте юҡтан алданыу, башҡалар мутлығынан зыян күреү менән тамамлана.

Дөрөҫмө, юҡмы, заманында башҡорттоң үтә бай һәм уңдырышлы ерҙәренә хужа булыуҙы көҫәгән килмешәктәр, шул уҡ рус промышленниктары, халыҡты алдаштырып, кешеләргә юҡ-бар әйберҙәр бүләк иткән булып, уларҙың аҫаба ерҙәрен, халыҡ араһында киң таралыу тапҡан ләкәпкә ярашлы, "бер әсмуха сәйгә" һатып алғандар, имеш. Был үҙҙәрен цивилизациялы тип һанаған Европа сәйәхәтселәре һәм сауҙагәрҙәренең урындағы аборигендарға төрлө ялтыраулыҡ предметтар, тимерҙән йә иһә быяланан яһалған әйберҙәр биреп, уларҙың ҡиммәтле нәмәләренә эйә булыуын иҫкә төшөрә.

Үтә хәйләкәр рус заводчиктары ла мутлыҡтарынан арына алмай: Рәсәй хөкүмәте уларға завод ҡороу өсөн башҡорт ерҙәрен һатып алырға рөхсәт итә, әммә улар килешеүҙәрҙә ҡаралғандан бишәр тапҡырға артығыраҡ ерҙәрҙе үҙ белдеге менән тартып ала. Былдай хәлдәр башҡорттарҙың асыуын ҡабарта, чиновниктар уларҙы яҡлашмай, һөҙөмтәлә ихтилалдар ҡуба. Салауат батырҙың атаһы, йорт старшинаһы Юлай үҙ заманың күренекле шәхесе, батша армияһында тоғро хеҙмәт иткән, көмөш миҙал менән бүләкләнгән бай кеше булараҡ билдәле. Әммә заводчиктар уның байтаҡ ҡына аҫаба ерҙәрен һис бер килешеүһеҙ тартып ала. Юлай Аҙналин Өфөгә барып, судлашып та ҡарай, әммә суд яҡлау урынына уға ҙур штраф һала, хатта улы Салауат менән бер нисә көнгә зинданға ябып ҡуя. Шуға күрә башҡорттар Рәсәйгә ҡаршы түгел, ҡомһоҙ батша чиновниктарының законһыҙлығына ҡаршы баш күтәрә лә инде. Әйткәндәй, Салауаттан һорау алған саҡта ул үҙенең тере ҡалған яуҙаштарының береһенең дә исемен атамай, үҙенсә хәйлә ҡороп, тик һәләк булғандарҙы йә иһә хәбәрһеҙ юғалғандарҙы ғына "иҫенә төшөрә".

Әммә кемдер ҡорған хәйлә тоҙағынан ҡотолоу ысулы ла бар, быының өсөн һәр осраҡта аҡыл менән эш итеү фарыз. Бына рус яҙыусыһы Лев Толстой Кәмәлек буйы башҡорттары һөйләгән бер риүәйәт нигеҙендә "Кешеге күпме ер кәрәк" тигән хикәйә яҙған. Уның сюжеты ябай ғына. Бер үтә ҡомһоҙ рус байы башҡорттарҙан нисек итеп булһа ла мөмкин тиклем күберәк ер һатып алырға теләүен белдерә. Башҡорттар үҙ-ара кәңәшләшкәндән һуң байға үҙе күпме теләй, шул тиклем ергә эйә була алыу мөмкинлеге хаҡында белдерә. Бер генә шарт менән: иртән ҡояш сыҡҡандан алып, кисен ҡояш батҡанға тиклем күпме ерҙәрҙе уратып йөрөп сыға ала, ул шул ерҙәргә хужа була. Әммә ҡомһоҙлоҡ байҙы харап итә: ул таң атҡандан ҡояш байығанса бик күп ерҙәрҙе урап сыға, ваҡытында ҡайтып етер өсөн бер туҡтауһыҙ йүгерергә мәжбүр була, ә халыҡ уны көтөп торған урынға килеп етеү менән йығылып йән бирә. Уны ерләр өсөн 3 аршин ер етә, тип тамамлай яҙыусы үҙенең хикәйәтен. Шулай итеп, аҡыллы хәйлә ҡомһоҙлоҡто еңә.

Л.Н. Толстойҙың тағы ла бер фәһемле хикәйәһе иҫкә төшә, ул "Һикереү" тип атала. Диңгеҙҙә йөҙөп барған елкәнле карапта бик хәтәр хәл килеп тыуа: палубала уйнап-һикереп йөрөгән маймыл бер малайҙың эшләпәһен һыпырып ала һәм арҡандар буйлап мачтаға менеп китә. Асыуы килгән малай ҙа маймыл артынан мачтаның иң осона тиклем үрмәләп менә лә, үҙе лә һиҙмәҫтән, мачтаның иң өҫкө арҡыры ағасына килеп сыға. Ул ҡурҡышынан баҙап ҡала һәм бәүелеп тора. Шул саҡта уның атаһы, карап капитаны, улына мылтығын тоҫҡай һәм: "Һыуға һикер, юғиһә, атам!"- тип ҡысҡыра. Малай атаһын тыңлай һәм диңгеҙгә һикерә. Шулай итеп, капитандың аҡыллы хәйләһе малайҙы ҡотолғоһоҙ үлемдән ҡотҡара.

Алама замандар күптән үткән инде, хәҙерге тормошобоҙҙа хәйләләшеүҙең кәрәге ҡалғанмы икән, тип фекер йөрөтөүселәр ҙә барҙыр. Быға яуап бер, уны халыҡ үҙе әйткән: "Хәйләһеҙ донъя - файҙаһыҙ". Тик хәйлә тигәнде тик бер насар сифат итеп ҡарарға ярамайҙыр ул. Хәйлә ниндәй маҡсатта ҡулланыла, шул мөһим. Изге маҡсатҡа өлгәшеү өсөн хәйләләйһең икән, был гонаһҡа һаналмай. Мәҫәлән, бала тәрбиәләгәндә хәйләгә барыу - иң отошло юл. Лев Толстойҙың балалар өсөн яҙған тағы бер хикәйәһен иҫкә алайыҡ, ул "Емеш төшө" тип атала. Ваня исемле малай, әсәһе слива алып ҡайтҡас, бер кем дә күрмәгән саҡта бер сливаны ашап ҡуя. Аш өҫтәле янында йыйылышҡас, атай кеше балаларынан сливаны кем ашауы хаҡында һорай. Барыһы ла, шул иҫәптән Ваня ла, сливаға ҡағылмауҙарын белдерә. Аталары: "Кем слива төшөн йотҡан, шул бер көндән үләсәк", - тигәс, Ваня кинәт кенә: "Ә мин уны форточка аша ырғыттым", - тип әйткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Барыһы ла көлөшә башлай, ә Ваня оятынан илап ебәрә.

Сәйәсәттә хәйлә ҡора белгәндәр алға сыға, әммә бында ла ул ҡоро алдашыуҙан, мутлашыуҙан ғына тормаҫҡа тейеш. Был иң элгәре халыҡ-ара сәйәсәткә ҡағыла, сөнки алдараҡ иҫкә алынған аҡыллы хәйлә ысулы ил мәнфәғәттәрен яҡлау өсөн бик файҙалы. Шулай уҡ криминал донъя менән көрәштә хоҡуҡ һаҡлау органдарына ла төрлө ҡатмарлы енәйәттәрҙе асыу барышында шул уҡ аҡыллы хәйлә методын ҡулланырға тура килә. Бәлки, шуғалыр ҙа, бик күптәр яратып уҡыған детектив жанрындағы әҫәрҙәр бар донъяла киң танылыу таба. Иң юғары кимәлдә хәрби хәрәкәттәр, ҙур хәрби операциялар менән идара итеүсе генералдар һәр саҡта ла дошманды хәйлә ҡороп еңергә тырыша, унан башҡа ҙур алыштарҙа уңыш ҡаҙаныу еңел бирелмәй. Ә уйлап табыу, ниндәйҙер яңы ҡорамалдар конструкциялау кеүек креатив ғәмәлдәр ҙә үҙенә күрә әмәл-хәйлә серҙәренә эйә булыуға тиң.

Шулай итеп, гел тик тураһын ғына һөйләп, бер нисек тә хәйләләшмәй йәшәп тә булмайҙыр. Рус халҡында ла ошоға бәйле бер әйтем булыуын иҫегеҙгә төшөрөү яҙыҡ булмаҫ, тим: "Бер ҡатлылыҡ уғрылаҡтан яманыраҡ". Урлашмайыҡ, алдашмайыҡ, мутлашмайыҡ, әммә хәйлә менән йәшәүҙән дә ваз кисмәйек, милләттәштәр.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠЫҘҘАР ТИҘЕРӘК ӨЛГӨРӘМЕ?

■ Психологтар иҫәпләүенсә, бөгөнгө ҡыҙҙар өләсәләренә ҡарағанда ике йылға тиҙерәк өлгөрә. Уларҙың өлгөрөп етеүенең уртаса ваҡыты хәҙер 10 йәш тә 3 ай тирәһе. Ғалимдар быны бер нисә сәбәбен атай. Беренсенән, ҡыҙҙар хәҙер күпкә ҙурыраҡ көүҙәле. Енси өлгөрөп етеүҙе лептин тип аталған гормон стимулләштерә, ә ул май ҡатламында барлыҡҡа килә. Замана балалары юғары калориялы ризыҡты ла күп ашай, аҙыраҡ хәрәкәтләнә, май запасы күберәк булған һайын лептин кимәле лә юғарыраҡ. Икенсе сәбәп булып стресс тора. Әгәр ҙә өйҙә һәм мәктәптә ҡыҙ баланы конфликттар уратып алған икән, унда боронғо эволюцион механизм хәрәкәткә килә. Унының буйынса, ҡыҙҙың генетик материалы нәҫелгә тиҙерәк тапшырылырға тейеш, шуға ла енси өлгөрөп етеү ҙә тиҙләнә.

■ Генетиктар түбән калориялы алма сорты уйлап тапҡан. Алмағастың япрактарында барлыҡҡа килгән сорбитол һомғоллоҡ өсөн ҡуркыныс булған фруктозаға әүерелә. Ғалимдар ошо процесты туктатып, сорбитол һәм емеш-еләк шәкәре аҙыраҡ булған алма килтереп сығарған. Был алмала 100 грамға 26 ккал ғына тура килә. Ә бының алманың түмәнә йөгөнто яһаймы, юкмы икәнлеге тураһында хәбәр ителмәй.

■ Ғаиләлә ир менән ҡатын ни тиклем йышыраҡ талашһа, уларҙың балалары шул тиклем насарыраҡ йоҡлай, тип белдерә ғалимдар. Үҙ-ара конфликтта булған атаәсәнең балаһы тиҫтерҙәре менән бер үк ваҡытта йоҡларға ятһа ла, йоҡлап китә алмай яфалана, йә насар йоҡлай. Шуға ла улар көндөҙ бер туктауһыҙ йоҡолары килеүгә зарлана. Саҡ ҡына ла йоҡо туймау һөҙөмтәһендә игтибарлылыҡ түбәнәйә, мейе мәғлүмәтте насар эшкәртә, укыуға теләк юғала, тиҙ ҡыҙыусанлыҡ барлыҡҡа килә, тип иҫкәртә табиптар.

■ Лондон университеты ғалимдары баш мейеһенең һандарҙы эшкәртеү менән генә шөғөлләнгән өлөшөн асыҡлаған. Был үҙенсәлекле "калькулятор"ҙы табырға һирәк ауырыу - дискалькулия менән сирләүселәр ярҙамын иткән. Уларға ябай ғына һандарҙы ҡушырға ҡушҡандар һәм магнитлырезонанс сканер ярҙамында "һүнгән" майҙанды тапҡандар. Ғалимдар әлеге ваҡытта был хәүефле булмаған, әммә шулай ҙа унайһыҙлыҡтар тыуҙырған ауырыуҙы дауалау өсөн саралар уйлап табыу өҫтөндә эшләй.

■ Майндағы Франкфурт университеты ғалимдары раҫлауынса, һәр ситуацияла ла асыҡ йөҙ күрһәтергә мәжбүр булған кешеләр сәләмәтлеген хәүеф аҫтына ҡуя. Улар билдәләүенсә, һатыусылар, официанттар, менеджерҙар һәм хеҙмәт итеү өлкәһенә ҡараған башҡа һөнәр эйәләренең иммунитеты насарыраҡ була, улар хроник стресс һәм депрессия менән йышыраҡ яфалана. "Клиент һәр ваҡыт хаҡлы" ҡағиҙәһенең ошондай кире яғы бар, тип иҫкәртә ғалимдар.

■ Ғалимдар атеросклероздан яңы дарыу уйлап тапҡан. Ҡандағы холестерин күләмен түбәнәйтеүсе башҡа дарыуҙарҙан айырмалы рәүештә, яңыһы ҡан тамыры стенаһына ултырған ҡан төйөрҙәрен юҡҡа сығара. Ике йыл дауамында дарыу эсеү ҡандағы "насар" холестерин кимәлен яртылаш түбәнәйтә.

ХӘТЕРКИТАП

**XIX быуат аҙағы - XX быуат башы халҡыбыҙ тарихына ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы осор булып ингән. Нәҡ ошо осорҙа, бер яҡтан, башҡорт ерҙәрен талау, колониаль иҙеү быҒаса булмағанса көсәйеп китһә һәм, шуның һөҙөмтәһе булараҡ, халыҡ сикһеҙ бөлгөнлөккә төшһә, икенсе яҡтан, милли мәҙәниәт, әҙәбиәт, сәнғәт йылдам үҫеш кисерә, йәштәр араһынан бик күп ғалимдар, әҙиптәр күтәрелеп сыға, матбуғатта башҡорт тематикаһы һиҙелерлек яңғыраш ала. Атаҡлы шағир Ғәли Соҡоройҙоң улы Ғарифулла Кейеков эшмәкәрлеге ошо күренештәргә туранан-тура бәйле.**

# ШАҒИР, ТАРИХСЫ, ДИН ӘҺЕЛЕ

Ғарифулла Мөхәммәтғәли улы Кейеков 1861 йылдың 4 апрелендә Өфө губернаһы Бөрө өйәҙе Тәтешле улысының (хәҙер Башҡортостандың Тәтешле районы) Иҫке Соҡор ауылында донъяға килә. Башлангыс белемде атаһының мәҙрәсәһендә алғандан һуң, Шоғай ауылында уҡый, аҙаҡ Ҡаҙандағы Апанаев мәҙрәсәһенә уҡырға инә. 1882 йылда батша армияһына хеҙмәткә саҡырыла. Алты йыл самаһы хәрби фельдшер булып хеҙмәт иткәндән һуң, ул уҡыуын тамамлар өсөн йәнә шул уҡ мәҙрәсәгә бара. Әммә атаһының һаулығы үтә насарайыу сәбәпле, 1889 йылдың көҙөндә уҡыуын ташлап, ҡайтырға мәжбүр була. 1891 йылдың апрелендә Өфөләге Диниә назратында имтихандарҙы уңышлы тапшырғандан һуң, Иҫке Күрҙем ауылына имам-хатип итеп тәғәйенләнә, 1893 йылдың майында иһә Өфө губерна идараһы тарафынан ахунлыҡ дәрәжәһе бирелә. Иҫке Күрҙем ауылына күскәс тә изге Мәккә һәм Мәҙинә ҡалаларына хаж ҡыла, шул уҡ ауылда халыҡтың ярҙамы менән ике ҡатлы мәҙрәсә һалдырып, уҡыу программаһына бик күп донъяуи фәндәрҙе лә индереп, ошо һәм күрше-тирә ауыл балаларына ғилем-мәғрифәт таратыу эшенә тотона. Архив сығанаҡтарында уның рус-япон һуғышы йылдарында яралы һалдаттарға ярҙам фонды ойоштороуғанлығы хаҡында ла мәғлүмәттәр бар. Ғарифулла Кейековтың ғүмер юлы, бөйөк шағирыбыҙ Шәйхзада Бабичтыҡы кеүек үк, бик аянысл тамамлана. Уны ла мулла булған өсөн генә күҙе тонған ҡыҙылармеецтар ҡылыс менән үлемесле йәрәхәтләй, һәм Ғарифулла Мөхәммәтғәли улы 1918 йылдың 19 сентябрендә Сәйтәк ауылы дауаханаһында йән бирә. Уның кәүҙәһен халыҡ ҡәҙерләп Иҫке Күрҙем зыяратына ерләй.



Ғарифулла Кейековтың ижади мираҫы сағыштырмаса бай һәм күп яҡлы. Беҙҙең көндәргә уның ике баҫма китабы, матбуғатта сыҡҡан мәҡәләләре, байтаҡ ҡулъяҙмалары, хаттары килеп еткән. "Гәйн әр-риза" ("Ризалыҡ сығанағы") тип исемләнгән тәүге китабы 1900 йылда Ҡаҙанда баҫылып сыға. Уны Ғ. Кейеков үҙ атаһының тормош һәм ижад юлын яҡтыртыуға арнаған. Күберәк маҡтауға, мәдех йырлауға ҡоролған булыуына ҡарамаҫтан, был китап Ғәли Соҡоройҙоң биографияһы һәм әҙәби эшмәкәрлеген өйрәнеүҙә ҡиммәтле сығанаҡ булып хеҙмәт итә ала. Автор атаһын әҙәбиәткә, китапҡа, яҙыуһыҙыуға мөкиббән бирелгән кеше ине, өйөндә китаптарҙың иҫәбе-хисабы юҡ ине, беҙҙең урман-ирәкте башҡорто араһында ундай кеше һис ҡасан да булмағандыр, тип яҙа, айырым әҫәрҙәренең яҙылыу һәм баҫылыу тарихын бәйән итә.

Ғ. Кейековтың 1903 йылда нәшер ителгән "Диуани сыбъян, йәки Ҡафияти сыбъян" (Балалар өсөн шиғри йыйынтыҡ, йәки Балалар өсөн рифмалар") тигән китабы иһә баштанаяҡ мәғрифәтселек, йәҙитселек рухы менән һуғарылған. Автор үҙенсәлекле шиғри юлдар аша балаларҙы маҡтыуғыс китап, белем донъяһына саҡыра, мәҙрәсәлә ябай халыҡҡа ят булған ғәрәп телендә түгел, ә төрки телендә уҡытыу кәрәклеге тураһында һүҙ йөрөтә. Ошо китабы һәм кескәйҙәргә арналған ҡайһы бер ҡулъяҙма әҫәрҙәре уның башҡорт балалар әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе булғанлығын таныта.

Публицистик яҙмаларында Ғ. Кейековтың донъяға ҡарашы һәм ижад позицияһы тағы ла аныҡыраҡ сағылыш тапҡан. 1909 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан "Шура" журналы уҡыусыларға әҙәби тел хаҡында фекер алышырға саҡырып мөрәжәғәт иткәс, ул беренселәрҙән булып башҡорт теленең хоҡуҡтарын яҡлап сыға. "Тел сабыштырыу" исемле мәҡәләһендә: "Беҙҙең башҡорт тоҡомо тоҡон (тыйнаҡ) ғына халыҡ. Шулай булһалар ҙа уҡыуға бик серкәмдәр (булдыҡлылар)... Мин уларҙың бер аҙ тарихтарын шәкерт сағымда уҡ яҙа башлаған инем. Мәгәр күберәк имеш-маништан ине. Был заманда, руссанан бер аҙ күсергеләй торғас, байтаҡ төптөргә үрелде лә, тас башҡортса ғына булғанға ҡаҙандар мыҫҡыл итерҙәр, тип, баҫтырырға күрһәтә алмаған инем. Бына рәхмәт "Шура" эйәһенә аҫыл телебеҙҙе онотторманҫа, гел шул тел менән ге-

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# АСЫҠ ЙӨҘЛӨ, ӘҘӘПЛЕ БУЛ!



Әҙәпле кеше, тигәндә, беҙ тәртипле, күркәм сырайлы, бөхтә кейемле кешене күҙ алдына баҫтырабыҙ. Әҙәплелек - кешеләрҙең йәшәү рәүеше. Мосолман кешеһенең йәшәү рәүеше гүзәл, күркәм, әхләҡлы булырға тейеш.

Бына ошо әҙәп, әхләҡ, тәрбиә мәсьәләләрендә Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. мосолмандарға матур өлгө күрһәткән. Ул бик тә тәрбиәле, тәҡүә, мәрхәмәтле кеше булған. Хатта уның дошмандары ла Бәйғәмбәребеҙҙең яҡшы сифаттарын таныған. Шулай булғас, беҙгә Бәйғәмбәребеҙгә эйәрергә, уның сөннәттәрен иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Әҙәп, әхләҡ ул кешегә тыумыштан да бирелә, тиҙәр. Әммә ул - ғаиләләге тәрбиә, уҡыу, өйрәнеү аша күберәк ҡаҙанала торған рухи хәл. Бәйғәмбәребеҙ һәр ваҡыт Ҡөрьән - Кәримдә нимә яҙылған, шуны эшләгән. Уның әхләғы - ошо изге китап.

Кеше был донъяға имтихан өсөн ебәрелгән. Тимәк, беҙ көн һайын, һәр сәғәт, һәр минут Аллаһ Тәғәлә ҡаршыһында һынау тотабыҙ. Шулай булғас, ни өсөн байлыҡ, дан-шөһрәт артынан ҡыуырға, үҙең өсөн генә йәшәргә? Мөхәммәт бәйғәмбәр һәр ваҡыт: "Өммәтем, халҡым", - тип йәшәгән. Бигерәк тә әлеге ваҡытта милләтебеҙ, илебеҙ әҙәпле, иманлы, тәртипле кешеләргә мохтаж. Шуға күрә беҙ бер-беребеҙҙе хөрмәтләргә, ярҙам итергә, киләһе быуынға күркәм әҙәп ҡағиҙәләрен өлгө итеп ҡалдырырға тейешбеҙ. Киләсәк бит беҙҙең, ошо быуын йәштәренең ҡулында, тимәк, уларҙың яҙмышын уйлау - беҙҙең вазифа. Әгәр ҙә халҡыбыҙ шулай "йәшел йылан" ағыуына бирешеп, вайымһыҙлыҡҡа бирелеп, йәшәүгә дәртен юғалтһа, киләсәктә ни булыр? Был мәсьәләләрҙе айырым бер кеше генә түгел, ә бөтә халыҡ ҡайғыртырға тейеш. Шул ваҡытта ғына милләтебеҙ сәскә атыр.

Эйе, әҙәп булғанда ғына халыҡтар үҫеш юлынан тайпылмай. Исламдың маҡсаты ла кешелекте түбәнселеккә төшөүҙән һаҡлап ҡалыу. Ислам ингәндең тәүге йылдарын алып ҡараһаң, Аллаһ Тәғәләнең ҡушҡандарын үтәй, тыйғандарынан тыйыла белергә тырышыу мосолмандарҙың йәшәү рәүешен шул тиклем үҙгәртә.

*✓ Автор Рәсәй батшалығы тарафынан башҡорт ерҙәрен йыртҡыстарса талау һәм тартып алыу тураһында бик әсенеп яҙа, ер хаҡындығы 1818, 1823, 1865 йылғы закондарҙы телгә алып, уларҙың колониаль асылын күрһәтә.*



нә һөйләшергә лә, яҙырға ла димләүенә! Хоҙай Тәғәлә һәр илгә бер тел биргән. Беҙгә бүтән тел менән оҫтарып һөйләшергә ник көсәнергә?" - тип яҙа.

Ғарифулла Кейековтың ҡулъяҙмалары әлеге көндә Өфө, Ҡаҙан, Санкт-Петербург ҡалаларындағы төрлө архив һәм китапхана фондтарында һаҡлана. Һикһәненсе йылдар башында ошо юлдарҙың авторына ҡайһы бер ҡулъяҙмаларын һәм фоторәсемен шәхси коллекцияларҙан табыу бәхете тейҙе, аҙаҡ улар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙмалар фондына тапшырылды. Рәсәй Фәндәр академияһының Көнсығыш ҡулъяҙмалары институтында (Санкт-Петербург), мәҫәлән, уның "Тәуарих-и башҡордиан вә әнсаб-и ирәктәүиән" ("Башҡорттар тарихы һәм ирәктеләр нәҫел-нәсәбе") исемле хеҙмәте һаҡлана. Унда автор башҡорт халҡының һәм үҙ ырыуы - ирәктеләрҙең тарихын яҡтыртырға ынтылыш яһай. Ошо һәм Өфөлә һаҡланған ҡулъяҙмаларында ул туған халҡының иң боронғо дәүерҙәрҙәге үткәндәрен үҙ заманына килтереп ялғай.

Ғ. Кейековтың "Башҡорт хаҡында руссанан тәржемә" тигән ҡулъяҙмаһы иһә тарихилыҡ яғынан тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ. Унда автор иң элек Әхмәт ибн Фаҙлан, Иҙриси, Ибн Сәғит, Димашҡи кеүек ғәрәп сәйәхәтселәренең башҡорттар тураһындағы яҙмаларына туҡтала һәм боронғо Башҡортостандың сиктәрен билдәләй. Әйтергә кәрәк, уның тарихи Башҡортостан һәм башҡорт ерҙәренә бәйле фекере хәҙерге ғилми тикшеренеүҙәрҙәге мәғлүмәттәр менән күп йәһәттән тап килә. Артабан Ғ. Кейеков крайҙы өйрәнеүсе рус ғалимдары П.С. Паллас, П.И. Рычков, И.И. Лепехин, М.П. Красильников, С.И. Куренковтарҙың хеҙмәттәренә таянып, башҡорт халҡының уҙған дәүерҙәрҙәге тормош-көнкүреше, социаль-иҡтисади хәле, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, монгол-татар яуына ҡаршы батырҙарса көрәше, Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылырҙан күпкә алда уҡ рус халҡы менән аралашып йәшәүе, алыш-биреш итеүе, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, ҙур батырлыҡтар күрһәтеүе хаҡында тәфсилләп яҙа. Автор шулай уҡ татар тарихсыһы Шиһабетдин Мәржәниҙең "Мостафад әләхбәр фи әхүәли Ҡаҙан вә Болғар" ("Ҡаҙан һәм Болғар хәлдәре хаҡында төрлө сығанаҡтарҙан алынған хәбәрҙәр") китабынан башҡорттарға ҡағылышлы юлдарҙы килтерә һәм ундағы ҡайһы бер хаталарҙы атап үтә.

Ҡулъяҙмала ер мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирелгән. Автор Рәсәй батшалығы тарафынан башҡорт ерҙәрен йыртҡыстарса талау һәм тартып алыу тураһында бик әсенеп яҙа, ер хаҡындығы 1818, 1823, 1865 йылғы закондарҙы телгә алып, уларҙың колониаль асылын күрһәтә.

Беҙҙең көндәргәсә Ғ. Кейековтың бер нисә хаты ла һаҡланып ҡалған. Уларҙың һәр береһе үҙенсә ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле. Мәҫәлән, ул күренекле мәғрифәтсе ғалим һәм әҙип Риза Фәхретдинов менән дә аралашып йәшәгән. Санкт-Петербургтағы Көнсығыш ҡулъяҙмалары институты фондында уның ошо шәхескә 1900 йылдың 7 сентябрендә яҙған хаты һаҡлана. Унда автор, боронғо шәжәрәләр эҙләп, бер нисә ауылға барғанлығы, тик әлегә ыңғай һөҙөмтәләргә ирешә алмағанлығы хаҡында бәйән итә. Шуға ҡарамаҫтан, эҙләнеүҙәрен туҡтатмаясағын, алдағы көндәрҙә тағы бер нисә ауылға юлланасағын хәбәр итә.

1910 йылдың 24 сентябрендә мөфтөй Мөхәмәтйәр Солтановҡа яҙған хаты (ул да Көнсығыш ҡулъяҙмалары институты фондында һаҡлана) айырыуса ҡыҙыҡлы һәм фәһемле. Был ҡулъяҙмала Ғ. Кейеков үҙ осороноң тарихсы-археографы булып күҙ алдына баҫа. Хатында ул үҙенең тыуған яҡтарында ауылдан-ауылға йөрөп, боронғо яҙма ҡомартҡылар йыйыуы, иҫке ҡәбер таштарындағы яҙыуҙарҙы күсереп алыуы, археологик һәм этнографик материалдарға ҡағылышлы белешмәләр туплауы хаҡында бәйнә-бәйнә хикәйәләй. "... 1700-нсы йылдарҙан башлап аҫыралған ҡағыҙҙарҙағы боронғо ғәйрәтле башҡорт бабаларыбыҙ, - тип яҙа ул бер урында, - йәндәрен, тәндәрен вә малдарын аямай, ҡатын, бала-сағаларынан айырылып, ғәриплектә (сит ерҙәрҙә) тир түгеп, Русиә мәмләкәтен (дәүләтен) был көнгәсә һаҡларға ижтиһадтарын (тырышлыҡтарын) хәтергә алған ваҡытта ҡәбер таштарынан вә мәсет стеналарынан табылғандан, ҡағыҙҙарҙа ҡәләм менән, бәғзеһе тирегә яҙылып, әбей батшаның сәстәре менән һаҡланғандан табылған ҡәҙәре күсерелде. Халә (хәҙере), шул башҡорт нәҫеленәнбеҙ, тип дәғүә ҡыла торғандарбыҙ. Уларҙы яд итеү (хәтергә алыу) түгел, күбеһе атаһының атаһын һорағанда белмәгәндәребеҙ ҙә күптер..."

***Күренеүенсә, автор үҙ замандаштары араһында туған халҡының тарихын, ата-олатайҙары исемен онотоп, бөгөнгө менән генә йәшәүселәр күбәйә барыуына бик хәүефләнә һәм әсенә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был хәл әле лә шулай хәүефле ҡала килә, хатта көсәйгәндән-көсәйә бара. Нәҫел-нәсәбен, төп сығышын, тамырҙарын онотҡан кешеләрҙән ниндәй изгелек, мәрхәмәтлек көтөргә була һуң? Манҡорт ул хас та далала тәгәрәп йөрөгән ҡамғаҡ, ҡайҙа ел иҫә - шунда тәгәрәй, нимә ҡушалар - шуны эшләй; тыуған ил, тыуған ер, туған халыҡ - уның өсөн ят төшөнсәләр.***

Мөфтөйгә яҙған хатында Ғ. Кейеков боронғо ҡомартҡыларҙы ентекләп тасуирлай, табылған урындарын тәғәйен атай бара. Мәҫәлән, бер археологик ҡомартҡы тураһында бына нимәләр яҙа ул:"... Яңы Уртауылдың башҡорто Бәҙретдин Баһауетдин улы Ураҙлин Ушыя ауылы тарафындағы Киндергүл юлының Ушыяға барғанда юлдың уң яғында 20 сажин түбәнерәк Фәйзрахман мулланың ерендә әүүәл (беренсе) мәртәбә сирәм алып һөргәндә боронғо бабайҙар аҫарынан (ҡалдыҡтарынан) ҡатындар биҙәге хәсита (бетеү) һымаҡ нәмәләр тапҡан... Ул нәмәләр нәғешлеләр. Йәнә ике киҫәк аҡ гәүһәр бар, йәнә алты киҫәк һары гәүһәр бар, бер киҫәк асыҡ һары, бер ҡараҡан төймә, өс простой төймә һары, туғыҙ асыҡ зәңгәр вә дүрт күк төймәләр, ике быяла, йәнә ике быяла башҡа төҫтә. Бары утыҙ биш даналар..."

Бындай мәғлүмәт бөгөнгө археолог һәм этнографтарҙы ла ҡыҙыҡһындырмай ҡалмаҫ, моғайын. Бәлки ул тарафтарҙа яңынан ҡаҙыныу эштәре ойоштороророғалыр? Ыңғай һөҙөмтәләр булырына һис тә шик юҡ.

Шулай итеп, халҡыбыҙҙың XIX быуат аҙағы - XX быуат башындағы милли-мәҙәни үҫешендә Ғарифулла Кейековтың да тос өлөшө бар. Халҡым, илем, телем тип янып йәшәп, ул күп яҡлы һәм ғәйәт бай яҙма мираҫ ҡалдырған. Ошо мираҫ киләсәктә тағы ла ентеклерәк өйрәнелер, лайыҡлы баһаһын алыр, тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ,**
**филология фәндәре докторы.**

**Ә әҙәпле кешегә ниндәй сифаттар хас һуң? Бына улар:**

Ололарҙы ололау, кеселәрҙе кеселәү.

Ата-әсәне хөрмәтләү.

Етем балаларҙы йәберләмәү.

Исрафҡа юл ҡуймау. Әҙәпле кеше икмәктән ҡойолған валсыҡты ла йыйып ашарға тейеш.

Ашар алдынан да, һуңынан да ҡулдарҙы йыуыу.

Кейемдәрҙе таҙа, бөхтә, матур итеп кейеү.

Дуҫтарыңды хөрмәтләү, кәрәк саҡта терәк-таяныс булыу.

Тоғролоҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, аманат, сабырлыҡ.

Шулай уҡ шишмәләрҙе, йылға-күлдәрҙе ҡарап тороу, юлдарҙы төҙәтеү кеүек әҙәмдәргә файҙалы эштәр өсөн аҡсаһын да, көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәй әҙәпле кеше.

Кеше яңғыҙ йәшәй торған зат түгел. Яңғыҙлыҡ фәҡәт Аллаһы Тәғәләнең булмышы, уға ғына яңғыҙлыҡ килешә. Ә кеше бүтән кешеләр менән даими аралаша, кешеләр менән бергә була, төрлө хәлдәр кисерә. Ҡайҙа ғына булмаһын, берҙән артыҡ булмаған ерҙә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һала торған ҡанундар, ғөрөф-ғәҙәттәр, ҡағиҙәләр барлыҡҡа килә. Ошо аралашыуҙарҙа, һәр кемдең күңеленә хуш килерлек, бер кемде лә ҡыйырһытмаҫлыҡ, рәнйетмәҫлек ғәҙел мөнәсәбәттәрҙе булдырыуҙы талап иткән гүзәл әхләҡ кәрәк.

Быны ҡайҙан табырға мөмкин? Әлбиттә, Ислам диненән. Ғалимыбыҙ Ризаитдин Фәхретдин дә үҙенең нәсихәттәрендә былай ти: "Кешегә мөмкин тиклем үҙенең нәфсеһен насар әхлаҡтан һаҡлау үә яҡшы әхләҡ менән зиннәтләнеү мөһим. Әгәр ҙә әҙәм балаһының күңеле пак, әхләғы төҙөк булһа, Аллаһ Тәғәләгә булған мөғәмәләләрен дә саф күңел, саф выждан менән үтәр".

Сәхәбәләрҙең һүҙҙәренә ихтибар итәйек:

Ғабдулла бин Ғүмәр: "Әхләҡлы әҙәмдәрҙең һүҙҙәре ләззәтле, үҙҙәре илгәҙәк булыр", " Яҡшылыҡ ул - башҡаларға асыҡ йөҙлө, татлы телле булыу".

Ғабдулла бин Ғәббәс:"Аҡыллы әҙәм һөйләйәсәк һүҙҙәрен дә уйлағандан, үлсәп ҡарағандан һуң ғына һөйләр", "Әҙәмдәрҙән камил аҡыл булғаны - ауыр ваҡыттарҙа сабыр итә белеүе".

Әҙәп, әхләҡ тураһында күп миҫал килтерергә була. Ләкин иң мөһиме, уҡыным да оноттом түгел бит, ә уҡыған, өйрәнгәненде үҙеңдең тормошоңда ҡулланыу.

Күркәм әҙәп, камил әхләҡ беҙҙең халҡыбыҙҙың, рухи тормошобоҙҙоң нигеҙе булып торорға тейеш. Үҙебеҙҙе гүзәл әхләҡта тәрбиәләйек, киләсәк быуындарға аманат итеп ошо әҙәп, әхләҡ ҡағиҙәләрен һаҡлайыҡ.

**Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Әберсә турғайы

**(Зеленая пересмешка)**



Турғай һымаҡтар төркөмөнә ҡараған был ҡош төйөт кеүек үк, әммә тауышы тупаҫыраҡ, баш формаһы йоморо һәм суҡышының нигеҙе киңерәк. Килейектән айырмаһы шунда: ҡашы асыҡ төҫтә. Һайрағанда башын артҡа ташлай.

Әберсә турғайы төйөттәрҙән кәүҙәгә ҙурыраҡ һәм түше асыҡ һары төҫтә. Был бигерәк тә уны аҫтан күҙәткәндә яҡшы күренә. Кәүҙәһенең өҫкө яғы йәшкелт-күгелйем, ҡашы асыҡ һары. Тәпәйҙәре күгелйем ҡара.

Республиканың бөтөн төбәктәрендә лә бар, яҡты урмандарҙы, айырыуса ҡайын-уҫаҡ үҫкәнен ярата.

Үҙенең йыры менән иғтибар үҙәгендә. Тыңҡау тауышы - морон эсе менән йырлауы ҡабалан кеүек тойолһа ла, унда "һүҙҙәр" айырым асыҡ ишетелә һәм улар төрлө булыуы менән хайран итә. Ошо "һүҙҙәр" араһында "ти-ти-хий" һымағыраҡ ҡысҡырыуҙар 2-3 тапҡыр ҡабатлана. Әберсә турғайы башҡаларҙы яҡшы эләкләй, уның һайрауында башҡаларҙың йыры ла сағылып ҡала. Шулай ҙа уның үҙенә генә хас йыры бар: "ти-ти-хий". "Веет", "трэк" йәки "це-це-тетевин" тип ҡысҡырыуынан танырһығыҙ.

Ҡайын туҙынан һыҙырып алып, бик нескә итеп оя үреп ҡуя.

## Сырҡылдаҡ турғай

**(Северная бормотушка)**



Түше - аҡ, арҡаһы көрән-һоро, ҡашы асыҡ төҫтә. Ныҡ ваҡ ҡош, ул башлыса аҡландарҙа, иген баҫыуҙары ситендә үҫкән ҡыуаҡлыҡтарҙа, һыу буйында бейек булып үҫкән сүп үләне араһында осрай.

"Сырҡ-сырҡ" тип төрлө варианттарҙа ҡысҡыра, был хатта кеше һөйләнгән кеүек тә ишетелә.

Сырҡылдаҡ турғай бөтөн ерҙә лә бар. Беҙ уны Шүлгәнташ эргәһендә Ағиҙел буйында, Саҡмағош районында, Балаҡатай һәм Аҡкүл дәүләт заказниктарында күргәнебеҙ булды.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 13 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 1.20, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45 Д/ф "Первый отряд космонавтов". [12+]
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 23.00 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Эль Русо". [16+]
0.20 "Время героев". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Алла-такси. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Хор". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Навигатор истории. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. Дети. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Буракаевские чтения. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Д/с Города-герои. [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**23.45 Х/ф "Совесть". [16+]**
**2.00 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 14 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 23.00 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Эль Русо". [16+]
0.20, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Алла-такси. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Хор". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль). КХЛ. Плей-офф. Матч 4.**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль). КХЛ. Плей-офф. Матч 4. [12+]**
**2.00 Спектакль "Райса + Файзи". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 15 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.25 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Эль Русо". [16+]
23.45 Д/ф Премьера. "Своя чужая кровь". К 100-летию Национального медицинского центра гематологии. [12+]
0.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Алла-такси. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Хор". [16+]**
**11.00, 21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 20.15 Материнство и детство. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Ап-асыҡ. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Куркуль". [16+]**
**1.45 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 16 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 23.00 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Эль Русо". [16+]
0.20, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 3.15 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Алла-такси. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 "48-й Московский Международный кинофестиваль. Торжественное открытие".
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Хор". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Полезные новости. [12+]**
**17.15 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.20 Хоккей. "Локомотив" (Ярославль) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. Плей-офф. Матч 5.**
**0.30 Хоккей. "Локомотив" (Ярославль) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ. Плей-офф. Матч 5. (. [12+]**
**2.30 Спектакль "Караул, тещу украли!". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 17 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45, 1.55 "Сегодня вечером". [16+]
23.45 "Голос". Новый сезон. Прямой эфир. [12+]
2.30 Х/ф Премьера. "Братья по нотам". [16+]
4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". [12+]
0.10 "Истории Большой Страны". [12+]
1.10 Х/ф "Слепой расчёт". [16+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Навигатор истории. [12+]**
**10.15 "Йома". [6+]**
**10.50 Международная образовательная акция "Диктант по башкирскому языку".**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Материнство и детство. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры". [12+]**
**21.15 Формула здоровья. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Приключения экспоната". [12+]**
**1.30 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**3.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**3.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 18 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Крылья "Современника". [12+]
11.10 Д/ф "Когда меня не будет...". К 60-летию со дня рождения Сергея Пускепалиса. [12+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Рокот космодрома". [12+]
13.15 Т/с "Шифр". К 60-летию со дня рождения Сергея Пускепалиса". [16+]
15.20 Т/с "Шифр". [16+]
17.30, 18.20 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Голос". Новый сезон. [12+]
21.00 "Время".
21.35 Весенние игры "Что? Где? Когда?". [16+]
22.45 Премьера. "Команды". [16+]
23.45 Д/ф Премьера. "Николай Гумилёв. Дочитавший "Илиаду". К 140-летию со дня рождения поэта. [12+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Тонкая нить". [16+]
0.40 Х/ф "Встречная полоса". [12+]
4.06 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 "Весело живем!" [12+]**
**8.30 Формула здоровья. [12+]**
**8.45 Хазина. [6+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Преград. Net. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.45 Х/ф "Наследники". [16+]**
**2.15 Спектакль "Бесприданница". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 19 АПРЕЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.25 Д/ф "Своя чужая кровь". К 100-летию Национального медицинского центра гематологии. [12+]
15.30 Х/ф "Инспектор ГАИ". К 85-летию Сергея Никоненко". [12+]
17.00 Д/ф "Ванга. Пророчества". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "Леонид Агутин. Подарок папе". В концерте Лев Лещенко, Анжелика Варум, Олег Газманов и другие. [0+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.20, 1.35 Х/ф "Мы всё равно будем вместе". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Весёлые ребята". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 Ат уйнатып! [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асыҡ. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Формула здоровья. [12+]**
**16.30 Преображение. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Спектакль "Алима или свадьба старика Мырдаша". [12+]**
**19.30 Полезные новости. [12+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Концерт Венеры Рахматуллиной. [12+]**
**0.45 Х/ф "Огни Большой Деревни". [16+]**
**2.15 Спектакль "Часы с кукушкой". [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Апрель (Шәүүәл - Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (25) дүшәмбе | 4:29 | 6:19 | 13:30 | 17:59 | 20:13 | 22:03 |
| 14 (26) шишәмбе | 4:26 | 6:16 | 13:30 | 18:01 | 20:15 | 22:05 |
| 15 (27) шаршамбы | 4:24 | 6:14 | 13:30 | 18:02 | 20:17 | 22:07 |
| 16 (28) кесе йома | 4:21 | 6:11 | 13:30 | 18:03 | 20:19 | 22:09 |
| 17 (29) йома | 4:19 | 6:09 | 13:30 | 18:05 | 20:21 | 22:11 |
| 18 (1) шәмбе | 4:17 | 6:07 | 13:30 | 18:06 | 20:23 | 22:13 |
| 19 (2) йәкшәмбе | 4:14 | 6:04 | 13:30 | 18:07 | 20:25 | 22:15 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАҠСА

# ТӘҘРӘ ТӨБӨНДӘ...



**Март, апрель айында һәр баҡсасының тәҙрә төбөндә борос, томат, баклажан шытып сыға башлағандыр, моғайын. Өйҙә үҫкән үҫентеләрҙе пикировкалау ҙа төп этаптарҙың береһе булып тора. Бына ошо "пикировка" тигәне нимә һуң ул? Баҡтиһәң, мотлаҡ тип иҫәпләһә лә, күптәр уны дөрөҫ башҡармай икән.**

Пикировка - ул үҫентене күсереп ултыртыу. Башлыса барлыҡ культураларҙың да орлого ваҡ. Шуға ла ваҡытты ла, тәҙрә төбөндәге урынды ла һаҡлау маҡсатында ла уны бер һауытҡа сәсеү - таралған күренеш. Әммә бер нисә аҙна үтеү менән уларҙы барыбер иркенерәк һауыттарға күсереп ултыртырға тура киләсәк. Яҡтылыҡ, дым, туҡлыҡлы матдәләр өсөн "көрәш" үҫентеләргә көс еҫтәмәйәсәк. Бына ошо бер һауытта үҫеп ултырған үҫентеләрҙе айырыу пикировка тип ҡабул ителә лә инде. Тик быының бер үҙенсәлеге бар. Күсереп ултыртҡан саҡта тамырҙың 1/3 өлөшөн семтеп ташларға кәрәк. Һөҙөмтәлә, үҫентенең тамыр системаһы ныҡынасаҡ һәм ул киләсәктә яҡшы уңыш бирәсәк.

Әммә һәр күсереп ултыртыуҙы пикировка тип әйтергә ярамай. Үҫентене йәлләһәгеҙ, уны бөлөкәй һауытындағы тупрағы менән ҙурыраҡ һауытҡа күсереп ултыртығыҙ. Баҡсасылар араһында был ысул йышыраҡ таралған. Бүлмә гөлдәрен дә ошо рәүешле күсерергә өйрәнгәнбеҙ. Шулай уҡ ҡайһы бер культураларға пикировка килешмәй. Әйтәйек, боростоң тамырын өҙәһегеҙ икән, ул аҙаҡтан оҙаҡ ҡына "ауырыясаҡ", баклажандарҙың эре япраҡтарына дым етешмәйәсәк, уларҙың һулыуы ла бар. Тәжрибәле баҡсасылар әйтеүенсә, кәбеҫтә лә бындай пикировканы яратмай. Шуға ла уларҙы баштан уҡ айырым һауыттарға сәсеп, аҙаҡтан даими үҫә торған урынына күсереү ҡулайлы. Ә бына томатҡа пикировка бик яҡшы тәьҫир итә. Тамыр селтәре яҡшы формалаша, был үҫентенең үҙендә лә күренә. Шулай уҡ розмарин, базилик та был ысулды үҙ итә. Астра, петуния, бәрхәт гөлә, циннияға ла пикировка яһайҙар.

Нисек эшләргә? Һәр үҫентегә айырым һауыт, тупраҡ әҙерләргә. Бер нисә пар япрағы булған үҫентегә пикировка эшләргә ярай. Бер тәүлек алдан яҡшы итеп һыу ҡойорға. Үҫентене һауыттан алғас, тамырҙың 1/3 өлөшөн өҙөп алырға. Кәрәк тип тапһағыҙ, "Фитоспорин"ға тығып алырға. Әҙер тупраҡҡа ултыртырға. Томатты тәрәнерәк ултыртырға була. Етерлек итеп һыу ҡойорға. Бер аҙнаға ҡояш нуры тура төшмәгән ергә ҡуйырға. Тик үҫентеләр ныҡ бейегәйеп китеп, пикировка яһарға өлгөрмәһәгеҙ, төп һауытта бер нисә үҫентене ҡалдырып, башҡаларын күсереп кенә ултыртығыҙ.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

## ҒҮМЕРҘӘР ӨҘӨЛӘ ЯНҒЫНДА



**Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты Иглин районының Красный Восход ауылында янғында 1991 һәм 1992 йылдарҙа тыуған ике ир һәләк булыуы тураһында хәбәр итә.**

Ауырғазы районының Туғай ауылында ла, бер йортта янғын сығып, ике кешенең ғүмере өҙөлгән. Ҡотҡарыусылар белдереүенсә, 7х7 метрлыҡ ағас йортҡа ҡапҡан утты һүндергәндә, ике кешенең мәйете табылған. Уларҙың береһе - 62 йәшлек ир, икенсеһенең шәхесе билдәһеҙ.

Өфө ҡалаһы янындағы Чесноковка ауылында теркәлгән янғында ла кеше ғүмере өҙөлә. Янғын һүндереүселәр килгәндә, бүрәнә мунсаны ут ялмап алған була. Уны һүндергән саҡта 70 йәшлек ирҙең йәнһеҙ кәүҙәһе табыла.

БР буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы Өфөнөң Менделеев урамындағы 20 ҡатлы йортта янғын сығыуы тураһында хәбәр итә. Бында 7-се ҡаттағы фатирҙа мөлкәт яна. Янғын майҙаны 15 квадрат метр тәшкил итә. Уттан 18 кеше, шул иҫәптән 7 бала ҡотҡарыла. Тағы 113 кеше, шул иҫәптән 9 бала, янғын һүндереүселәр килгәнгә тиклем янған йорттан үҙаллы сығып өлгөрә.

Һәр осраҡта ла ваҡиғаның сәбәбен һәм шарттарын Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы тәфтишселәре асыҡлай.

Башҡортостанда әленән-әле ҡоро үләндең яныуы тураһында хәбәр килә. Уҙған тәүлектәрҙә Әлшәй, Әбйәлил, Стәрлетамаҡ, Баймаҡ һәм Шишмә райондарында үлән янғыны теркәлгән. Ут өс гектарға яҡын майҙанда һүндерелгән.

"Хәлде контролдә тотабыҙ", - тип билдәләне Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов, хәлгә асыҡлыҡ индереп.

Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мунса яҡҡанда янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен иҫтә тоторға саҡыра:

- мейестең ныҡ ҡыҙыуына юл ҡуймағыҙ;
- торбаны даими тикшерегеҙ һәм уны ҡоромдан таҙартығыҙ;
- ут янғанда мейесте ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ.

## ЭТТӘР ҘӘ ҠУРҠЫТА



**Баш ҡалала берәҙәк эттәрҙең кешеләргә ташланыу осраҡтары арта: бер аҙнала 14 кеше зыян күргән, уларҙың дүртәүһе - балалар.**

Йыл башынан ҡаланың Берҙәм дежур-диспетчер хеҙмәтенә хужаһыҙ эттәргә бәйле 839 мөрәжәғәт килгән, был уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 82-гә күберәк. Был ваҡыт эсендә 1171 эт (былтыр 863) тотолған. Мэрияла уҙған оператив кәңәшмәлә ҡаланың граждандарҙы яҡлау идаралығы начальнигы Руслан Шәйҙуллин шул хаҡта һөйләне.

Уның һүҙҙәренсә, 88 осраҡ теркәлгән, шуларҙың 17-һе - балалар менән. Сағыштырыу өсөн, былтыр ошондай 2 генә осраҡ булған, уларҙың береһе - бала.

"Һуңғы аҙнала ғына 48 мөрәжәғәт ҡабул ителгән. 152 этте тотҡандар, 14 кеше зыян күргән, шул иҫәптән дүрт бала. Барыһы ла медицина ярҙамы алған һәм травмпункттан ҡайтарып ебәрелгән йәки дауаханаға оҙатылған", - тине Руслан Шәйҙуллин.

Ҡала властары халыҡты һаҡ булырға һәм хужаһыҙ йөрөгән эттәр тураһында ЕДДС телефонына хәбәр итергә саҡыра.

**Альмира ДӘҮЛӘТБАЕВА.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 апрель "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, инсц. А. Ишбулдина И. Ҡаҙаҡбаев). 12+
**11 апрель "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+
**12 апрель "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев, А. Абушахманов), музыкаль комедия. 12+
**14 апрель "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов), провинциаль проза. 16+
**16 апрель "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина, И.Ҡаҙаҡбаев). 6+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**10 апрель "Гарнир по-французски"** (М. Камолетти, А. Шрайнер), комедия. 16+
**11 апрель "Золушка"** (Ш. Перро, М.Күлбаев), әкиәт. 12:00. 0+
**11 апрель "Синяя-синяя речка"** (Б. Вахтин, М. Күлбаев), йыр. 18:00. 12+
**12 апрель "Аладдин"** (И. Казакова, Р. Хәкимов), мажаралы ваҡиға. 12:00. 6+
**14 апрель "Ханума"** (А. Цагарели, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 19:00. 12+
**15 апрель "Холодное сердце"** (В. Гауф, , М. Күлбаев), әкиәт. 11:00. 6+
**16 апрель "Я - кулак. Я А-Н-Н-А"** (М. Райцес, О. Мусина), социальная драма. 19:00. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**10 апрель "Удивительное путешествие во времени"** (В. Щербакова). 19:00. 12+
**11 апрель "Три поросенка"** (Д.Гараева). 12:00 һәм 15:00. 0+
**11 апрель "Вот так репка!"**, рус халыҡ әкиәте. 14:00. 0+
**12 апрель "Терем-теремок"** (В. Щербакова), рус халыҡ әкиәте. 12:00 һәм 15:00. 0+
**12 апрель "Ямаҡай бәпкә"** (Г.Андерсен). 14:00. 16+
**15 апрель "Путь Победы"** (Д.Гараева, К.Баязитова). 12:00. 6+
**15 апрель "Путешествие в театр кукол"**. 18:00. 0+
**16 апрель "Путь Победы"** (Д.Гараева, К.Баязитова). 12:00. 6+
**16 апрель "Коллекция смеха"** (О.Куценко). 19:00. 16+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 апрель "Песни о Родине"** "Тауыш" вокаль проекты. 12+
**15 апрель Иван Царевтың** (орган, Мәскәү) концерты. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**14 апрель "Йәшәгән, ти..."** (Г. Хугаев), притча. 12+
**15 апрель "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. БДАДТ-тың гастролдәре. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 апрель "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай), музыкаль комедия. 12+
**11 апрель "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р.Шарт), комедия. 0+
**12 апрель "Снежная королева"** (Г.Андерсен), әкиәт. 12:00. 0+
**12 апрель "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В.Гуркин, М. Күлбаев), комедия. 16:00. 12+
**16 апрель "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. БДАДТ-тың гастролдәре. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**10 апрель Раил Өмөтбаевтың** концерты. 6+

### БР Милли музейы

**12 апрель** Бөтә донъя космонавтар көнөнә ҡарата күргәҙмә асыу. 16:00. 0+
**11 апрель "Кейеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 0+
**11 апрель "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы образы"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 15:00. 6+
**12 апрель "Космический диктант - 2026"** Космонавтар көнөнә ҡарата мәҙәни-ағартыу сараһы. 11:00 - 17:00. 12+
**14 һәм 15 апрель "Кейеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 0+
**15 апрель "АрхеоKIDS"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 12:00. 6+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ТАҒЫ, ТАҒЫ ЕҢЕҮ!



**"Әй Йола" төркөмөнөң Һомай музыкаль клибы "Иң яҡшы йыр" номинацияһында Berlin Music Video Awards премияһы исемлегенә инде.**

Berlin Music Video Awards - 2013 йылдан Берлинда уҙған халыҡ-ара музыкаль клиптар фестивале. Ул бар донъянан режиссерҙарҙы, музыканттарҙы һәм продюсерҙарҙы берләштерә, йыл һайын төрлө илдәрҙән тиҫтәләгән проект туплай. "Был беҙҙең өсөн бик мөһим! Маҡсатыбыҙ шул уҡ - донъяла "Урал батыр" эпосы һәм Башҡортостан тураһында мөмкин тиклем күберәк кеше белһен, - ти артистар. - Беҙҙең клиптарҙы ҡараған һәр кемгә рәхмәт белдерәбеҙ".

"Әй Йола" Рәсәй музыка сәнғәтендәге иң абруйлы премияларҙың береһе - "Виктория"ла еңеү яуланы. Был премия 2015 йылда Ватан музыкаһына булышлыҡ итеү фонды тарафынан булдырылды. Ул йыл һайын үткәрелә һәм йыр сәнғәте даирәһендә юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән ижадсылар бүләкләнә.

Үҙ туған телдәрендә ижад иткән музыканттарҙың быҒаса ундай ҙур конкурста еңеү яулағаны булмаған. Беҙҙең "Әй Йола" был тарафтан да беренсе булып сыҡты! "Залда Рәсәй эстрадаһының бөтә йондоҙҙары тиерлек булды. Шундай мәтрәҙр менән бер сәхнәлә тороу - ҙур мәртәбә", - ти "Әй Йола"лар.

Һәм тағы. Беҙҙең музыканттар Төркиәнең Анкара ҡалаһында TRT AVAZ халыҡ-ара телеканалында сығыш яһаны. Анкаранан тура эфирҙы 30-ҙан ашыу ил тамашасыһы ҡараны. Концерттан һуң Башҡортостан музыканттарына Төркиә президенты Рәжәп Тайып Эрдоған менән аралашыу мөмкинлеге бирелде. Ул яҡташтарыбыҙҙың ижадын юғары баһаланы.

# ҒӘСКӘРОВСЫЛАР ДОНЪЯ ИҢЛӘЙ



**5-13 апрелдә Башҡортостандың Фәйзи Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт академия ансамбле Ҡурғанда, Төмәндә, Ханты-Мансиҙа, Нижневартовскиҙа, Лянторҙа, Лангепаста, Когалымда үҙенең "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" программаһы менән сығыш яһай.**

"Беҙ - Рәсәй" программаһы ансамбль гастролдәренең географияһын киңәйтте. 2025 йылда Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында, шулай уҡ Татарстандың Чистополь, Яр Саллы ҡалаларында, Актанышта концерттар уҙҙы. Беҙҙең коллектив 85 йылдан ашыу халыҡ традицияларын һаҡлап килә. Бындай гастролдәр - Рәсәй тамашасыларын башҡорт халҡының мәҙәниәте менән таныштырыу һәм донъя халыҡтары бейеүҙәрен күрһәтеү өсөн шәп мөмкинлек. Был Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылында айырыуса символик мәғәнәгә эйә", - тип билдәләне ансамблдең директоры-художество етәксеһе Нәзир Байегетов.

Билдәле булыуынса, Фәйзи Ғәскәров ансамбленең "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" концерт программаһы ЮНЕСКО наградаларына - "Биш ҡитға" алтын миҙалына һәм "Донъя илсеһе" дипломына лайыҡ булған. Гастролдәр Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының Бөтә Рәсәй гастроль-концерт планына ярашлы "Беҙ - Рәсәй" федераль программаһы сиктәрендә ойошторола.

# "МИРАҪ"ТАР ҘА СӘФӘР СЫҠТЫ

**8-15 апрелдә Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле Татарстанда "Донъя ритмдары" концерт программаһы менән сығыш яһай.**

Башҡортостан коллективын Лениногорск, Бөгөлмә, Яр Саллы, Мамадыш, Чистополь, Олыяҙ (Кукмара районы) һәм республиканың баш ҡалаһы Ҡаҙан сәхнәһендә көтәләр. "Донъя ритмдары" программаһы төрлө халыҡтарҙың йырбейеүҙәрен һәм инструменталь көйҙәрен үҙ эсенә ала. Башҡорт милли уйын ҡоралдары ҡурай һәм ҡыл-ҡумыҙ моңон тыңларға, этник мәҙәниәттәрҙең төрлөлөгөн сағылдырған хореография өлгөләрен һәм сәхнә костюмдарын күрергә мөмкин. "Мираҫ" ансамбленең Татарстанға гастролдәре изге йолаға әүерелә бара. 2024 йылда республика тамашасылары коллективты йылы ҡабул итте. Быйылғы гастролдәр ике төбәк араһындағы ижади хеҙмәттәшлекте дауам итә һәм тамашасыларҙы ансамблдең репертуары менән таныштыра", - тип хәбәр итә коллективтың матбуғат хеҙмәте.

"Мираҫ" ансамбле "Беҙ - Рәсәй" программаһы сиктәрендә Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының Бөтә Рәсәй гастроль-концерт планында ҡатнаша. 2022 йылда коллектив илдең муниципаль ансамблдәре араһында тәүгеләрҙән булып программаға һайлап алынды һәм йыл һайын федераль майҙансыҡтарҙа Башҡортостан мәҙәниәте менән таныштырып, ошо статусты раҫлай. 6+

# "УРАЛ БАЛАЛАРЫ ТАУЫШЫ"

**Сибайҙа йәш сәсәндәрҙең V "Урал балалары тауышы" республика конкурсына йомғаҡ яһалды. Унда Башҡортостандың төрлө мөйөштәренән, шулай уҡ Силәбе өлкәһенән 80-дән ашыу йәш талант ярышты, тип хәбәр итә халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәте.**

Конкурс барышында тәжрибә уртаҡлашыу өсөн махсуслаштырылған майҙансыҡ эшләне. Ҡатнашыусылар өсөн "Эпик әҫәрҙәрҙе башҡарыу оҫталығы" һәм "Эпосты башҡарыу манераһына өйрәтеү" темалары буйынса семинарҙар, шулай уҡ оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо. Жюриҙа күренекле фән, мәҙәниәт һәм мәғариф вәкилдәре Гөлнур Хөсәйенова, Гөлназ Ғәлина, Закирйән Әминев, Олеся Әхмәдрәхимова, Мирас Үҙәнбаев һәм башҡалар эшләне.

Жюри ҡарары менән 5-11 йәшлектәр төркөмөндә беренсе урынға Рузилә Бадранова (Сибай), Милана Ҡаҙаҡбаева (Сибай), Зарина Мәрҙәмшина (Хәйбулла районы) лайыҡ булды. Ғаилә сығыштары айырым номинацияла баһаланды. Сәғитовтар (Бөрйән районы), Хисмәтуллиндар (Ишембай), Латиповтар (Мәләүез), Ильясовтар (Хәйбулла районы), Мәмбәтовтар (Хәйбулла районы), Иҙрисовтар (Иглин районы) ғаиләләре иң яҡшылар тип танылды.

Ойоштороусылар булып Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Сибай хакимиәте, К.А. Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжы, "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе сығыш яһаны.

# ХАЛЫҠТАРҘЫ БЕРЛӘШТЕРГӘН КИТАП

**Мәскәүҙә "Поэзия и проза тюркских и монгольских народов" тип аталған күләмле антология донъя күрҙе.**

Төрки һәм монгол халыҡтарының әҙәбиәтен берләштергән бындай антология беренсе тапҡыр нәшер ителеүе менән иғтибарға лайыҡ. 18 телдә ижад ителгән әҫәрҙәр 135 авторҙың хеҙмәтенән хасил. Шиғыр һәм хикәйәләр ике телдә тәҡдим ителә, йәғни авторҙарҙың туған телендә һәм һәм уларҙың урыҫ теленән тәржемәһе йәнәш бирелә. Антология "Бөгөнгө заман әҙәбиәте" серияһында сыҡты, тимәк, ул беҙгә замандыбыҙҙың һулышын тойорға, замандаштарыбыҙҙың ижади мөхитен аңларға һәм шунда үтеп инергә ярҙам итә. Башҡорт бүлегенең мөхәррире әҙәбиәт белгесе, Милли әҙәбиәт музейы директоры Зәки Әлибаев, Рәсәй халыҡтарының әҙәбиәте антологияһы буйынса эш артабан да дауам итәсәк, тине. Ошо серияла донъя күргән баҫмаларҙың исем туйы Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә үтеп тора икән. Беҙ атаған антологияға һигеҙ башҡорт авторының әҫәрҙәре индерелгән: Әмир Әминев, Рәлис Ураҙғолов, Салауат Әбүзәр,Фәнил Бүләков, Гүзәл Ситдиҡова, Миңзәлә Шөғәйепова, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Фәрзәнә Аҡбулатова, Зөлфиә Ханнанова, Гөлнара Хәлфетдинова. Әҙәби һүҙ - халыҡтарҙың үҙ-ара аңлашыу сараһы, антологияның ҡиммәте лә шунда.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӘШӘҮ ӨСӨН ЯРАТЫЛҺЫН КЕШЕ

Бер түрәгә дау килһә - түрәләр һөйөнөр, күп түрәгә дау килһә - түрәләр берегер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Берәүҙәр һөйөү өсөн, икенселәр йәшәү өсөн яратылған.

**(Альберт Камю).**

Бөйөк кеше уларҙың бөйөклөгөн аңлап, бөйөк эштәр өсөн көрәшә, ә ахмаҡ уларҙың ниндәй дәрәжәлә ауыр икәнен аңламай көрәшкә тотона.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Асыҡ күңелле кешенең йөҙө лә асыҡ.

**(Фридрих Шиллер).**

Бәхәскә тотонор алдынан унын ахыры дошманлыҡ менән түгел, ә дуҫлыҡ менән тамамланыуына иҫәп тот.

**(Диодор Сицилийский).**

Ысын бәхет - үҙебеҙҙең Хоҙай һәм кешеләр алдындағы бурысты аңлау, киләсәк тураһында борсолмайынса, бөгөнгөгә ҡыуаныу.

**(Сенека).**

Ғашиҡ кеше мотлаҡ ахмаҡлыҡтар ҡыла...

**(Гете).**

Хоҙай һөмһөҙ була алмай, юғиһә, ул бит кешене көләү менән бүләкләмәҫ ине.

**(Сидней Харрис).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ярлы оҫтаның шундай ҡыҙыҡ ҡына ғәҙәте булған: оҫтаханаһында эшләп арыған, үҙенән алыҫ булмаған урында урынлашҡан бер хан һарайындай өйгә килеп, ихатаһына инеп, өйҙөң ишеген шаҡыған. Бай хужа күренеү менән, баш кейемен һалып, уға сәләм биргән дә, башҡа бер ни өндәшмәй, кире боролоп, ҡайтып киткән. Был хәл бик күп тапҡырҙар ҡабатланған.**

**- Һинә минән ниҙер кәрәкме? - тип һораған берҙән-бер көндө бик ныҡ аптыраған бай хужа. - Бына байтаҡтан алып һин минең йортом ишегенә шаҡыйһың, тик бер ни ҙә өндәшмәйһең. Ниндәйҙер мохтажлығың булһа, әйт, хәл итергә тырышырмын...**

**- Рәхмәт әфәндем, - тигән оҫта. - Миңә һеҙҙән бер ни ҙә кәрәкмәй. Мин һеҙгә байҙар нисек йәшәй икәнен күрергә, һеҙҙең байлыҡҡа тамаша ҡылып, күңел йыуатырға ғына киләм. Быны беҙ, ярлы кешеләр генә эшләй алабыҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, һеҙҙең кеүек бай кешеләр бындай күңел йыуатыусы тамашанан мәхрүм, сөнки һеҙҙең тирәлә бит тик ярлылар ғына йәшәй..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 26014

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирлек:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
"Башҡортостан Республикаһы Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.
Тел.: 8 (347) 226-99-48.
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 9.04.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 9.04.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 10.03.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2677
Заказ - 626